



Таңһылыу Кусимова
Светлана Бикҡолова

# БАШҠОРТ ИСЕМДӘРЕ

# БАШКИРСКИЕ ИМЕНА





*Ҡəҙерле атайым Хəжим (Хəжемөхəмəт) һəм əсəйем Мəсүмə (Бибиғəсүмə) иҫтəлегенə, балаларым Азамат һəм Таңсулпан, ейəн-ейəнсəрҙəрем Рəшит, Тимур, Арслан, Диана, Камилаға арнайым.*

*Таңһылыу Кусимова*

Таңһылыу Кусимова
Светлана Бикҡолова

# БАШҠОРТ ИСЕМДӘРЕ

КИТАП
Өфө – 2005

Тансылу Кусимова
Светлана Биккулова

# БАШКИРСКИЕ ИМЕНА

КИТАП
Уфа – 2005

УДК 81' 373.23
ББК 81
К 90

**Кусимова Т. Х., Бикколова С. Ә.**

К 90 Башҡорт исемдәре. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 2005. – 224 бит.

Монографияның төп маҡсаты – ата-әсәләргә балаға исем ҡушыуҙа ярҙам итеү. Шуның менән бергә, хеҙмәт киң ҡатлам уҡыусыларҙы хәҙерге һәм боронғо башҡорт исемдәре, уларҙың тарихы, исем ҡушыу йолалары менән таныштыра.

Исемдәрҙең яҙылышы, аңлатмалары һәм белешмә материалдар ике телдә – башҡорт һәм рус телендә бирелә.

Китап загс бүлектәре хеҙмәткәрҙәре өсөн дә файҙалы ҡулланма булып хеҙмәт итәсәк.

Монография халҡыбыҙҙың рухи мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған һәр кеше өсөн кәрәкле сығанаҡ булыр. Халҡыбыҙ тарихын ентекле өйрәнергә теләгән филолог, этнограф, фольклорсы киүек мәҙәниәт әһелдәре һ. б. белгестәрҙе бай мәғлүмәт менән таныштырыр.

**ТП –77/05**
**ISBN 5-295-03669-3**

© Таңһылыу Кусимова, Светлана Бикколова, 2005

## БАШ ҺҮҘ

Бала тыуа – донъяға яңы кеше килә. Баланың донъяға килеүе беҙҙең йәмғиәттә уға исем ҡушып, тыуыу тураһында таныҡлыҡ биреп беркетелә. Балаға исемде ата-әсәһе ҡуша. Күп ата-әсәләр балаға исемде алдан уйлап, ололар, туғандары менән кәңәшләшеп ҡуша. Исем һайлағанда уның ҡолаҡҡа ятышлы яңғырашы – аһәңе, яҡшы мәғәнәле булыуы, башҡортса-русса әйтелеше һәм яҙылышы иҫәпкә алына. Бала исемен ғүмере буйына йөрөтә, исем кеше булмышының бер сифатына, билдәһенә әйләнә. Ҡыҙҙар исеменә ҡарағанда малайҙарға исем ҡушыуҙа ҙур яуаплылыҡ талап ителә. Малай, ир бала, киләсәктә атай булыр кеше, уның исеме нәҫел-нәсәпте дауам иткән балаларҙың аталығына (отчествоға) әйләнә, ҡайһы бер осраҡтарҙа фамилия ла яһай. Башҡорт исемдәренең тәрбиәүи мәғәнәһен дә иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Бала бәләкәйҙән үҙ исеменең мәғәнәһен белеп, исемен яратып үҫһә, ул балала үҙенең милләтенә ҡарата ғорурлыҡ уяна. Һәр кеше исемен ғорур йөрөтһөн, исеменән оялып, исемен әйтергә уңайһыҙланып йөрөмәһен өсөн ата-әсә баланы бәләкәйҙән өйрәтергә тейеш. Исем ҡушҡанда ата-әсәнең ниндәй теләк, ниндәй уй менән шул исемде ҡушыуын балаға аңлатыу уға ыңғай тәьҫир итә, сөнки исемдәрҙең күбеһендә балаға ҡарата тик изге теләктәр: һаулыҡ, оҙон ғүмер, бәхет, мул тормош, аҡыллы, тәүфиҡлы булыу төшөнсәләре һалынған. Юҡҡамы ни ата-әсә балаһына «исеменә тап төшөрмә», «исемеңде сығарма», тип иҫкәртә. Һәр халыҡтың теленә, йәшәү рәүешенә, тарихына бәйле үҙ исемдәре, исем ҡушыу йолалары бар. Төрки халыҡтарҙың ҡайһы берҙәрендә, мәҫәлән, башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, төрөкмән, әзербайжан, үзбәк һ. б. боронғо исемдәр байтаҡ һаҡланған. Ләкин бөтә халыҡтар ҙа үҙ исемдәрен, исем ҡушыу йолаларын төрлө тарихи сәбәптәр арҡаһында һаҡлап ҡала алмаған, тарих төпкөлөндә юғалған. Был йәһәттән беҙ ата-бабаларыбыҙға үпкәләй алмайбыҙ, күп исемдәребеҙ, йолаларыбыҙҙы һаҡлап, беҙгә, беҙҙең быуатҡа килтереп еткергән боронғолар.

«Исем кешенең яҙмышына тәьҫир итә, яҙмышын билдәләй», тигән ҡараш йәшәгән борон халыҡтарҙа. Ҡайһы бер халыҡ вәкилдәренең беҙ исеменә ҡарап милләтен билдәләй алабыҙ. Исем кешенең визит карточкаһы, шәхес таныҡлығы һымаҡ ул шәхестең ниндәй илдән,

ниндәй милләт икәнен күрһәтеп тора. Башҡорттоң да исеме – уның башҡортлоғон күрһәткән билдәгә әйләнһә икән. Хеҙмәттең аҙағында «Исемдәр тарихы» тигән бүлек менән танышҡандан һуң, һәр кем балаһына исемде уйлап, башҡорт исемен ҡушыр, тигән уй тыуа.

Был хеҙмәттә башҡорт теле һәм тарихы буйынса тупланған төрлө сығанаҡтарға, Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә, Ырымбур, Һамар (Ырғыҙ буйы), Силәбе, Ҡурған яҡтарында экспедицияла, командировкала үҙем йыйған материалдарға һәм башҡа төрки халыҡтарҙың исемдәрен тикшереүселәрҙең хеҙмәттәренә таянып, башҡорт исемдәренә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе киң һәм ентекле яҡтыртырға тырышылды.

Һеҙҙең иғтибарға тәҡдим ителгән был һүҙлектә 4000-гә яҡын исем алынып, уның 3000-е ир-ат, 1000-е ҡатын-ҡыҙ исемен тәшкил итә.

Һүҙлектең төп маҡсаты – балаға исем һайлауҙа ярҙам итеү. Бынан тыш, ғилми ихтыяждан сығып, тел, халыҡ тарихын төшөнөүгә булышлыҡ итеү маҡсатында, бөгөнгө көндә ҡулланылмаған йәки һирәк осраған (фамилия һәм аталыҡтарҙа һаҡланған) боронғо исемдәр ҙә һүҙлеккә индерелде. Исемдәр, уларға аңлатма, белешмәләр башҡортса һәм русса бирелде. Был осраҡта бөгөнгө көндә йәштәрҙең, үҫмерҙәрҙең ике телдә һөйләшеүе лә күҙ алдында тотолдо.

Киләсәктә башҡорт һәм рус йәки рус һәм башҡорт телен өйрәнеүселәр өсөн дә был һүҙлек бер ярҙамсы сығанаҡ булып хеҙмәт итәсәк. Хеҙмәттең русса бирелгән өлөштәре һүҙмә-һүҙ башҡортсанан тәржемә булып тормай, сөнки ул бүлектәр айырым яҙылды.

Бөтә быуаттарҙа ла, бөтә халыҡтарҙа ла балаға ҡарата бер төрлө ҡараш йәшәй: бала ныҡ, һауһаҡ, көслө, аҡыллы, матур, һәләтле, ғилемле, тәүфиҡлы булһын, һәм ошо изге теләк балаға исем ҡушыуҙа, баланың исемендә сағылыш ала килгән.

Башҡорт халҡы, донъялағы бөтә халыҡтар кеүек, үҙенең йәшәү дәүерендә үҙ исемдәре йыйылмаһын һәм исем ҡушыу йолаларын тыуҙырған. Башҡорт исемдәре теҙмәһе ҙур һәм йөкмәткеһе менән ифрат бай. Үҙеңдең зауығыңа, теләгеңә ҡарап исемде һайлай ғына бел! Билдәле авар яҙыусыһы Рәсүл Ғамзатов «Минең Дағстаным» тигән китабында (1967) исем ҡушыу тураһында былай ти: «Ҡыҙҙар исеме йондоҙҙар балҡышына һәм сәскәләр нәфислегенә оҡшарға, ә ир-ат исемендә ҡылыстар сыңлауы һәм китаптар аҡылы сағылырға тейеш».

# ПРЕДИСЛОВИЕ

Рождение нового гражданина в нашей стране закрепляется регистрацией и выдачей свидетельства о рождении, где записываются фамилия, имя, отчество.

Многие родители к выбору имени относятся со всей серьезностью, и это понятно, ибо человек, получив имя, носит его всю свою жизнь.

Наречение новорожденного – ответственная и непростая задача: имя должно быть красивым, благозвучным и желательно сочетание с отчеством. Собственное имя человека имеет также воспитательное значение.

Мотивов выбора имени много, но в основном он зависит от личных вкусов, эстетических представлений и культурно-образовательного уровня человека.

У каждого народа своя система собственных имен и большое разнообразие национальных традиций в выборе имени и в церемонии называния. Каждый народ, соответственно своему родному языку, имеет свод (систему) собственных имен и традиций их наречения. Вместе с тем для всех существует единая форма записи и официального наименования лица, которая включает в себя фамилию, имя и отчество.

В данный словарь включено около 4000 антропонимов, из которых около 3000 являются мужскими и около 1000 – женскими именами.

Словарь носит в основном рекомендательный характер. Помимо типичных, наиболее распространенных имен, в него включены имена традиционные, которые употребляются в современных фамилиях и отчествах.

Собственные имена в словаре даны на башкирском и русском языках, снабжены этимологической, иногда – исторической справкой.

Выбирая принцип двуязычности именника, мы исходили из того, что основная часть городского и сельского населения, в особенности молодежь и подростки, двуязычна. Более того, мы полагаем, что при изучении башкирского и русского языков данная книга может послужить вспомогательным источником.

У башкир, как и у других народов мира, в течение долгого времени исторического развития сложились своя система собствен-

ных имен и традиции их наречения. Некоторые из них продолжают существовать и в настоящее время. Словник башкирских антропонимов достаточно обширен, и родители соответственно своим вкусам, желаниям могут выбрать своему ребенку имя по душе.

В данной работе, опираясь на большой исторический и филологический материал, а также на исследования других тюркологов-ономастов, мы старались осветить вопросы, связанные с собственными именами башкир.

# ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

Һүҙлек башҡорт һәм рус телдәрендә ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исемдәрен тәшкил иткән ике бүлектән тора.

Һәр исем үҙ бүлегендә алфавит тәртибендә бирелеп, беренсе рәттә исемдең башҡортса яҙылышы, икенсе рәттә башҡорт телендә шул исемгә аңлатма, ҡайһы бер урындарҙа тарихи мәғлүмәт килтерелә. Өсөнсө рәттә – исемдең русса яҙылышы, дүртенсе рәттә шул исемгә булған аңлатма һәм башҡа мәғлүмәттәр рус телендә бирелә. Ҡайһы бер (*Ғайса, Муса, Сафа* һымаҡ) ир-ат исемдәренән отчество (аталыҡ) төрлө формаларҙа яһалыуын иҫәпкә алып дөрөҫ тип табылған формаһы бирелде (*Ғайса – Ғайсиевич, Ғайсиевна, Муса – Мусаевич, Мусаевна, Сафа – Сафиевич, Сафиевна* һ. б.).

Башҡорт телендә ҡайһы бер һүҙҙәрҙең ҡалын һәм нәҙек әйтелеше иҫәпкә алынып, ғәрәп, фарсы телдәренән үҙләштерелгән бер төркөм исемдәр ике (ҡалын һәм нәҙек) вариантта ҡалдырылды (мәҫ. *Асма – Әсмә, Шакир – Шәкир, Майсара – Мәйсәрә, Акрам – Әкрәм* һ. б.).

Исемдәрҙең сығышы, ҡайһы телдән үҙләштерелеүе махсус тамғалар менән күрһәтелде (баш. – *башкорт*, ғәр. – *ғәрәп* һ. б.).

Ҡушма исемдәрҙең бер өлөшө, тарҡатылып, «+» тамғаһы аша (*ай+ һылыу, миң+зифа, йән+бикә, иҫән+бикә, иҫән+бай*) яҙылды.

Һәр исем, исем яһаусы һүҙҙәргә мөмкин тиклем аңлатма бирелә. Исем янында аңлатма булмаған осраҡта исемдең бер өлөшөн үҙ алдына бирелгән урындан йәки исем яһаусы ялғауҙар бүлегенән (181–186-сы биттәр) ҡарап асыҡларға мөмкин.

Исемдәр составында йыш ҡулланылған һүҙҙәр, ялғауҙар – исем компоненттары теҙмәһе – һүҙлектең аҙағында бирелде.

Исемдең мәғәнәләре бер-береһенән айырылып торған осраҡта 1), 2) һандары, әгәр ҙә мәғәнә айырымлығы аҙ булһа, нөктәле өтөр менән айырылды (**ҒАЙСАР** *ғәр.* – 1) ҡайнар шишмә; 2) император. Йәки **АЗАМАТ** *ғәр.* – бөйөк, ғорур; ил ағаһы; батыр егет).

Хәҙерге көндә ҡулланылышы сикләнгән йәки бөтөнләй ҡулланылмаған, ләкин фамилия, аталыҡ (отчествола), ата-әсә, олатай-бабай, ата-баба – оло быуын кешеләре исемендә һаҡланып, халыҡ тарихында йәмғиәт үҫешендә билдәле бер осорҙо, халыҡ тормошонда булып үткән мөһим ваҡиғаларҙы сағылдырған (*Тәңребирҙе, Аллағол, Тәңреғол,*

*Муллағол, Яугилде, Боскон, Нух* һ. б.) һымаҡ һәм халыҡ тарихында, халыҡ хәтерендә уйылып ҡалған мәшһүр шәхестәрҙең исеме ғилми ихтыяждан сығып һүҙлеккә индерелде.

Көнбайыш халыҡтарынан рус теле аша үҙләштерелгән, һуңғы осорҙа ата-әсәләр ижад иткән һәм халыҡта күп кенә таралған ҡайһы бер телгә ятышлы исемдәрҙе лә *неол.* – яңы исемдәр билдәһе менән һүҙлеккә индерҙек (мәҫ. *Лира*, *Луиза*, *Флорида*, *Флиза*, *Флүзә*, *Рима*, *Марсель*, *Альберт*, *Артур* һ. б.). Ә инде төрлө билдәләрҙән алынып, әйтелеше, яңғырашы телгә лә, ҡолаҡҡа ла ятмаған, бер мәғәнәһе булмаған исемдәр һүҙлеккә индерелмәне (*Алик*, *Валера*, *Эдик*, *Фисә*, *Лимфа*, *Флид*, *Вильсор* һ. б.).

Башҡорт исемдәренең русса әйтелешендә баҫым һуңғы ижеккә төшә.

## БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ
## БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| А | Б | В | Г | Ғ | Д | Ҙ |
| Е | Ё | Ж | З | И | Й | К |
| Ҡ | Л | М | Н | Ң | О | Ө |
| П | Р | С | Ҫ | Т | У | Ү |
| Ф | Х | Һ | Ц | Ч | Ш | Щ |
| Ъ | Ы | Ь | Э | Ә | Ю | Я |

# ҠЫҪҠАРТЫЛҒАН БИЛДӘЛӘР

| | |
|---|---|
| *а.* | – ауыл |
| *б.* | – бит |
| *БАССР Тh* | – Башҡорт АССР-ының топонимдар һүҙлеге |
| *баш.* | – башҡорт теле |
| *бор.* | – боронғо |
| *БХӘ* | – башҡорт халыҡ әкиәттәре |
| *БШ* | – башҡорт шәжәрәләре |
| *гр.* | – грек (һүҙе) |
| *ғәр.* | – ғәрәп теле |
| *диал.* | – диалект |
| *ДТС* | – древнетюркский словарь |
| *ер-һыу ат.* | – ер-һыу атамалары |
| *и.* | – исем |
| *ингл.* | – инглиз теле |
| *ирк.* | – иркәләү формаһы |
| *й.* | – йыл |
| *йәһ.* | – йәһүд (һүҙе) |
| *k-кыҙ и.* | – ҡатын-ҡыҙ исеме |
| *кеср.* | – кесерәйтеү формаһы |
| *лат.* | – латин (һүҙе) |
| *МИБ* | – материалы истории Башкирской АССР |
| *монг.* | – монгол теле |
| *мәғ.* | – мәғәнә |
| *мәҫ.* | – мәҫәлән |
| *нем.* | – немец теле |
| *неол.* | – неологизм (яңы үҙләштерелгән) |
| *ОИБ* | – очерки по истории Башкирской АССР |
| *р.* | – район |
| *рус.* | – рус теле |
| *сағ.* | – сағыштырығыҙ |
| *санскр.* | – санскрит (һүҙе) |
| *т.* | – тел (телендә) |
| *тар.* | – тарихи |
| *төрк.* | – төрки |
| *ф.* | – фамилия |
| *фарс.* | – фарсы (теле, һүҙе) |
| *этн.* | – этноним (ырыу, ара атамаһы) |
| *һ. б.* | – һәм башҡалар |

# УСЛОВНЫЕ СОКРАЩЕНИЯ

| | |
|---|---|
| *ар.* | – арабский язык |
| *баш.* | – башкирский язык |
| *БНС* | – башкирские народные сказки |
| *БШ* | – башкирские шежере |
| *гр.* | – греческое слово |
| *д.* | – деревня |
| *диал.* | – диалект |
| *др.* | – древний |
| *ДТС* | – древнетюркский словарь |
| *евр.* | – еврейское (слово) |
| *и.* | – имя |
| *и др.* | – и другие |
| *ласк.* | – ласкательная форма |
| *лат.* | – латинское (слово) |
| *МИБ* | – материалы по истории Башкирской АССР |
| *монг.* | – монгольский язык |
| *муж.* | – мужской |
| *напр.* | – например |
| *неол.* | – неологизм |
| *ОИБ* | – очерки по истории Башкирской АССР |
| *перс.* | – персидский язык |
| *рус.* | – русский язык |
| *санскр.* | – санскритский язык |
| *СТ БАССР* | – словарь топонимов Башкирской АССР |
| *см.* | – смотри |
| *соч.* | – сочинения |
| *ср.* | – сравните |
| *стр.* | – страница |
| *тюрк.* | – тюркский |
| *уменьш.* | – уменьшительная форма |
| *этим.* | – этимология |
| *этн.* | – этноним; название родов и родовых подразделений |
| *яз.* | – язык |

# ИСЕМДӘР ДОНЪЯҺЫ

Башҡорттар борон-борондан баланы иң ҙур байлыҡ тип һанаған. Бала тыуыу – яңы кешенең донъяға килеүе ғаиләлә, йәмғиәттә ҙур ваҡиға итеп ҡабул ителгән, һәр бала үҙ өлөшө, үҙ бәхете менән тыуа, тигән ололар. Бала нәҫел-нәсәптең ебен өҙмәй йәшәүҙе дауам итеүсе, ата-бабаларҙың рухын киләһе быуындарға тапшырыусы, ғаиләгә йән һәм йәм биреүсе, донъяла йәшәүҙең төп мәғәнәһе икәнен халыҡ бер ваҡытта ла иҫәнән сығармаған. «Бала исеменә оҡшай», «Исеменә күрә есеме», тигән халыҡ. Ата-әсә, бала – бауыр ите, тип күтәп алған балаһын ҡәҙерләп, һөйөп уға оҙон ғүмер, бәхет теләп исем ҡушҡан. Баланың исемендә улар үҙҙәренең киләсәккә булған уй-хыялдарын, өмөт-теләктәрен сағылдырырға тырышҡан. Шулай итеп, халыҡтың донъяға ҡарашы, фекерләү кеүәһе, аҡылы, милләтебеҙҙең быуаттар буйына йәшәү рәүеше, халыҡ тарихы, тормош фәлсәфәһе, бай эске донъяһы төрлө мәғәнәле, тәрән йөкмәткеле исемдәр һәм исем ҡушыу йолаларын тыуҙырған. Быуаттар буйына ижад ителгән исемдәр һәм исем ҡушыу йолалары бөгөнгө көндә беҙҙең рухи байлығыбыҙҙың ҙур бер өлөшөн тәшкил итә.

Йола буйынса борон тәүге исемде балаға кендек инәһе (кендек әбейе) ҡушҡан. Кендек әбейе яңы тыуған сабыйҙы ҡабул итеп алғас (донъяла һәр нәмәнең, һәр заттың исеме – атамаһы була, тигән ҡараштан сығып), баланың бер ҡулына ебәк еп бәйләп, ҡолағына шыбырлап ҡына, исемең шулай булһын, тип бер исем әйтеп йүргәккә төргән. Был тәүге исем – «йүргәк исеме» тип аталған. Йүргәк исеме һәм ебәк еп баланы төрлө яман заттан, ен-пәрейҙән һаҡлай, тигән ышаныу йәшәгән, һуңынан балаға рәсми исем ҡушыу йолаһы атҡарылған. Исемде ырыу аҡһаҡалдары, ата-бабалар, ололар ҡушҡан. Халыҡ йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә нигеҙләнеп барлыҡҡа килгән «**исем туйы**» үткәрелгән. Артабан ислам дине инә башлағас, исем ҡушыу тантанаһы муллалар ҡулына күскән.

Совет осоро менән һәр халыҡтың тормошонда, рухи донъяһында ҙур һынылыш башлана. Был яңы дәүер халыҡ аңына ят төшөнсәләр, тыуған телебеҙгә яңы һүҙҙәр алып килә. Халыҡ йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре «иҫкелек ҡалдығы» тип аталып, көндәлек тормошта ҡулланылмай башлай. Шул иҫәптән элекке башҡорт исемдәре һәм исем ҡушыу йолалары «иҫкелек ҡалдығы»на әйләнә. Ошо осорҙа ике һүҙҙән торған исемдәр ҡыҫҡартыла, «*алла, кол, бай, йән, хан, хак, кужа*», һ. б. тигән һүҙҙәр менән яһалған иҫемдәрҙән «ҡотолоу», заманса ҡыҫҡа исемдәр менән мауығыу башлана. Бөгөн ҡулланылып йөрөгән

*Бирҙин, Галин, Килдин, Кужин* һ. б. фамилиялар шул заман «яңылығы» булып тора. *Бирҙин – бирҙе, Галин – Fәле, Килдин – килде, Кужин – Ҡужа* тигән исемгә ҡушылып йөрөгән һүҙҙәр – исем компоненттары элекке заманда айырым исем булып ҡулланылмаған, ә икенсе бер һүҙ менән бергә бөтөн мәғәнәгә эйә булған исем булып йөрөгән. Мәç., *Дәүләтбирҙе, Акбирҙе, Тимерғәле, Кинйәғәле, Ейәнғәле, Дәүләткилде, Килдебай, Аккужа, Ҡужабай, Ҡунакkужа* һ. б. Аңһыҙ, аңлап еткермәй һәр төрлө «яңылыкка» ынтылыу, үҙ тамырҙарынан ситләшеү, булмышыңды юғалтыу милләттең байтаҡ өлөшөн иң изге ҡомартҡыһынан – теленән яҙҙырған. Бөгөнгө көндә милләтте уятыу, тергеҙеү, үҙ асылына ҡайтарыу өсөн ынтылған саҡта исемдәр һәм исем ҡушыу йолалары, исемдәр тарихы ғалимдар – телселәр, тарихсылар, этнографтар һәм географтарҙа – ғына түгел, һәр аңлы, мәҙәнилеккә ынтылған кешелә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Һәр кем – атаәсәме, өләсәй-олатаймы, ҡартинәй-ҡартатаймы – үҙ ғүмерендә бала тыуыу, балаға исем ҡушыу тантанаһында ҡатнаша. Быуаттар буйына формалашып бөгөнгәсә беҙгә килеп еткән, һаҡланған исемдәр һәм исем ҡушыу йолалары – ул халыҡ байлығы. Бындай рухи байлыҡ һәр халыҡта ла бер төрлө һаҡланмаған. Халыҡтың тарихы, ауыҙ-тел ижады; фольклоры ни ҡәҙәр бай һәм тәрән йөкмәткеле булһа, тел үҙенсәлектәре һаҡланһа, шуға бәйле исемдәр һәм исем ҡушыу йолалары ла күп һаҡланып ҡала. Миçалға төрки халыҡтарҙан башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, төрөкмәндәрҙе килтерергә мөмкин. Бөгөнгө көндә һәр халыҡ үҙ мәҙәниәт байлығын бөртөкләп йыйып, туп-ларға тырышып ятҡан бер мәлдә башҡорт исемдәре һәм исем ҡушыу йолаларының күбеһе халҡыбыҙҙа һаҡланып ҡалыуы һәм йәшәүен дауам итеүе баһалап бөткөһөҙ шатлыҡлы күренеш. Башҡорт исемдәре тураһында материалдарҙы 1967 йылдан башлап Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә, Ырымбур, Һамар өлкәләрендә йыя башланым. Был йылдарҙа ауылдарҙа халыҡтың үҙ йолаларын һаҡлауы, исем ҡушыуҙа һүҙҙең тылсымлы бер көсөнә ышанып ҡарауы һәм балаға тик изге теләктәр менән исем ҡушыуы бөгөнгәсә хәтерҙә. 1968 йылда Бөрйән районы Яуымбай ауылында бер инәй менән әңгәмәләшәм: «Ниңә ул малайығыҙға исемде Үлмәçбай тип ҡуштығыҙ?» – тип һорайым. Инәй: «Гел балалары үлде лә торҙо. Үлмәçбай тип ҡушҡайнылар, торҙо бит бала, ана хәҙер 11 йәштә, Алланың биргәне!» – тип ейәне тураһында һөйләне. Халыҡ араһында бер урында исемде табаһың, икенсе урында шул исемгә бәйле йолаһы табыла. Ырымбур яҡтарында «миң» һүҙе менән исемдәр күп. «Әгәр миңле балаға «миң» һүҙе менән исем ҡушмаһаң, миңе аҙып китеп бөтә тәнен ҡаплап алыуы бар», – тинеләр Үтәғол ауылында. Йөҙөкәй, Йөҙлөбикә тигән исемдәрҙең ҡушылыу тарихын һис аса алмай йөрөгәндә үҙебеҙҙең ауылда (Асҡар а., Әбйәлил р.) Йөҙөкәй апай була торғайны бит әле, тип ауылға ҡайттым. Әсәйемдән һорашам. Ул уйлап та торманы: «Ниңә, ул бит йөҙлөк менән тыуған (йөҙлөктө беҙҙә бөркәнсек тә тиҙәр). Шуға Йөҙөкәй тип ҡушҡандар. Йөҙлөк, бөркәнсек менән тыуған бала бәхетле була, ти. Ул бөркәнсекте алып, яҙып киптереп, тәҙрә яңағына элеп ҡуяһың», – тип һөйләп бирҙе әсәйем. Боронғо

исемдәребеҙ һаҡланған урындар күп. Ырымбур өлкәһендә, Дим буйы, Һамар-Ырғыҙ буйы башҡорттары боронғо йолаларҙы ҡәҙерләп һаҡлай ине ул саҡтарҙа. Әле лә боронғо йолабыҙҙы һаҡлаусылар бар.

Башҡорт исемдәрен килеп сығышы, мәғәнәләренә ҡарап төп ике төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин.

Беренсе төркөмдә иң боронғо төрки тамырлы башҡорт исемдәре һәм исем ҡушыу йолалары тәшкил итә. Был исемдәр башҡорт исемдәренең төп фонды булып тора. Бында күк есемдәре – ай, ҡояш, йондоҙ һ. б. бәйле тәбиғәт күренештәренә илаһилаштырып, һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышаныуҙы белдергән, ҡош-ҡорт, йәнлек, хайуандар атамаларынан, боронғо көсмә тормошҡа бәйле, ырыу-ара бәйләнештәр, халыҡ тарихында билдәле яу, болалар һ. б. күп төрлө мәғәнәле исемдәр барлыҡҡа килгән. Был турала тулыһынса һүҙлектең аҙағында «Исемдәр тарихы» тигән бүлектә танышырға мөмкин.

Икенсе төркөмгә хәҙерге башҡорт исемдәренең күп өлөшөн тәшкил иткән ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренән торған исемдәр инә. Урта быуатта Европаға дин, ғилем, мәҙәниәт теле булып латин килеп инһә, VII–X быуаттарҙа Урта Азия халыҡтарына дин, ғилем, мәҙәниәт теле булып ғәрәп теле килеп инә. Ә инде фарсы теле ул замандарҙа Сельджук солтандары һарайында рәсми әҙәби тел итеп ҡабул ителә һәм шәреҡ халыҡтарының күбеһе өсөн шиғриәт һәм проза теле булып хеҙмәт итә. Ул ваҡыттарҙа ғәрәп, фарсы телдәре төрки телдәре менән тығыҙ бәйләнешкә инә һәм шул арҡала төрки телдәренә бик күп ғәрәп, фарсы һүҙҙәре килеп инә. Билдәле булыуынса, X–XII быуаттарҙа шәреҡтең мәшһүр шағирҙары Фирҙәүиси, Ғүмәр Хәйям, Сәғҙи, Хафиз донъя шиғриәте ынйыларын ошо быуаттарҙа ижад итә. Шәреҡ әҙәбиәтенең был күтәрелеше, үҫеше төрки халыҡтарына ла ҙур йоғонто яһай. Әҙәбиәт, шиғриәт, сәнғәттең үҫеше халыҡтың эстетик аңы үҫеүенә тәьҫир итә. Ошо йоғонто менән төрки телдәренә яңы һүҙҙәр ағымы, шул иҫәптән яңы исемдәр килә. Ғәрәп теленән үҙләштерелгән исемде тикшереп ҡараһаҡ, уларҙың мәғәнәүи яҡтан шул уҡ башҡорт исемдәренә тура килеүе күҙгә ташлана. Сағыштырығыҙ:

| **башҡорт исемдәре** | **ғәрәп телендә** |
|---|---|
| *Арыҫлан* | *Хәйҙәр, Ҡәнзәфәр, Әсәдулла* |
| *Ҡотлобай* | *Сәғәҙәт, Бәхет* |
| *Көнбикә* | *Шәмсениса* |
| *Юлдыбай* | *Сәфәрбай* |
| *Юлдаш* | *Сәфәр* |
| *Һылыу* | *Ямал* |
| *Бикә* | *Ниса* |

Ғәрәп теленән ингән һүҙҙәр ислам диненә генә бәйле килмәй, ғилем, белем, әҙәбиәт, мәҙәниәт йоғонтоһо менән инеүен күрәбеҙ. Мәҫ., *Ғәлим, Ғилмениса – ғилемле, Азамат – бөйөк, мәшһүр*; *Вәлиулла – уҡымышлы* һ. б. Фарсы теленән үҙләштерелгән исемдәрҙең дә бер өлөшө мәғәнәүи яҡтан төп башҡорт һәм ғәрәп исемдәрен

ҡабатлап, синоним исемдәр яһай. Мәҫ., *Айһылыу*, *Көнһылыу* – баш., *Ҡәмәр*, *Шәмсиә* – ғәр., *Маһия* – фарс.; йәки *Бикә* – баш., *Ниса* – ғәр., *Биби* – фарс., *Буләк* – баш., *Мирас* – ғәр., *Йәҙгәр* – фарс. Фарсы теленән үҙләштерелгән исемдәрҙең бер өлөшө башҡорт исемдәренә хас булған матурлыҡ, нәфислек, гүзәллек төшөнсәһен мәғәнәүи яҡтан тағы ла тәрәнәйтеп, киңәйтеп ебәрә. Быға гөл һүҙе асыҡ миҫал: *Гөлбикә, Гөлнур, Гөлзифа, Гөлсәсәк, Миңлегөл, Гөлһылыу, Гөлдәр, Гөлкәй* һ. б. Фарсы теленән ингән исемдәрҙең бер төркөмө йәмғиәттәге ижтимағи мөнәсәбәтте күрһәткән һүҙҙәргә ҡайтып ҡала. Мәҫ., *яр*, *йәр* – *дуҫ, иптәш; мир, хужа, кужа – башлыҡ, хужа; Баныу, Биби – хужа ҡатын-ҡыҙ, хужабикә; мырҙа – башлыҡ, түрә, улан* һ. б.

Ғәрәп, фарсы телдәренән үҙләштерелгән кеше исемдәре башҡа уртаҡлыҡ исемдәре (китап, мәктәп, гөл һүҙҙәре һымаҡ) башҡорт теле ҡалыбына һалынып, башҡортлашып, хәҙерге башҡорт һүҙҙәренең күп кенә өлөшөн тәшкил итеп тора. Мәҫ., *гөл* һүҙен һәм *гөл* һүҙе менән яһалған (*Гөлнәзирә, Гөлъямал, Гөлбикә* һ. б.) исемдәрҙе бөгөнгө көндә берәү ҙә башҡорт һүҙе түгел, ә фарсы һүҙе икән тип уйламай. Уларҙы төп башҡорт исемдәренән айырыу мөмкин дә түгел.

Үҙләштерелгән исемдәр төркөмөнә совет дәүерендә барлыҡҡа килгән исемдәр ҡарай. Был төр исемдәрҙең бер килкеһе Октябрь революцияһының кеше аңына, тормошҡа, социаль хәленә индергән яңылыҡтарҙы үҙ эсенә ала. Урта Азия халыҡтарының исемдәрендә *Колхозбәк*, *Советбәк*, *Совет*, *Совхоз*, *Женотдел* тигән исемдәр барлыҡҡа килгән. Башҡорттар ҙа был шауҡымдан ситтә ҡалмаған. *Райфа* (районный финансовый отдел), *Райза* (районный земельный отдел), *Коммунар*, *Комунара* исемдәре ошо осорҙа яһалған. Революция юлбашсыларының исемдәре, революцияға бәйле ваҡиғалар атамалары кеше исеменә әйләнә. Мәҫ., *Вил* (Владимир Ильич Ленин), *Вилена*, *Ленар* (ленинская армия), *Маркс*, *Ким* (коммунистический интернационал молодежи), *Рева* һәм *Люция* (революциянан), *Октябрь*, *Октябрина*, *Майя*, *Рифмир* (революционный мир), *Марат*, *Клара*, *Фрунзе*, *Феликс* һ. б.

Бер төркөм исемдәр Бөйөк Ватан һуғышы осоронда барлыҡҡа килде. Мәҫ., *Анфиса*, *Флорида*, *Франгиза*, *Моряк*, *Майор*, *Эльза*, *Эльвира*, *Лариса*, *Лиза* һ. б. Һуғыштан һуңғы исемдәр араһында бөтөнләй мәғәнәһеҙ исемдәр осратып була. Мәҫ., *Рафинад*, *Винегрет*, *Лек*, *Академия*, *Юрис* (юрист), *Филиал*, *Эдик*, *Валерик* һ. б. Һуңғы осорҙа яңы исемдәр яһау менән бергә төп башҡорт исемдәрен ҡушыуға ла иғтибар көсәйҙе. Әлбиттә, насар, йәмһеҙ исемде йөрөткән кешенең һис кенә лә ғәйебе юҡ, сөнки бер кем дә үҙенә исемде үҙе һайламай. Киләсәктә юғары мәҙәниәтле йәмғиәттә лә йәмһеҙ исемдәр ҡулланылып, ошо исемдәрҙе ҡушҡан дәүерҙең ата-әсәләренең аңһыҙлығын, мәҙәниәтһеҙ, белемһеҙ булыуын күрһәтеп, шул исемде йөрөткән кешене кәмһетеп, түбәнһетеп тормаһын ине. Исемдәр теҙмәһе менән танышҡан, уның менән ҡыҙыҡһынған йәштәр өсөн был һүҙлек. Үҙ зауҡығыҙға ҡарап балағыҙға исем ҡушығыҙ. Уға оҙон ғүмер, бәхет теләгеҙ!

# ИР-АТ ИСЕМДӘРЕ

# МУЖСКИЕ ИМЕНА

| БАШҠОРТСА ЯҘЫЛЫШЫ<br>БАШКИРСКОЕ НАПИСАНИЕ | РУССА ЯҘЫЛЫШЫ<br>РУССКОЕ НАПИСАНИЕ |
|---|---|

## А

| | |
|---|---|
| **АБАЙ** *бор. төрк.* – иғтибарлы, һаҡ | **АБАЙ** *др. тюрк.* – внимательный, осмотрительный |
| **АБАЙДУЛЛА** *бор. төрк., ғәр.* – алла ҡоло | **АБАЙДУЛЛА** *др. тюрк., ар.* – раб аллаха |
| **АБД** *(абде, абду, әбд, әбде, әпте...) ғәр.* – мәңгелек; бәндә, ҡол, хеҙмәтсе, алла бәндәһе, (ир-ат исемдәре компоненты булып йөрөй) | **АБД** *(абди, абду...) ар.* – вечный, бесконечный; раб, слуга бога (компонент мужских имен) |
| **АБДРАЗАҠ** *ғәр.* – абд+разаҡ; ризыҡ биреүсе | **АБДРАЗАК** *ар.* – *абд+разак*; питающий, дающий средства к жизни |
| **АБДРАФИҠ** *ғәр.* – абд+рафиҡ; йомарт; иптәш, юлдаш, дуҫ | **АБДРАФИК** *ар.* – *абд+рафик*; милосердный, милостивый |
| **АБДРАХМАН** *ғәр.* – абд+рахман; рәхимле, изге ниәтле | **АБДРАХМАН** *ар.* – *абд+рахман*; милосердный |
| **АБДУЛ** *ғәр.* – мәңгелек; алла ҡоло (ҡыҫҡартылған исем) | **АБДУЛ** *ар.* – вечный; раб бога (усеченная форма имени *Абдулла*) |
| **АБДУЛБАҠЫЙ** *ғәр.* – алланың, мәңгелектең ҡоло | **АБДУЛБАКЫЙ** *ар.* – вечноживущий |
| **АБДУЛБАРЫЙ** *ғәр.* – бар итеүсе, барлыҡҡа килтереүсенең ҡоло | **АБДУЛБАРЫЙ** *ар.* – раб творца, создателя |
| **АБДУЛБАСИР** *ғәр.* – абдул+басир | **АБДУЛБАСИР** *ар.* – *абдул+басир* |
| **АБДУЛВӘЛИ** *ғәр.* – абдул+вәли | **АБДУЛВАЛИ** *ар.* – *абдул+вали* |
| **АБДУЛҒУЖА** *ғәр., фарс.* – абдул+ҡужа (хужа) | **АБДУЛГУЖА** *ар., перс.* – *абдул+гужа* (хозяин) |
| **АБДУЛҒӘЗИМ** *ғәр.* – абдул+ғәзим; бөйөк, абруйлы | **АБДУЛГАЗИМ** *ар.* – *абдул+газим*; великий, почтенный |
| **АБДУЛКӘРИМ** *ғәр.* – абдул+кәрим; киң күңелле, йомарттың ҡоло | **АБДУЛКАРИМ** *ар.* – *абдул+карим*; раб великодушного |
| **АБДУЛКӘБИР** *ғәр.* – абдул+кәбир; бөйөктөң ҡоло | **АБДУЛКАБИР** *ар.* – раб великого, раб могущего |

**АБДУЛЛА** *ғәр.* – абд+улла (алла); алла ҡоло (*Абдуллин* тигән фамилиялар күп)

**АБДУЛМАЛИК** *ғәр.* – абдул+малик; хакимдың ҡоло

**АБДУЛНАСИР** *ғәр.* – абдул+насир

**АБДУЛСАБИР** *ғәр.* – абдул+сабир; сабырлы, түҙемле

**АБДУЛСАЛИХ** *ғәр.* – абдул+салих; изгелекле, игелекленең ҡоло

**АБДУЛСАТТАР** *ғәр.* – абдул+саттар; яҡлаусы, ғәфү итеүсенең ҡоло

**АБДУЛХАЙ** *ғәр.* – абдул+хай; мәңге теренең ҡоло

**АБДУЛХАҠ** *ғәр.* – абдул+хаҡ; дөрөҫлөктөң, ысындың ҡоло

**АБДУЛХАЛИК** *ғәр.* – абдул+халик; ижад итеүсе, бар ҡылыусының ҡоло

**АБДУЛӘМИН** *ғәр.* – абдул+әмин; тоғролоҡло, ышаныслының ҡоло

**АБЗАЛ** *ғәр.* – иң яҡшы, иң һәйбәт

**АБЛАЙ** *баш.* – дегәнәк (баланы һаҡлау өсөн ҡушылған боронғо исем). *Аблаев* фамилияһы бар

**АБРАР** *ғәр.* – изге, яҡшы күңелле

**АБСАБИР** *ғәр.* – сабыр, түҙемле («*Абдулсабир*»ҙан ҡыҫҡартылған)

**АБСАТТАР** *ғәр.* – абу+саттар («*Абдулсаттар*»ҙан ҡыҫҡартылған)

**АБСӘЛӘМ** *ғәр.* – сәләмәтлек биреүсе, именлек, тыныслыҡ башлығы

**АБУ//ЭБУ** *ғәр.* – ата (ир-ат исемдәре компоненты)

**АБУБӘКЕР** *ғәр.* – ҡара: Әбүбәкер

**АБУЗАР** *ғәр., фарс.* – моңло, зарлы

**АБУСАТТАР** *ғәр.* – абу (ата)+саттар (ғәфү итеүсе)

**АБУТАЛИП** *ғәр.* – талапсан, белем алыусы, студент; *Талиптың* атаһы

**АБУШАХМАН** *ғәр., фарс.* – шаһ; батыр кеше

**АБДУЛЛА** *ар.* – *абд+улла*; раб аллаха, раб бога (распространена фамилия *Абдуллин*)

**АБДУЛМАЛИК** *ар.* – *абдул+малик*; раб правителя

**АБДУЛНАСИР** *ар.* – *абдул+насир*

**АБДУЛСАБИР** *ар.* – *абдул+сабир*; раб стойкого, терпеливого

**АБДУЛСАЛИХ** *ар.* – *абдул+салих*; раб благочестивого, доброго

**АБДУЛСАТТАР** *ар.* – *абдул+саттар*; раб защищающего, прощающего

**АБДУЛХАЙ** *ар.* – *абдул+хай*; раб вечноживого

**АБДУЛХАК** *ар.* – *абдул+хак*; раб истинного, настоящего

**АБДУЛХАЛИК** *ар.* – *абдул+халик*; раб творца, создателя

**АБДУЛАМИН** *ар.* – *абдул+амин*; раб спокойного, мирного, верного

**АБЗАЛ** *ар.* – превосходный, достойнейший

**АБЛАЙ** *баш.* – репей (по древнему обычаю такие имена-обереги давались детям, чтобы сохранить их жизнь от злых духов). Образована фамилия *Аблаев*

**АБРАР** *ар.* – милосердный, добрый, благонравный

**АБСАБИР** *ар.* – терпеливый, стойкий (усеченная форма имени *Абдулсабир*)

**АБСАТТАР** *ар.* – *абу+саттар* (усеченная форма имени *Абдулсаттар*)

**АБСАЛЯМ** *ар.* – борец за мир, за спокойствие

**АБУ** *ар.* – отец (компонент мужских имен)

**АБУБАКИР** *ар.* – *абу* отец+*бакир* 1) честный, правдивый; 2) верблюжонок

**АБУЗАР** *ар., перс.* – печальный, грустный

**АБУСАТТАР** *ар.* – *абу* отец+*саттар* прощающий, защищающий

**АБУТАЛИП** *ар.* – требовательный, обучающийся, ищущий знаний; отец *Талипа*

**АБУШАХМАН** *ар., перс.* – шах; молодец

**АБЫЗ** *баш.* – укымышлы, ғалим, акыллы, тәжрибәле кеше; ил ағаһы, аҡһаҡал (Кинйә Арслановты халыҡ хөрмәтләп *Кинйәабыҙ* тип йөрөткән)
**АБЫЗГИЛДЕ** *баш.* – абыз+килде
**АБЫЗГИЛДЕ** *ғәр., баш.* – һаҡлаусы; Ҡөрьәнде ятҡа белеүсе
**АБЫЛАЙ** *баш.* – ҡара: *Аблай*
**АГИШ** *баш.* – аҡ+иш (иптәш)

**АҒЗАМ** *ғәр.* – бөйөк, дәрәжәле
**АҒЫШ** *баш.* – үр, юғары урын
**АҘАНҒОЛ** *ғәр., баш.* – аҙанға саҡырыу, өндәү
**АҘНАБАЙ** *фарс., баш.* – аҙна+бай; йома көн тыуған
**АҘНАҒОЛ** *фарс., баш.* – аҙна+ҡол; аҙна, йома көн тыуған
**АҘНАЙ** *фарс.* – аҙна һүҙенән (аҙна, йома)
**АҘНАҠАЙ** *фарс., баш.* – аҙна, йома көн тыуған

**АҘНАЛЫ** *фарс., баш.* – аҙна+лы (борон әсә аҙна буйы балаға ауырығанда *Аҙналы* тип исем ҡушыу йолаһы булған). *Аҙналин* фамилияһы һаҡланған; (Салауат Юлаевтың атаһы *Юлай Аҙналин*)

**АЗАМАТ** *ғәр.* – бөйөк, ғорур; ил ағаһы, гражданин; батыр егет
**АЗАТ** *фарс.* – ирекле, азат

**АЙБАҠТЫ** *баш.* – ай+баҡты; ай һымаҡ бала тыуҙы
**АЙБАР** *баш.* – ай+бар; айы бар, айлы төндә тыуған; батыр, ғәйрәтле

**АЙБАРС** *бор. төр.* – ай+барс (бәлки барс йылында тыуған балаға ҡушылғандыр)
**АЙБУЛ** *баш.* – ай+бул; ай һымаҡ бул
**АЙБУЛАТ** *баш., фарс.* – ай+булат (ҡорос)

**АБЫЗ** *баш.* – образованный, ученый (сподвижник Салавата Юлаева Кинзя Арсланов был прозван *Кинзяабыз*)
**АБЫЗГИЛЬДИ** *баш.* – *абыз+кильди*
**АБЫЗГИЛЬДИ** *ар., баш.* – хранитель, защитник; знающий Коран наизусть
**АБЫЛАЙ** *баш.* – см. *Аблай*
**АГИШ** *баш.* – *ак* белый, чистый, честный+*иш* друг, товарищ
**АГЗАМ** *ар.* – великий
**АГИШ** *баш.* – возвышенность, высота
**АЗАНГУЛ** *ар., баш.* – призыв на молитву; призыв, зов
**АЗНАБАЙ** *перс., баш.* – *азна* пятница+*бай*; родился в пятницу
**АЗНАГУЛ** *перс., баш.* – родился в пятницу
**АЗНАЙ** *перс.* – *азна* пятница, неделя (родился в пятницу)
**АЗНАКАЙ** *перс., баш.* – *азна* пятница+*кай* (аффикс ласкательности); родился в пятницу
**АЗНАЛИ** *перс., баш.* – *азна* пятница, неделя+*лы* (аффикс принадлежности). Такое имя давали ребенку, рожденному в пятницу, или, по другому обычаю, когда роды длились долго, целую неделю. Сохранилась фамилия *Азналин* (*Юлай Азналин* – отец Салавата Юлаева)
**АЗАМАТ** *ар.* – величие, слава; гражданин; джигит, удалец
**АЗАТ** *перс.* – свободный, вольный, независимый
**АЙБАКТЫ** *баш.* – *ай* луна, месяц+*бакты* появился
**АЙБАР** *баш.* – *ай* луна+*бар* есть, имеется; редкостный; смелый, могущественный
**АЙБАРС** *др. тюрк.* – *ай* луна+*барс* (возможно, ребенок родился в год барса)
**АЙБУЛ** *баш.* – *ай+бул*; будь как луна ясная; будь светочем
**АЙБУЛАТ** *баш., перс.* – *ай* луна+*булат* сталь

**АЙБҮЛӘК** *баш.* – ай+бүләк; айлы төндә тыуған

**АЙБӘК** *баш.* – ай һымаҡ мәңгелек бул

**АЙГИЗ** *баш.* – ай+гиҙ, айға сәйәхәт ит

**АЙГИЗӘР** *баш.* – ай+гиҙәр (бала батыр, ҡыйыу булһын тигән теләк менән ҡушылған исем)

**АЙҒӘЛИ** *баш., ғәр.* – ай+ғәли; ай һымаҡ бөйөк (балаға бәхет теләп ҡушылған)

**АЙДАР** *баш.* – айлы төндә тыуған, айға оҡшаш; бәхетле, дәрәжәле

**АЙДУС** *баш., фарс.* – ай+дуҫ

**АЙҘАР** *баш.* – 1) айлы төндә тыуған, бәхетле; 2) түбәһендә сәсе ҡалдырылған; тамғалы; билдәле, үҙенә бер төрлө; бәхетле, дәрәжәле, билдәле

**АЙҘАШ** *бор. баш.* – айлы төндә тыуған, ай һымаҡ

**АЙҘЫЛ** *баш.* – ай кеүек матур

**АЙЕГЕТ** *баш.* – ай+егет; ай һымаҡ егет

**АЙМАН** *бор. баш.* – айлы төндә тыуған, ай һымаҡ

**АЙНАЗ** *баш., фарс.* – ай+наҙ

**АЙНУР** *баш., ғәр.* – ай нуры һымаҡ яҡты, матур

**АЙРАТ** *монг.* – ойрот тигән боронғо монгол ырыуы атамаһынан яһалған исем: ой – урман+арат – кеше, халыҡ; урманда йәшәүсе халыҡ (Джанузаков)

**АЙСА** *ғәр.* – *Ғайса* исеменән ҡыҫҡартылған; *Айсин* фамилияһы яһалған

**АЙСАФ** *баш., ғәр.* – ай+саф

**АЙСОЛТАН** *баш., ғәр.* – ай+солтан; ай хужаһы

**АЙСЫУАҠ** *баш.* – ай+сыуаҡ; айлы төндә тыуған

**АЙБУЛЯК** *баш.* – *ай* луна+*буляк* дар, подарок; родился в лунную ночь

**АЙБЕК** *баш.* – будь вечным, как луна

**АЙГИЗ** *баш.* – *ай* луна+*гиз* путешествуй

**АЙГИЗАР** *баш.* – *ай* луна+*гизар* будет путешествовать (пожелание родителей, чтобы ребенок был смелым, отважным)

**АЙГАЛИ** *баш., ар.* – *ай* луна+*гали* возвышенный (пожелание ребенку счастливой жизни)

**АЙДАР** *баш.* – родился в лунную ночь; редкостный, счастливый

**АЙДУС** *баш., перс.* – *ай* луна+*дус* друг, товарищ

**АЙДАР** *баш.* – 1) родился в лунную ночь; 2) родился с чубом, хохолком; с отметиной на лбу; особенный, счастливый; знаменитый, видный

**АЙДАШ** *др. баш.* – луноподобный, особенный

**АЙДИЛ** *баш.* – прекрасный, луноподобный

**АЙЗИГИТ** *баш.* – *ай* луна+*зигит* (джигит); луноподобный юноша

**АЙМАН** *др. баш.* – луноподобный, особенный

**АЙНАЗ** *баш., перс.* – *ай* луна+*наз* ласка, нега

**АЙНУР** *баш., ар.* – *ай* луна+*нур* блеск, луч, свет; лучезарный, яркий, красивый

**АЙРАТ** *монг.* – образовано от древнего монгольского родового названия *Ойрот*; *ой* лес+*арат* народ, т. е. лесной народ; народ, живущий в лесу (Джанузаков)

**АЙСА** *ар.* – сокращенная форма имени *Гайса;* образована фамилия *Айсин*

**АЙСАФ** *баш., ар.* – *ай* луна+*саф* чистый

**АЙСУЛТАН** *баш., ар.* – *ай* луна+*султан* правитель; самый лучший (компонент мужских и женских имен)

**АЙСУАК** *баш.* – *ай* луна+*сыуак* ясный; родился в лунную ночь

**АЙТУҒАН** *баш.* – ай+туған; ай тыуғанда тыуған

**АЙТЫУ** *бор. баш.* – ай булып мәңге яктыртһын

**АЙТЫУАР** *баш.* – ай+тыуар; ай тыуғанда тыуған

**АЙУАЗ** *ғәр.* – алмаш, алмашсы; *Айуазов* фамилияһы бар

**АЙШАТ** *баш., фарс.* – ай+шат

**АЙШАН** *бор. баш.* – айлы урын, ай яктыһы

**АЙЫТБАЙ** *ғәр., баш.* – айыт+бай (ир-ат исемдәре ялғауы); байрам көндө тыуған

**АЙЫТҠОЛ** *ғәр., баш.* – айыт+ҡол (ир-ат исемдәре ялғауы); байрамда тыуған

**АЙЫТҠУЖА** *ғәр., фарс.* – айыт (ғәйет) көнө тыуған

**АЙЫТНУР** *ғәр.* – айыт+нур; байрамда тыуған

**АЙЫУХАН** *баш.* – айыу+хан; ныҡ, көслө булһын тигән теләкте аңлата

**АКРАМ** *ғәр.* – бик йомарт, кеселекле

**АҠАЙ** *баш.* – ағай һүҙенең диал. формаһы; хөрмәтле, абруйлы мәғәнәһендә; 1735–1737 йылдарҙағы ихтилал етәкселәренең береһенең исеме

**АҠБАЙ** *баш.* – аҡ+бай; изге күңелле

**АҠБАРС** *баш.* – аҡ+барс (барс һымаҡ көслө, йылғыр булһын, тигән теләк әйтелгән)

**АҠБАТЫР** *баш.* – аҡ+батыр

**АҠБАШ** *баш.* – аҡ+баш; зирәк, изге бала

**АҠБИРҘЕ** *баш.* – аҡ (изге, бәхетле) + бирҙе (*Акбирҙин* фамилияһы бар)

**АҠБУЛАТ** *баш., фарс.* – аҡ+булат (ҡорос һымаҡ ныҡ булһын тип ҡушылған)

**АҠБУЛДЫ** *баш.* – аҡ+(бәхетле) булды

**АҠБУТА** *бор. баш.* – 1) аҡ+бута (дөйә балаһы); 2) аҡ алтын

**АЙТУГАН** *баш.* – *ай* луна+ *туган* взошла; родился в новолуние

**АЙТУ** *др. баш.* – будь вечным, как луна; будь светочем

**АЙТУАР** *баш.* – *ай* луна+*туар* восходит; родился в новолунии

**АЙВАЗ** *ар.* – смена, замена; образована фамилия *Айвазов*

**АЙШАТ** *баш., перс.* – *ай* луна+*шат* радостный

**АЙШАН** *др. баш.* – свет луны

**АИТБАЙ** *ар., баш.* – *аит* праздник+*бай* (компонент мужских имен); родился в праздник

**АИТКУЛ** *ар., баш.* – *аит+кул* (компонент мужских имен); родился в праздник

**АИТКУЖА** *ар., перс.* – родился в день мусульманского праздника

**АИТНУР** *ар.* – *аит+нур* свет, луч; родился в праздник

**АЮХАН** *баш.* – *аю* медведь+*хан* (компонент мужских имен).

**АКРАМ** *ар.* – самый щедрый, великодушный

**АКАЙ** *баш.* – диал. форма слова *ағай* брат (в знач. почтенный, уважаемый); имя одного из предводителей восстания 1735–1737 гг.

**АКБАЙ** *баш.* – *ак* белый, благородный+*бай* (компонент мужских имен)

**АКБАРС** *баш.* – *ак+барс* (означает пожелание родителей, чтобы ребенок был ловким, сильным, как барс)

**АКБАТЫР** *баш.* – *ак+батыр* храбрец

**АКБАШ** *баш.* – *ак* светлый, честный, благородный, способный+*баш* голова

**АКБИРДИ** *баш.* – *ак* благородный, счастливый+*бирди* дал. Образована фамилия *Акбирдин*

**АКБУЛАТ** *баш., перс.* – *ак* белый+*булат* (пожелание ребенку, чтобы был крепким)

**АКБУЛДЫ** *баш.* – *ак* счастливый+*булды* стал

**АКБУТА** *др. баш.* – 1) *ак* белый, светлый, непорочный+*бута* верблюжонок; 2) белое золото, платина

**АҠБУТА** *баш., фарс.* – аҡ + бута; 1) ҡыуаҡ, ҡыуаҡлыҡ; 2) ҡиммәтле туҡыма атамаһы (*Акбутин* фамилияһы бар)

**АҠДӘҮЛӘТ** *баш., ғәр.* – аҡ+дәүләт

**АҠЙЕГЕТ** *баш.* – изге, яҡшы егет

**АҠКИЛДЕ** *баш.* – аҡ+килде

**АҠКӨБӘК** *баш.* – ҡара: *Аккүбәк*

**АҠКӨСӨК** *баш.* – аҡ+көсөк (боронғо йола буйынса балаға оҙон ғүмер теләп ҡушылған исем). *Аккөсөков* фамилияһы бар

**АҠКҮБӘК** *баш.* – аҡ+күбәк (батыр; иптәш; эт)

**АҠҠОЛ** *баш.* – саф, изге ҡол, кеше

**АҠҠОШ** *баш.* – ҡош исеменән

**АҠҠУЖА** *баш., фарс.* – аҡ, изге кеше

**АҠҠУСҠАР** *баш.* – аҡ+ҡусҡар (*Аккускаров* фамилияһы һаҡланған)

**АҠМАЛ** *ғәр.* – иң һәйбәт

**АҠМАН** *баш.* – боронғо ғинуар айы атамаһы; ғинуар айында тыуған

**АҠМОРАТ** *баш., ғәр.* – аҡ (изге)+морат (теләк)

**АҠМӨХӘМӘТ** *баш., ғәр.* – аҡ+мөхәмәт (данлы, маҡтаулы)

**АҠМУЛЛА** *баш., ғәр.* – аҡ (саф, изге күңелле)+мулла (уҡытыусы). (XIX быуат шағиры, мәғрифәтсе *Мифтахетдин Акмулланың* исеме)

**АҠМЫРҘА** *баш., фарс.* – аҡ+мырҙа (ҡара: *Мирза*, *Мырҙа*)

**АҠНАЗАР** *баш., ғәр.* – аҡ+назар (ҡараш, ярҙам, иғтибар)

**АҠСУЛПАН** *баш.* – йондоҙ атамаһынан. *Аксулпанов* фамилияһы бар

**АКБУТА** *баш., перс.* – *ак* белый+*бута*; 1) куст, кустарник; 2) название дорогой материи (распространена фамилия *Акбутин*)

**АКДАВЛЕТ** *баш., ар.* – *ак* белый, честный+*давлет* богатство, благо

**АКЗИГИТ** *баш.* – благородный, честный юноша

**АККИЛДИ** *баш.* – *ак* белый, благородный, честный+*килди* появился

**АККУБЕК** *баш.* – *ак* белый+*кубек* герой, храбрец

**АККУСЮК** *баш.* – *ак* белый+*кусюк* щенок (по древнему обычаю, пожелание ребенку долгой жизни). Образована фамилия *Аккусюков*

**АККУБЕК** *баш.* – *ак* белый+*кубек* герой, храбрец; друг; собака

**АККУЛ** *баш.* – благородный, честный раб, человек

**АККУШ** *баш.* – лебедь

**АККУЖА** *баш., перс.* – благородный, честный человек

**АККУСКАР** *баш.* – *ак* белый+*кускар*: 1) племенной баран; 2) улитка (сохранилась фамилия *Аккускаров*)

**АКМАЛ** *ар.* – наилучший

**АКМАН** *баш.* – январь; родился в январе

**АКМУРАТ** *баш., ар.* – *ак* белый, светлый, добрый, священный+*мурат* цель, желание

**АКМУХАМЕТ** *баш., ар.* – *ак* белый, чистый, непорочный+*мухамет*

**АКМУЛЛА** *баш., ар.* – *ак* белый, чистый+*мулла* учитель. (Имя, данное народом выдающемуся поэту-просветителю XIX века *Мифтахетдину Акмулле*)

**АКМУРЗА** *баш., перс.* – *ак+мурза* (см. *Мирза*)

**АКНАЗАР** *баш., ар.* – *ак+назар* точка зрения, взгляд, взор, внимание

**АКСУЛПАН** *баш.* – *Венера* (название звезды). Сохранилась фамилия *Аксулпанов*

**АҠСУРА** *баш.* – аҡ+сура (батыр, улан). *Аксурин* фамилияһы яһалған

**АҠТАЙ** *баш., монг.* – аҡ+тай (барлыҡ ялғауы); аҡ, саф күңелле. *Актаев* фамилияһы бар

**АҠТУҒАН** *баш.* – аҡ+туған

**АҠЪЮЛ** *баш.* – аҡ+юл (*Акъюлов* фамилияһы һаҡланған)

**АҠЪЯР** *баш., фарс.* – аҡ (изге, яҡшы)+(дуҫ)

**АҠЫЛ** *ғәр.* – аҡыллы (*Акылов* фамилияһы бар)

**АҠЫЛБАЙ** *ғәр., баш.* – аҡыллы

**АЛҒАЗИ** *ғәр.* – яугир, һуғышсы

**АЛҒЫШ** *бор. баш.* – маҡтау, дан; яҡшы теләк

**АЛҒЫШАЙ** *бор. баш.* – маҡтаулы, данлы (*Алгушаев* тигән фамилия һаҡланған)

**АЛДАРБАЙ** *монг., баш.* – алдар – данлыҡлы+бай

**АЛДАРБАТЫР** *монг.* – данлыҡлы батыр (әкиәттәрҙә күп осраған ыңғай герой)

**АЛДАРХАН** *монг., бор. төрк.* – алдар+хан; данлыҡлы хан

**АЛЛАБИРҘЕ** *ғәр., баш.* – алла+бирҙе

**АЛЛАЯР** *ғәр., фарс.* – алла+яр (иптәш, дуҫ)

**АЛМАС** *баш.* – аҫыл таш исеменән (бала ныҡ, үткер булһын тигән теләкте белдерә)

**АЛСЫН** *бор. баш.* – ыласын; этноним

**АЛСЫНБАЙ** *баш.* – алсын (ыласын)+бай

**АЛСЫНҒУЖА** *баш., фарс.* – алсын ыласын+ғужа; *Алсынғужин* фамилияһы бар

**АЛТЫН** *баш.* – алтын һымаҡ ҡәҙерле

**АЛТЫНБАЙ** *баш.* – алтын+бай

**АЛТЫНҒУЖА** *баш., фарс.* – алтын+ғужа (хужа)

**АКСУРА** *баш.* – *ак+сура* удалец, герой; сын. Образована фамилия *Аксурин*

**АКТАЙ** *баш., монг.* – *ак+тай* (аффикс наличия). Сохранилось в фамилии *Актаев*

**АКТУГАН** *баш.* – *ак* благородный, добрый, счастливый+*туган* родился

**АКЪЮЛ** *баш.* – *ак* белый, добрый+*юл* путь, дорога. Сохранилась фамилия *Акъюлов*

**АКЪЯР** *баш., перс.* – *ак* белый, хороший+*яр* друг, товарищ

**АКИЛ** *ар.* – умный (образована фамилия *Акилов*)

**АКИЛБАЙ** *ар., баш.* – *акил* ум, разум+*бай* (компонент мужских имен); умный, разумный

**АЛГАЗИ** *ар.* – воин, боец

**АЛГУШ** *др. баш.* – хвала, слава; доброе желание

**АЛГУШАЙ** *др. баш.* – славный; почетный (сохранилась фамилия *Алгушаев*)

**АЛДАРБАЙ** *монг., баш.* – *алдар* знаменитый+*бай*

**АЛДАРБАТЫР** *монг.* – знаменитый батыр (в сказках имя положительного героя)

**АЛДАРХАН** *монг., др. тюрк.* – *алдар + хан*; знаменитый хан

**АЛЛАБИРДИ** *ар., баш.* – *алла* бог+*бирди* дал

**АЛЛАЯР** *ар., перс.* – *алла* бог+*яр* товарищ, друг

**АЛМАС** *баш.* – *алмаз* (выражает пожелание, чтобы ребенок был крепким, как алмаз)

**АЛСЫН** *др. баш.* – сокол (этноним)

**АЛСЫНБАЙ** *баш.* – алсын сокол+бай (компонент мужских имен)

**АЛСЫНГУЖА** *баш., перс.* – *алсын* сокол+*гужа* хозяин; образована фамилия *Алсынгужин*

**АЛТЫН** *баш.* – золото; как золото

**АЛТЫНБАЙ** *баш.* – *алтын* золото+ *бай*

**АЛТЫНГУЖА** *баш., перс.* – *алтын* золото+*гужа* хозяин

**АЛТЫНДУҒА** *баш.* – алтын+дуға (Бессонов)

**АЛТЫНСУРА** *баш.* – алтын+сура (батыр; улан)

**АЛТЫНТИМЕР** *баш.* – алтын+тимер; бик ҡәҙерле, бик шәп

**АМАН** *ғәр.* – иҫән-һау, имен (*Аманов* фамилияһы бар)

**АМАНГИЛДЕ** *ғәр., баш.* – имен-аман+килде; ауыл исеме бар; *Амангильдин* фамилияһы күп; Әбйәлил р. *Амангилде* а. бар

**АМАНТАЙ** *ғәр., баш.* – имен-аман+ тай (тай – эйәлек аффиксы)

**АЛЫПБАТЫР** *бор. баш.* – алп (бәһлеүән)+батыр

**АРАЛБАЙ** *баш.* – арал+бай; *Аралбаев* фамилияһы яһалған

**АРҒЫНБАЙ** *баш.* – 1) арғын (ҡырағай ат)+бай; 2) арғын тигән боронғо ырыу исеменән

**АРПА** *бор. баш.* – арпа һүҙенән

**АРПАБАТЫР** *бор. баш.* – арпа+батыр

**АРПАЛЫ** *баш.* – арпа+лы; арпа һүҙе менән исемдәр әкиәттәрҙә һаҡланған. Мадъярҙар тыуған илдәрен тапҡан осорҙа етәкселәренең исеме *Арпалы* булған

**АРСЛАН** *баш.* – януар атамаһынан; батырлыҡ, ҡыйыулыҡ билдәһе

**АРСЛАНБАЙ** *баш.* – арыҫлан+бай

**АРСЛАНБӘК** *баш.* – арыҫлан+бәк (көслө)

**АРСЛАНГӘРӘЙ** *баш., фарс.* – арыҫлан+гәрәй (эйәреүсе, дауам итеүсе)

**АРСЛАНҒӘЛИ** *баш., ғәр.* – арыҫлан+ғәли

**АРТУР** *неол.* – кельт телендә: мыҡты, ғәйрәтле, көслө; Э. Войничтың «Овод» романындағы төп геройҙың исеменән алынған исем (Порт-Артурға ла бәйләнеше булыуы ихтимал)

**АЛТЫНДУГА** *баш.* – *алтын* золото+дуга (Бессонов)

**АЛТЫНСУРА** *баш.* – *алтын* золото+*сура*, герой, молодец; сын

**АЛТЫНТИМЕР** *баш.* – *алтын* золото+*тимер* железо

**АМАН** *ар.* – благополучный, здравый (образована фамилия *Аманов*)

**АМАНГИЛЬДИ** *ар., баш.* – *аман* благополучие+*килде* пришел. Образована фамилия *Амангильдин*; название деревни в Абзелиловском районе

**АМАНТАЙ** *ар., баш.* – *аман* благополучие+*тай* аффикс, благополучный

**АЛЫПБАТЫР** *др. баш.* – *алп* великан+*батыр* герой, богатырь

**АРАЛБАЙ** *баш.* – *арал* небольшой остров+*бай*; образована фамилия *Аралбаев*

**АРГЫНБАЙ** *баш.* – 1) *аргын* дикая лошадь+*бай*; 2) происходит от названия племени *Аргын*

**АРПА** *др. баш.* – ячмень

**АРПАБАТЫР** *др. баш.* – *арпа* ячмень+*батыр* богатырь

**АРПАЛЫ** *баш.* – *арпа* ячмень+*лы* (аффикс наличия). Имена с компонентом *арпа* сохранились в башкирских сказках. *Арпады* – имя предводителя венгров в эпоху обретения ими Родины

**АРСЛАН** *баш.* – лев; символ храбрости, смелости

**АРСЛАНБАЙ** *баш.* – *арслан* лев+*бай* (компонент мужских имен)

**АРСЛАНБЕК** *баш.* – *арслан* лев+*бек* сильный

**АРСЛАНГАРЕЙ** *баш., перс.* – *арслан* лев+*гарей* последователь

**АРСЛАНГАЛИ** *баш., ар.* – *арслан* лев+*гали* великий, возвышенный, величавый

**АРТУР** *неол.* – в кельтском языке: могучий, сильный; имя героя романа Э. Войнич «Овод». Вероятно, заимствовано в 1960-х годах (возможно, связано с названием Порт-Артура)

**АРЫСЛАН** *баш.* – януар атамаһынан. Төрки телдәрҙә күп таралған исем
**АРЫСЛАНБАЙ** *баш.* – арыҫлан+бай
**АРЫСЛАНБӘК** *баш.* – арыҫлан+бәк
**АРЫСЛАНГӘРӘЙ** *баш., фарс.* – арыҫлан+гәрәй
**АРЫСЛАНҒӘЛИ** *баш., ғәр.* – арыҫлан+ғәли
**АРЫШ** *баш.* – арыш һүҙенән
**АСАДУЛЛА//АСАҘУЛЛА** *ғәр.* – асад (арыҫлан)+улла (алла); алланың арыҫланы
**АСАНБАЙ** *баш.* – асан (иҫән)+бай
**АСАФ** *ғәр.* – сифат, билге; һәйбәт
**АСҠАР** *баш.* – иң бейек тау, ҡая; таяныс, терәк; ҡәлғә
**АСҠАР** *ғәр.* – 1) «*Ғәлиәскәр*»ҙән ҡыҫҡартылған; бәләкәй; 2) ғәскәр, һалдат
**АСМАН** *фарс.* – күк йөҙө, күк, һауа
**АСМАНДИЯР** *фарс.* – асман (күк, һауа)+яр (дуҫ, иптәш). *Асмандияров* фамилияһы яһалған
**АСРАР** *ғәр.* – сер, йәшерен нәмә
**АСФАНДИЯР** *фарс.* – 1) асфан (күк, һауа)+яр (дуҫ, иптәш); 2) иран эпосы геройының исеме; 3) иран йыл иҫәбендәге ай исеме
**АСЫЛ** *ғәр.* – 1) нигеҙ, тамыр; төп, ысын, аҫыл; 2) ҡәҙерле, аҫыл, ҡиммәтле
**АСЫЛАЙ** *ғәр.* – ысын
**АСЫЛБАЙ** *ғәр., баш.* – асыл+бай
**АСЫЛГӘРӘЙ** *ғәр., фарс.* – асыл+гәрәй (эйәреүсе)
**АСЫЛЗАДА** *ғәр., фарс.* – асыл+зада (улан, ир бала, варис)
**АСЫЛЪЯР** *ғәр., фарс.* – аҫыл+яр (ысын дуҫ)
**АҪЫЛБАЙ** *ғәр., баш.* – аҫыл+бай
**АҪЫЛГӘРӘЙ** *ғәр., монг.* – аҫыл+гәрәй

**АРСЛАН** *баш.* – лев. Имя широко распространено в тюркских языках
**АРСЛАНБАЙ** *баш.* – *арслан+бай*
**АРСЛАНБЕК** *баш.* – *арслан+бек*
**АРСЛАНГАРЕЙ** *баш., перс.* – *арслан+гарей*
**АРСЛАНГАЛИ** *баш., ар.* – *арслан+гали*
**АРЫШ** *баш.* – рожь
**АСАДУЛЛА** *ар.* – *асад* лев+*улла* бог; лев бога
**АСАНБАЙ** *баш.* – *асан* живой, здоровый+*бай*
**АСАФ** *ар.* – качество, знак; лучший
**АСКАР** *баш.* – высокая, неприступная гора, вершина; опора, защита; крепость
**АСКАР** *ар.* – 1) сокращенная форма имени *Галиаскар*; маленький; 2) армия, солдат, воин
**АСМАН** *перс.* – небо
**АСМАНДИЯР** *перс.* – *асман* небо+*яр* друг, товарищ. Образована фамилия *Асмандияров*
**АСРАР** *ар.* – секрет, тайна
**АСФАНДИЯР** *перс.* – 1) *асфан* небо+*яр* друг, товарищ; дар божий; 2) от имени одного из главных героев иранского эпоса; 3) название месяца по иранскому летоисчислению
**АСЫЛ** *ар.* – 1) основа, корень; подлинник, настоящий; 2) дорогой, драгоценный
**АСЫЛАЙ** *ар.* – подлинный
**АСЫЛБАЙ** *ар., баш.* – *асыл+бай*
**АСЫЛГАРЕЙ** *ар., перс.* – *асыл+гарей* последователь
**АСЫЛЗАДА** *ар., перс.* – *асыл* настоящий, дорогой+*зада*, сын, наследник, царевич
**АСЫЛЪЯР** *ар., перс.* – *асыл* настоящий+*яр* друг
**АСЫЛБАЙ** *ар., баш.* – *асыл* дорогой+*бай* (компонент мужских имен)
**АСЫЛГАРЕЙ** *ар., монг.* – *асыл+гарей*

**АҪЫЛҒУЖА** *ғәр., фарс.* – аҫыл+ғужа; ҡәҙерле кеше

**АҪЫЛЗАДА** *ғәр., фарс.* – аҫыл+(ҡиммәтле)+зада (улан, ир бала; вариҫ)

**АТАН** *баш.* – эш дөйәһе (бала эшсән булһын, тип ҡушылған); *Атанов* фамилияһы киң таралған

**АТАНБАЙ** *баш.* – атан (эш дөйәһе)+бай (эшсән булһын тип ҡушылған боронғо исем)

**АТАНҒОЛ** *баш.* – атан+ҡол; *Атанғолов* фамилияһы бар

**АТАУЛЛА** *ғәр.* – бүләк (*Ғатаулла* тигән исемдән ҡыҫҡартылған)

**АТЛАС** *ғәр.* – атлас (ебәк туҡыма атамаһынан)

**АУСАФ** *ғәр.* – сифат, билдә; һәйбәт

**АФҒАН** – тажик, азербайжан телдәрендә лә таралған исем; афған кешеһе

**АФЗАЛ** *ғәр.* – иң яҡшы, иң һәйбәт, шәп

**АХИАР//АХИЯР** *ғәр.* – яҡшылыҡлы, игелекле

**АХУН** *ғәр.* – 1) дуҫ, иптәш, ҡәрҙәш; 2) хужа, әфәнде (өндәшеү һүҙе); 3) өйрәтеүсе

**АХУНЙӘН** *ғәр., фарс.* – ахун+йән

**АХУНЪЯН** *ғәр., фарс.* – ахун+ян (йән)

**АШИРАФ** *ғәр.* – ҡәҙерле, хөрмәтле; дәрәжәле, данлы

**АШРАФ** *ғәр.* – ҡара: *Ашираф*

**АЮП** *ғәр. (бор. йәһ.)* – эҙәрләнгән, үкенгән

**АЯҘ//АЯЗ** *баш.* – аяҙ, асыҡ, саф

**АЯҘБАЙ** *баш.* – аяҙ+бай, саф күңелле; аяҙ көндө тыуған

**АЯҘҒОЛ//АЯЗҒОЛ** *баш.* – аяҙ+ғол (ҡол)

**АСЫЛГУЖА** *ар., перс.* – *асыл* драгоценный+*гужа* хозяин

**йән//ян** *фарс.* – йән, ҡот, ырыҫ, бәхет (ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исемдәренә ҡушыла: **Йәнбирҙе, Йәнбикә, Янбулат, Йәнһылыу, Йәнгилде, Янбарис, Йәнйегет**)

**йәр//яр** *фарс.* – 1) иптәш, яҡын дуҫ; 2) ялғау, эйәлек мәғәнәһен бирә (ир-ат исем-дәре менән ҡулланыла: **Килдеяр, Муллаяр, Йәрмөхәмәт, Ғәлийәр, Миңлейәр, Йәрсәйет**)

**кәй//кай** *баш.* – иркәләү, кесерәйтеү аффикстары (башҡорт исем-дәрендә иркәләү, кесерәйтеү аффикстары күп ҡулланылған, исемгә эмоциональ төҫ биргән; ҡатын-ҡыҙ, ир-ат исемдәрендә күп осрай: **Йәнекәй, Кинйәкәй, Миңлекәй, Ғәлекәй, Мырҙаҡай, Бибикәй, Сураҡай**)

**ҡай** *баш.* – *ҡара:* **кәй//кай** (**Аҙнаҡай, Һылыуҡай**)

**ҡан** *баш.* – *ҡара:* **хан** (**Ҡансура, Ҡангилде**)

**ҡол//ғол** *баш.* – ҡол, ярҙамсы; алла ҡоло (ир-ат исемдәре компоненты: **Ишҡол, Мырҙағол, Аҡҡол, Бирҙеғол, Солтанғол, Ҡолшәрип**)

**ҡужа** *фарс.* – ҡара: **хужа** (**Ҡужабай, Аҡҡужа**)

**маһи** *фарс.* – ай һымаҡ, матур, нур сәсеп торған йөҙлө (ҡатын-ҡыҙ исеменә алдынан ҡушыла: **Маһинур, Маһикамал, Маһитап**)

**миң, миңле//минде/миңне** *баш.* – миңе булып, миңле тыуған; бәхетле, талантлы (ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат исемдәренең алдына ҡушыла: боронғо йола буйынса, «миң» менән тыуған балаға мотлаҡ «миң» һүҙе менән исем ҡушырға тигән ҡараш йәшәгән. Әгәр шулай итмәһәң, миңе бөтә тәненә таралырға һәм балаға ҙур зыян килеүе ихтимал тип ҡаралған: **Миңһылыу, Миңлебикә, Миңлегөл, Миңләхмәт, Миңзифа, Миндейәр, Миңнеғәле, Миңнебай** һ.б.)

**мир** *фарс.* – башлыҡ, хөкөмдар, идара итеүсе (ир-ат исемдәре алдынан килә: **Мирғәзәм, Мирзаһит, Мирҡасим, Мирсалих, Мирхәйҙар**)

**мулла** *ғәр.* – уҡымышлы, белемле, ғилемле, дингә өндәүсе (ир-ат исемдәренә ҡушылып йөрөй: **Муллайән, Муллағәли, Аҡмулла, Муллағәләм, Муллаяр, Кәлимулла, Ғәлимулла**)

**мырҙа** *фарс.* – әмир, башлыҡ балаһы, аҡһөйәк нәҫеле; кусты (ир-ат исемдәре компоненты: **Аҡмырҙа, Бикмырҙа, Мырҙабай, Баймырҙа, Мырҙағәли, Мырҙагилде, Мырҙахан**)

**ниса** *ғәр.* – ҡыҙ бала, бикә (ҡатын-ҡыҙ исемдәренә ҡушыла: **Гөлниса, Шәмсиниса, Ғилминиса**)

**нур** *ғәр.* – яҡтылыҡ, нур (ҡатын-ҡыҙ исемдәре менән килә: **Ғилминур, Гөлнур, Нурғәли, Нурдәүләт, Нурғаян, Нурислам**)

**сара** *фарс.* – 1) иң яҡшы, бик шәп (ҡатын-ҡыҙ исеме компоненты: **Гөлсара, Бибисара, Маһисара, Майсара**); 2) *ғәр.* – башлыҡ, хакимә, бейбикә (ҡатын-ҡыҙ исеме компоненты булып йөрөгән); 3) йәһүд – ырыу башлығы, ырыу инәһе (ҡатын-ҡыҙ исеме компоненты булып йөрөгән)

**солтан** *ғәр.* – 1) батша, хаким; 2) иң шәп, һәйбәт (боронғо заманда ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исемдәре компоненты булып йөрөгән: **Ишсолтан, Солтанбикә, Солтанбай, Солтанбәк, Солтангилде**)

**сура** *баш.* – улан, ир бала; батыр, ҡыйыу; ярҙамсы, иптәш (ир-ат исемдәре компоненты: **Сурабай, Аҡсура, Байсура, Сурағол, Ейәнсура**)

**тай//тәй** *бор. баш.* – ялғау (исемдәргә ҡушылып, эйәлек ялғауы мәғәнәһен бирә. Мәҫ., **Аҡтай** – ағы булған; **Амантай** имен, аман булған; **Иҫәнтай** – иҫән-һау булған. Ир-ат исемдәренең аҙағына ҡушылып йөрөй: **Мортай, Урмантай, Биксәнтай**)

**улла//алла** *ғәр.* – ҡара: **алла//улла**

**фәтхел//фәтхе//фәтхи** *ғәр.* – еңеү, уңыш яулау, асыу (ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат исемдәре компоненты: **Фәтхиниса, Фәтхинур, Фәтхиямал, Фәтхелғаян, Фәтхелислам, Фәтхелкәбир, Фәткулла**)

**хажи//хәже//хәжи** *ғәр.* – хажи ҡылыусы (мосолмандарҙың изге һаналған Мәккә ҡалаһына барып, Ҡәғбәгә ғибәҙәт ҡылған ир-ат исеменә ҡушылған һүҙ: **Хажимөхәмәт, Хәжеғәле, Хажиморат, Әхмәтхажи**)

**хаҡ** *ғәр.* – 1) тәңре, хоҙай, алла; 2) ысын, дөрөҫ (ир-ат исемдәренә ҡушылған: **Хаҡбирҙе, Абдулхаҡ, Хаҡмырҙа, Хакназар, Хаҡмулла**)

**хан//ҡан** *баш.* – башлыҡ, хан (ир-ат исемдәре менән килә: **Ханбирҙе, Хангилде, Ханислам, Хансура, Ҡансура**)

**хөбби//хөббө** *ғәр.* – яратҡан, һөйгән (ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат исемдәре менән ҡулланыла: **Хөббиямал, Хөббөтдин, Хөббөниса**)

**хөсни//хөснө** *ғәр.* – бик матур, һылыу, (ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исеме компоненты: **Хөснулла, Хөсниямал, Хөснияр**)

**хужа//ҡужа//ғужа//күзә** *фарс.* – эйә, хужа, баш кеше (ир-ат исемдәренә ҡушыла: **Хужабай, Хужәхмәт, Ҡужабай, Ҡужабәк, Хужағол**)

**һылыу** *баш.* – матур, гүзәл (ҡатын-ҡыҙ исеме компоненты: **Айһылыу, Көнһылыу, Һылыубикә, Һылыуҡай, Миңһылыу, Бикһылыу, Таңһылыу**)

**шат** *бор. төрк.* – 1) боронғо төрки телендә дәрәжә атамаһы; 2) фарсы телендә: ҡыуаныс, шатлыҡ (ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ исемдәренә ҡушыла: **Шатморат, Шатмырҙа, Гөлшат**)

**шаһ//шаһи//ша//шә//шай//шәй** *фарс.* – 1) хаким, башлыҡ, хужа, солтан, батша; 2) иң һәйбәт, иң шәп (ир-ат исемдәренә ҡушыла: **Йыһанша, Шаһиғәли, Шағәле, Шаһисолтан, Шайморат, Шаймарҙан, Моратша**)

**шәйех//шәйх//шәйхи//шәйхе//шәй** *ғәр.* – 1) уҡытыусы, өйрәтеүсе, тәрбиәсе; 2) дин әһеле, аҡһаҡал; 3) ғалим (ир-ат исемдәренә ҡушыла: **Шәйехзада, Шәйхәттәр, Шәйәхмәт, Шәйхетдин, Шәйхислам, Шәйхулла**)

**шәмси//шәмсе** *ғәр.* – ҡояш һымаҡ, ҡояшлы, яҡтыртыусы (ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат исемдәренә ҡушыла: **Шәмсетдин, Шәмсениса, Шәмсинур**)

**әбд // абд** *ғәр.* – *ҡара:* **абд // әбд**

**әбдел//абдул** *ғәр.* – *ҡара:* **абдул//әбдел**

**әбү//абу** *ғәр.* – *ҡара:* **абу//әбү**

# РЕГУЛЯРНЫЕ ИМЯОБРАЗОВАТЕЛЬНЫЕ КОМПОНЕНТЫ

**абд** *ар.* – раб, вечный (первая часть имен типа **Абдрахман, Абдразак, Абдулла**)

**абдул** *ар.* – см. **абд**

**абу** *ар.* – отец (компонент мужских имен)

**ак** *баш.* – белый; чистый; священный, великий; счастливый

**асыл** *ар.* – 1) прекрасный, красивый, благородный; 2) корень, основа, суть; начало, происхождение (первая часть мужских и женских имен)

**бай** *баш.* – богатый; хозяин; мужчина, муж (компонент мужских имен)

**бану** *перс.* – дочь, девочка; госпожа, хозяйка, повелительница

**бей** *баш.* – начальник, глава (компонент мужских имен)

**бек** *баш.* – начальник, глава; муж; властелин, крепкий; прочный (компонент мужских имен)

**биби** *перс.* – девочка; госпожа, дама, хозяйка (компонент женских имен)

**бик** *баш.* – см. **бек**

**бика** *баш.* – девочка, дочь; дама, госпожа, хозяйка (компонент женских имен)

**гали** *ар.* – великий; выдающийся; возвышенный, знатный (компонент мужских имен)

**гужа** *перс.* – см. **хужа**

**дар** *перс.* – аффикс обладания, образует имена типа *Гилем* (знание, образование)+дар; образованный

**гуль** *перс.* – цветок (компонент женских имен)

**зада** *перс.* – 1) сын, дитя; царевич, принц; 2) дитя; 3) аффикс обладания (компонент мужских и женских имен)

**зиан** *баш.* – племянник, племянница (по обычаю с компонентом «зиан» давали имя ребенку, родившемуся в родной деревне матери)

**зайн** *ар.* – украшение; узор

**етдин** *ар.* – от слова дин «религия, вера» (компонент мужских имен)

**иш** *баш.* – напарник, друг, товарищ (компонент мужских и женских имен)

**камал** *ар.* – совершенный

**кан** *баш.* – см. **хан**

**кужа** *перс.* – см. **хужа**

**кул//гул** *баш.* – раб; помощник; друг (компонент мужских имен)

**маги** *перс.* – лунoподобная, красивая, как луна

**мин** *баш.* – родинка, родимое пятно (компонент мужских и женских имен)

**мир** *перс.* – глава (компонент мужских имен)

**мурза** *перс.* – царевич; младший брат (компонент мужских имен)

**ниса** *ар.* – девочка, дочь; госпожа, дама (компонент женских имен)

**нур** *ар.* – луч, свет (компонент мужских и женских имен)

**сара** *перс.* – 1) избранная, самая лучшая, драгоценная; 2) *ар.* – госпожа; чистая; отборная; 3) евр. – родоначальница, глава (компонент женских имен)

**султан** *ар.* – царь, правитель; царица, царевна (компонент мужских и женских имен)

**сура** *баш.* – сын, дитя, герой, смелый; помощник, друг, товарищ (компонент мужских имен)

**сылу** *баш.* – красивая, прекрасная; дочь, девочка (компонент женских имен)

**улла//алла** *ар.* – бог, всевышний

**фархи** *ар.* – радостный (компонент мужских и женских имен)

**фахри** *ар.* – славный, знаменитый (компонент мужских и женских имен)

**хажи** *ар.* – паломник (компонент мужских имен)

**хаир** *ар.* – самый лучший (компонент мужских имен)

**хак** *ар.* – бог, всевышний

**хан** *баш.* – хан, глава, правитель

**хасби** *ар.* – дорогая, уважаемая (компонент женских имен)

**хубби** *ар.* – любимый

**хусни** *ар.* – красивый, прекрасный (компонент мужских и женских имен)

**хужа** *перс.* – хозяин, обладатель; глава; мужчина (компонент мужских имен)

**шаих** *ар.* – 1) старец, духовный, глава; 2) учитель, наставник, воспитатель; 3) ученый

**шат** *баш.* – глава, правитель; хозяин

**ша**(х) *перс.* – 1) царь, правитель; хозяин; 2) аффикс обладания

**шаги//ша//шай** *перс.* – султан, царь; самый лучший, превосходный

**шамси** *ар.* – солнечный, светлый; сияющий (компонент мужских и женских имен)

**ян** *перс.* – душа; счастье (компонент мужских и женских имен)

**яр** *перс.* – 1) друг, товарищ; 2) аффикс обладания (компонент мужских имен)

# ИСЕМДӘР ТАРИХЫ

Кеше исемдәре һәм уларҙың килеп сығышы менән ғалимдар элек-электән ҡыҙыҡһына килгән. Беҙҙең илдә кеше исемдәрен йыйыу, ғилми яҡтан өйрәнеү эштәре XIX быуаттың аҙағында башлана һәм үҙенең башланғысында саф тел ғилеме фәне булып түгел, ә этнографик тикшеренеүҙәр булып үҫеп сыға. Төрки халыҡтарында кеше исемдәрен тикшереү тарихы күберәк тарихи, этнографик планда алып барыла. Был тәбиғи күренеш, сөнки кеше исемдәре телдең бер өлөшө булһа ла, ижтимағи тормошҡа тығыҙ бәйләнгән. Төрки исемдәренә ҡараған хеҙмәттәр араһында В. Магницкийҙың тикшеренеүҙәре айырым иғтибарға лайыҡ. В. К. Магницкий «Сыуаштарҙың мәжүси исемдәре» тигән хеҙмәтендә сыуаштарҙа христиан динен ҡабул иткәнгә тиклем булған кеше исемдәре теҙмәһен бирә. Был һүҙлеккә материалды ул 1718–1722 йылдарҙа үткәрелгән 1-се халыҡ иҫәбенең кульъяҙмаһынан һәм 1782–1795 йылдарҙа үткәрелгән «ревизские сказки»нан ала. Ошо ике документтағы исемдәрҙе сағыштырып, тәүге иҫәп ваҡытында сыуаштарҙа мәжүси исемдәр генә булып, 1795 йылғы иҫәптән (5-се ревизиянан һуң) христиан исемдәренең күбәйеп китеүен әйтеп үтә, һүҙлеккә 10582 исем теркәлгән. Ошо һүҙлектәге мәжүси сыуаш исемдәренең күбеһе боронғо башҡорт исемдәре менән тап килә. Бөгөнгө башҡорт теле нигеҙендә мәғәнәһен аңлатып булмаған ҡайһы бер башҡорт исемдәре лә ошо һүҙлектә бар. Мәҫәлән, **Абаҡ, Алка (Әлкә)** (төрки халыҡтарында ырыу исеме), **Апак, Аптек, Ибаҡ, Ибан** һ. б. В. К. Магницкийҙың икенсе бер хеҙмәте туранан-тура исемдәргә бағышланған. Сыуаштар араһындағы им-том, ырым, йолаларҙы тасуирлағанда, автор баланы һатып алыу йолаһын яҙып китә: «Лишь только новое существо на свет явится, бабушка немедленно завертывает его в тряпки и выносит на улицу. Поджидавший йомзя тотчас же новорожденного подбирает и вносит обратно в избу с заявлением: ребенка нашел; продаю; купите! Может быть, вам нужен этот ребенок? Где нашел? В сору нашел.., а затем новорожденному дается имя **Сыуппи (сүп, кый)** (Чув. – РС, 372), с которым он остается навсегда» («Магницкий», 196). Төрки халыҡтарҙа киң таралған был боронғо йола сыуаштарҙа ла мәжүси исемдәргә бәйле йәшәп килгән. Башҡорттарҙағы **Һатыбал, Сатлыҡ, Сатусы, Табылды** һымаҡ исемдәр ошондай йола менән ҡушылған. Бынан тыш, А. Самойлович баланы төрлө яман күҙҙән һаҡлар өсөн, насар, яман мәғәнәле исемдәр ҡушыу йолаһын яҙа. А. Самойлович төрки халыҡтарҙағы кеше исемдәрен өйрәнеү эшенең әһәмиәтен ярты быуат элек билдәләп үткән: «Пользуясь случаем, я позволю себе высказать пожелание, чтобы исследователи разных турецких племен обратили специальное внимание на личные имена; следовало бы составлять полные алфавитные списки личных имен, мужских и женских, по отдельным племенам с подробными указаниями, в

каких случаях в какую историческую эпоху, кому и почему давалось или дается данное имя. Впоследствии явилась бы возможность произвести весьма интересное в культурно-историческом отношении сравнительное исследование личных имен всего турецкого народа». Төрки антропонимдарын тикшереүҙә Н. Ф. Катановтың хеҙмәте ҙур урын биләп тора. Рус ғалимдарынан башҡа Ч. Ч. Вәлиханов менән А. Дибаевтың хеҙмәттәрендә исемдәргә ҡағылышлы урындар бар.

Революцияға тиклемге тел белемендә төрки антропонимияһы күҙлегенән башҡорт исемдәре махсус рәүештә тикшерелмәгән. Бында тик П. Никольскийҙың «Башкиры (этнографическое и санитарно-антропологическое исследование)» тигән диссертация эшен генә әйтеп китергә мөмкин. Автор был эшендә башҡорттарҙағы исем ҡушыу йолаһына бер аҙ туҡталып китә.

Һуңғы йылдарҙа ономастика фәне өлкәһендә билдәле бер күтәрелеш булып алды. Бында рус ғалимдары А. В. Суперанская һәм В. А. Никоновтың эшмәкәрлеге ҙур роль уйнаны. Ономастика фәнендә СССР Фәндәр Академияһының этнография һәм тел ғилеме институттары тарафынан ойошторолған 1-се Бөтә Союз антропонимик кәңәшмә (Мәскәү, 1968), Беренсе, Икенсе, Өсөнсө, Дүртенсе һәм Бишенсе ономастик конференциялар ономастика фәненең артабан үҫешенә бер этәргес йоғонто яһаны. Ономастика (грекса «исем ҡушыу») – барлыҡ, бөтә төр яңғыҙлыҡ исемдәрҙе өйрәнеү менән шөғөлләнә. Уның бер тармағы булған топонимика бөтә булған ерһыу атамаларын, географик атамаларҙы өйрәнә. Топонимиканы тармаҡтары булған гидронимика һыу (йылға, күл һ. б.) атамаларын, ә ойконимика ауыл, район, һ. б. кеше йәшәй торған пункт атамаларын тикшерә. Ономастиканың икенсе ҙур тармағын тәшкил иткән бүлек – антропонимика (грекса антропос «кеше», онома «исем») кеше исемдәрен өйрәнә. Бында кеше исемдәре, ҡушамат, ләҡәп исемдәр, аталыҡ (отчество), фамилия, псевдоним һ. б. кешене атап йөрөтә торған терминдар инә.

Төрки ономастика (шул иҫәптән антропонимика) фәненә килгәндә шуны билдәләп үтергә кәрәк: күп кенә ғалимдарҙың төрки халыҡтар тарихына йәки теленә бағышланған хеҙмәттәрендә ниндәйҙер кимәлдә ономастика проблемаларына, шул иҫәптән антропонимияға ҡағылышлы мәғлүмәттәр тупланған. Академик В. В. Бартольд үҙенең төрки, монгол халыҡтары тарихына һәм филологияһына арналған хеҙмәттәрендә боронғо ырыу, кеше исемдәренә ҡағылышлы күп кенә материал килтерә. Ул төрки халыҡтарында исем яһаусы компонент булып йөрөгән «йорт», «бей», «бай» һүҙҙәренә характеристика бирә һәм «бай» үҙенең билдәле бер ваҡыттағы социаль титул булыуҙан сығып, ябай бер исем яһаусы компонентҡа әйләнеүен күрһәтә. Тарихсы Л. Н. Гумилев боронғо төрки халыҡтар тураһындағы хеҙмәтендә ҡайһы бер боронғо титул һәм кеше исемдәре тураһында яҙа. Күп кенә төрки халыҡтарына хас булған исемде үҙгәртеү йолаһын күрһәтә.

Күренекле рус ғалимы С. Е. Маловтың боронғо төрки яҙмаларын тикшереүгә арналған хеҙмәттәрендә төрки антропонимияһы буйынса ҡиммәтле мәғлүмәттәр йыйылған. С. Е. Малов төрки ҡомарҡыларҙың телен тикшергән саҡта кеше исемдәренә, титулдарға иғтибар иткән. Был хеҙмәттәрҙә тупланған боронғо төрки исемдәр араһында башҡорттарҙа булған исемдәрҙе осратып була. Мәҫәлән: **Баяи, Банат, Ынйы, Көҫәмеш, Мысыр, Таймаҫ, Ҡабан, Барс** һ. б. Ғалим башҡорт телендә иң актив исем яһаусы компонент булып йөрөгән **ҡот, иш, ил, сура** һүҙҙәренең боронғо төрки исемдәр составында, VIII быуатҡа ҡараған ҡомарҡыларҙа, осрауын билдәләп үтә.

Бөгөнгө төрки ономастика өлкәһендә күренекле тюрколог Н. А. Баскаковтың хеҙмәте ҙур. Уның төрки һәм монгол телдәренә бағышланған эштәре ономастика фәненең бөтә тармаҡтарына ҡағылған бик күп мәғлүмәттәрҙе үҙ эсенә ала. Был хеҙмәттәрҙә төрлө кимәлдә ер-һыу атамалары, ырыу-ҡәбилә, ауыл, кеше исемдәре бирелгән. Н. А. Баскаков икенсе төр хеҙмәттәрен ырыу-ҡәбилә атамаларының һәм исем-фамилияларҙың килеп сығышы проблемаһына арнап, төрлө системалағы рус һәм төрки телдәренең бер-береһенә тәьҫир итеү мәсьәләләрен күрһәтә.

Һуңғы йылдарҙа төрки халыҡтарҙа кеше исемдәренә арналған махсус хеҙмәттәр барлыҡҡа килә башланы. Бында ҡаҙаҡ ғалимдарының хеҙмәттәрен күрһәтергә кәрәк (Кенесбаев, Жанузаков, Жәркешева).

Хәҙерге көндә ономастика фәне ике йүнәлештә үҫә: ер-һыу атамаларының, халыҡ һәм кеше исемдәренең мәғәнәһен, килеп сығыу тарихын, үҙгәрешен өйрәнеү – ономастика фәненең төп йүнәлешен тәшкил итә. Был тикшеренеүҙәр төрлө туғандаш һәм туғандаш булмаған телдәрҙең бер-береһенә тәьҫир итеү юлдарын, халыҡтарҙың сығышын һәм аралашыу тарихын асыҡлауға ярҙам итә. Ошо йәһәттән ономастика фәне тарих, этнография һәм тел ғилеменә ярҙамсы булып тора.

Ономастиканың икенсе йүнәлеше практик мәсьәләләрҙе хәл итеүгә хеҙмәт итә. Топоним һәм антропонимдарҙы йыйыу, туплау, уларҙы төрлө һүҙлектәргә, ҡулланмаларға теркәү, дөрөҫ яҙылыш, әйтелеш һәм ҡулланылыш мәсьәләләрен хәл итеүгә килтерә.

Башҡорт ономастикаһы, дөйөм төрки ономастикаһы һымаҡ, һуңғы йылдарҙа бер күтәрелеш кисерҙе. Бигерәк тә топонимия, ер-һыу атамаларын йыйыу һәм эшкәртеү өлкәһендә билдәле тикшеренеүҙәр барлыҡҡа килде. Профессор Ж. Ғ. Киекбаев йәнләндереп ебәргән был фән тармағы байтаҡ ҡына башҡорт теле белгестәрен үҙенә йәлеп итте: Башҡортостан ер-һыу атамаларына бағышланған мәҡәләләр һәм махсус хеҙмәттәр баҫылып сыҡты (Баишев, Киекбаев, Аҙнабаев, Ғарипова, Ғарипов, Камалов, Аҙнағолов, Шәкүров).

Башҡорт антропонимияһының торошона килгәндә ул дөйөм башҡорт теле ғилеме фәненең үҫешенән түбән. Башҡорт исемдәренә арналған хеҙмәттәр бик әҙ.

Революцияға тиклемге башҡорттар тураһындағы хеҙмәттәрҙә лә кеше исемдәренә туранан-тура бағышланған тикшеренеүҙәр юҡ, тик исем ҡушыу йолаһына һүҙ ыңғайында ғына туҡталып киткән урындар бар (Никольский).

Исем ҡушыу йолаһына бәйле мәғлүмәттәр башҡорт халыҡ сәсәне М. Буранғоловтың яҙмаларында бар. Башҡорт фольклорын, сәнғәтен, боронғо йола, ғөрөф-ғәҙәттәрен, ырымдарын – ғөмүмән, башҡорт тормошон яҡшы белгән М. Буранғолов 1740 йылғы башҡорт ихтилалдарының етәксеһе Ҡараһаҡал исеме тураһында, былай ти: «Миңле ине әйәге, Батыр ине йөрәге, Икәү ара һөйләшеп, Миңе боҙолмаһын тип, Миңнеғол тип атаны». Ул башҡорт халыҡ йыры «Һары ла сәс»тең тарихын һөйләгәндә ҡушаматтың нисек исемгә әйләнеүе тураһында әйтеп китә: «Уны (ҡыҙҙы) үҙ исеме менән йөрөтмәй «Ҡолан, Һары сәс» тип йөрөткәндәр. Сит кешеләр һымаҡ ауыл халҡы ла әйткән. Аҙаҡҡа табан бөтөнләй **Айһылыу** исеме юғалып, «Һары сәс» исеме менән аталып киткән. Икенсе осраҡта мәргән һүҙенән кеше исеме яһалыуы әйтелә: «Мәргәнлектә дан тотоп, үҙ исемен юғалтып, бөтә тирә илдәрҙә **Мәргән** тигән дан тотҡан».

Шулай итеп, башҡорт исемдәре тураһында махсус хеҙмәттәр булмаһа ла, төрлө сығанаҡтарҙа башҡорт исемдәре тураһында байтаҡ материал бар.

Ошо сығанаҡтарҙың иң әһәмиәтлеһе башҡорт шәжәрәләре. Беренсенән, был шәжәрәләр бер нисә быуын башҡорт исемдәрен һәм ҡайһы бер боронғо исем ҡушыу йолаларын сағылдырыуы менән, икенсенән, башҡорт халҡы тураһында башҡорттарҙың үҙҙәре тарафынан яҙылған беренсе яҙма документ булыуы менән ҡиммәтле. Шәжәрәләрҙең авторы билдәле кеше түгел, ә халыҡ. Телдән телгә, быуындан быуынға күсеп, зат-ырыуҙы, нәҫел-нәсәпте күрһәтеп килгән был документтың башҡорт исемдәре тарихы өсөн әһәмиәте бик ҙур.

Шәжәрәләрҙән ҡала исемдәр тарихын өйрәнеүҙә Рәсәйҙә Петр I тарафынан башланылып, төрлө йылдарҙа йыйылған «Ревизские сказки» материалдары ҙур урын тота. Рәсәйҙә йәшәгән бөтә халыҡты иҫәпкә алыу бурысын ҡуйған был перепись бөтәһе ун мәртәбә үткәрелгән. Ошо халыҡ иҫәбен I, II, III, IV V, VI, VII, VIII, IX, X «ревизские сказки» тип атап йөрөткәндәр. Башҡорт шәжәрәләрендә ир-ат исемдәре генә күрһәтелгән булһа, «ревизские сказки» материалдарында ҡатын-ҡыҙ исемдәре лә бар. Переписты рус писарҙары үткәреүгә ҡарамаҫтан, исемдәрҙең башҡортса әйтелешен һаҡларға тырышыу күҙгә ташлана.

Башҡорт исемдәре тупланған өсөнсө сығанаҡ – ул Башҡорт АССР-ының тарихы буйынса тупланған материалдар. Үҙәк Дәүләт архивы менән СССР Фәндәр Академияһының Тарих институты һәм Фәндәр Академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан әҙерләнгән был документтар йыйынтығында, Башҡортостандағы төрлө ихтилалдарҙа ҡатнашыусыларҙың һәм ер бүлеү политикаһы үткәрелгән осорҙарҙа төрлө документҡа теркәлгән кешеләрҙең исемдәре, фамилиялары тупланған.

Был хеҙмәт ошо документтарҙан алынған һәм автор тарафынан Башҡортостандың төрлө райондарынан, Ырымбур, Һамар өлкәләренән йыйылған башҡорт исемдәре нигеҙендә яҙылды.

**Антропоним** (кеше исеме) – иң тәүҙә һүҙ. Ул бөтә булған башҡа һүҙҙәр менән бергә телдең лексика өлөшөнә ҡарай һәм башҡа һүҙҙәр кеүек үк ошо телдең закондарына буйһона. Шуға күрә, бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланып ҡалған ҡасандыр актив ҡулланылған ҡайһы бер боронғо исемдәр, исем яһаусы ялғауҙар телдә ҡатып ҡалған боронғо формаларҙы, һүҙҙәрҙе, һүҙ яһаусы аффикстарҙы асырға ярҙам итә. Башҡорт антропонимдарын өйрәнеү нигеҙендә башҡорт теленең ономастикаһына хас булған ҡайһы бер лексик-грамматик законлыҡтарҙы асыу киләсәктә башҡорт теленең тарихи лексикологияһына һәм тарихи грамматикаһына ҡағылышлы төрлө мәсьәләләрҙе тикшереүгә билдәле бер өлөш индерәсәк.

Кеше исемдәре, икенсе яҡтан, ошо халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына, милли культураһына, ҡараш-фекеренә, материаль тормош шарттарына бәйле. Был яғы менән кеше исемдәрен өйрәнеү халыҡтың тарихын, этнографияһын тикшеренеүселәргә ярҙамға килә. Кеше исемдәре яңғыҙлыҡ исемдәренә ҡарай. Һәр яңғыҙлыҡ исем сығышы менән уртаҡлыҡ исемгә барып тоташа. Яңғыҙлыҡ исемдәр телдә бер конкрет нәмәнең атамаһы булып тора һәм шуға күрә уның, ғөмүмән, мәғәнәүи яғына ҡарағанда, атау функцияһы – номинатив яғы өҫтөнлөк итә. Уның төп бурысы – билдәле бер нәмәгә атама булыу. Исем кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү өсөн кәрәк. Кеше исемдәре ошо хәжәт менән барлыҡҡа килеп, һуңынан бер кешене икенсе кешенән айырыу өсөн хеҙмәт иткән тамға, билдә булып китә. Исемдең ошо өндәшеү һәм кешеләрҙе бер-береһенән айырыу функцияһы төп әһәмиәткә эйә. Дөйөм

алғанда кеше исемдәре тел законына бәйләнешле булһа ла уның яһалышы һәм үҫешендә үҙенә генә хас эске бер законлылығы булыуы ла тәҫмөрләнә.

Кеше исемдәре ҡасан, нисек, тел һәм йәмғиәт үҫешенең ҡайһы баҫҡысында барлыҡҡа килгәндер – быны әйтеүе ҡыйын. Ләкин билдәле булған кешелек йәмғиәте тарихының һәр бер дәүерендә кеше исемдәре булған. Кеше исемдәре бик борон замандарҙа, тәүтормош дәүерендә, аныҡ телмәр (членораздельная речь) менән бер ваҡытта, барлыҡҡа килгән тигән фекер йәшәй. Исемдәрҙең килеп сығышы бик боронғо замандарға ҡарауы тураһында «Алп батыр» тигән башҡорт халыҡ әкиәтендә бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар: «Алп!.. тип ниҙер әйтмәк булған да бабай шунда йән биргән. Егет атаһын ҡәҙерләп кенә күмгән дә... атаһының балтаһын алып, ташҡа ҡайрап үткерләгән дә, урманға инеп киткән. Унда бер йыуан оҙон имән ағасын ҡырҡып, үҙенә йәйә яһап алған. Өс айыуҙың тарамышынан кереш яһап тарттырған. Имән ҡырҡып, уҡ яһаған, ул уҡтың башағына осло таш ҡуйған. Шулай итеп, егет үҙенә ҡорал яһап ала ла донъя гиҙергә сығып китә. Урал тауҙың аръяғына сығып, ете аҙым атлаған да туҡтаған. Шунда уға бер ҡыҙ осраған. Ҡыҙ уға: «Исемең кем, егет?» – тигән. Егет аптырап ҡалған. Кешелә исем тигән нәмә булыуын ул белмәй икән. «Нимә һуң ул исем?» – тип һораған егет. Ҡыҙ йылмайып яуап биргән: «Бына һинә кем тип өндәшәләр һуң?» – тигән. Егет әйткән: «Атайым үлер алдынан ғына миңә Алп тип өндәшкәйне», – тигән. Ҡыҙ шунан: «Улай булғас, һин Алпбатыр булаһың инде», – тигән.

Исем атау, исем ҡушыуҙың төп нигеҙе бына ошонда күренә. Исем иң элек кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү өсөн кәрәк булған. Кеше исемдәре ошо ихтыяж менән барлыҡҡа килеп, һуңынан йәмғиәт үҫеше барышында бер кешене икенсе кешенән айырыу өсөн хеҙмәт иткән тамға, билдә һымаҡ нәмәгә әүерелгән. Кеше исемдәре телдәге башҡа һүҙҙәр менән бергә йәмғиәттә барлыҡҡа килә һәм йәмғиәттә генә йәшәй. Йәмғиәт үҫеше менән исемдәр ҙә үҙгәреш кисерә килә. Тел һәр ваҡыт камиллыҡҡа ынтыла һәм шуның бер өлөшөн, бер бүлеген тәшкил иткән яңғыҙлыҡ исемдәрҙә, бигерәк тә кеше исемдәрендә, камиллыҡҡа ынтылыш тағы ла көслөрәк икәне күренә. Ошо камиллыҡҡа ынтылыш тенденцияһы ла исемдәрҙең үҙгәреүсәнлек сифатын арттыра төшә. Кеше исемдәренең экспрессив яғы ла уны башҡа яңғыҙлыҡ исемдәрҙән айырып тора. Исемдәргә иркәләү, кесерәйтеү ялғауҙары ҡушылып, исемдең эмоциональ көсөн арттыра, уға буяу өҫтәй.

### Башҡорт исемдәренең килеп сығышы

Башҡорт исемдәрен сығышы буйынса икегә бүлеп ҡарарға мөмкин: 1) дөйөм төрки тамырлы төп башҡорт һүҙҙәренән яһалған һәм 2) үҙләштерелгән (ғәрәп, фарсы һ. б. телдәрҙән ингән) исемдәр. Төп башҡорт исемдәре мәғәнәләре менән күп төрлө. Боронғо башҡорт тормошоноң һәр яғы: хужалығы, көнкүреше, йәмғиәт төҙөлөшө, ғөрөф-ғәҙәттәре, донъяға ҡарашы, табыныу йолалары, туған-ҡәрҙәшлек мөнәсәбәттәре, матурлыҡ төшөнсәһе һ. б. халыҡтың бөтә булмышы кеше исемдәрендә сағылыш алған.

Башҡорт исемдәре лексик-семантик яҡтан түбәндәге төркөмдәргә бүленә:

1. Йәнлек, ҡош-ҡорт атамаларынан яһалған кеше исемдәре;
2. Табыныу йолаларына бәйле исемдәр;
3. Баланы һаҡлау йолаларына бәйле исемдәр;

4. Яҡшы, изге теләк теләп ҡушылған исемдәр;
5. Ваҡыт (көн, ай, йыл миҙгелдәре) төшөнсәһенә бәйле исемдәр;
6. Тәбиғәт күренештәренә бәйле исемдәр;
7. Тормошта, көнкүрештә төрлө ваҡиғаға бәйле исемдәр;
8. Баланың ҡиәфәте, тәҫ-башы һ.б. үҙенсәлектәренә ҡарап ҡушылған исемдәр;
9. Төрлө төҫ атамаларына бәйле исемдәр;
10. Туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек һәм мөнәсәбәтте белдергән һүҙҙәргә бәйле исемдәр;
11. Этнонимдарға бәйле исемдәр;
12. Ер-һыу атамаларына бәйле исемдәр;
13. Үҫемлектәр, ағастар, иген, сәскә атамаларына бәйле исемдәр;
14. Һандарға, һан төшөнсәһенә бәйле исемдәр;
15. Эш, хеҙмәт, эшмәкәрлек төрөнә бәйле исемдәр;
16. Эш, хеҙмәт, яу ҡорамалдарына бәйле исемдәр;
17. Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларына бәйле исемдәр;
18. Таш-металл атамаларына бәйле кеше исемдәре;
19. Социаль титулдарға, дәрәжә атамаларына бәйле исемдәр;
20. Әйтелеш оҡшашлығына ҡоролған исемдәр.

### 1. Йәнлек, ҡош-ҡорт атамаларынан яһалған кеше исемдәре

Борон замандарҙа, халыҡ тормошо үҙенең бер башланғысын кисергән дәүерҙә, йәнлек, ҡош-ҡорт аулау, мал аҫрау бик ҙур урын тотҡан. Шуның өсөн башҡорт телендә йәнлек, ҡош-ҡорт атамаларынан яһалған исемдәр киң таралған. Был төр исемдәрҙә кешегә йәшәү өсөн кәрәк булған көс, ҡыйыулыҡ сифаттары сағылып, бала физик яҡтан көслө, ҡыйыу булһын, тигән теләк урын алған. Бындай исемдәр төрки яҙма комарткыларында кеше исеме булып теркәлгән.

Башҡорт телендә *барс* һүҙе менән **Йәнбарс (Янбарисов)** һәм **Ҡолбарс (Ҡулбарисов)** исемдәре билдәле. 1245 йылғы төрки-ғәрәп һүҙлегендә **Байбарс**, **Ҡотлобарс**, **Тайбарс**, **Кулбарс**, **Айбарс**, **Алтыбарс**, **Ласынбарс** тигән исемдәр алынған (Ҡурышжанов). С. Е. Малов тикшеренеүҙәрендә **Барс, Ҡарабарс, Оғулбарс** һәм Г. Айдаров VIII быуат орхон яҙмаларында **Барсбег** исемен күрһәтә. М. Ҡашғари һүҙлегендә **Барсған** тигән кеше исеме бар. Рашид ад-дин яҙмаларында ла **Барсбука** исеме алынған. Мосолмандар династияһы исемлегендә **Барсбай** исеме бар **(Босворт)**.

Януар атамаларынан башҡорт телендә күп таралған исемдәрҙең береһе – **Арслан** (мәҫ., **Арслан, Арсланбек, Арсланбай, Арсланғол, Арсланғужа, Арсланҡай, Арслангәрәй, Ҡылыс Арслан** һ. б.)

Төрки телдәрендә йыш осраған **Бабр, Бабур** исеме (ҡапландың бер төрө булған януар атамаһы) башҡорт телендә һирәк осрай, ул **Арслан бабр** формаһында ғына һаҡланған (Кафтанников). Боронғо башҡорт исеме **Сыртлан** төрки телдәрендә *сул бүреһе* мәғәнәһендә йөрөй. Ҡаҙаҡ телендә *сырттан* – бүре тотоусы эт тигәнде аңлата (Ҡурышжанов, 202). Бөгөнгө көндә фамилияларҙа осраған **Сыртлан** исеме борон башҡорт телендә актив ҡулланылған булырға тейеш. *Күк һыртлан* формаһында ул башҡорт халыҡ йырында: «ялан еркәйенең әй бүреһе, күк һыртлан да булыр күбеһе», – тигән юлдар билдәле. Ер-һыу атамаларында ғына һаҡланып

ҡалған Ҡабан атамаһы ла борон кеше исеме булған һәм боронғо төрки яҙмаларында кеше исеме булып теркәлгән (М. Ҡашғари). Боландың бер төрөн аңлатҡан *сағын* һүҙе бөгөнгө башҡорт телендә **Сағынбаев** тигән фами-лияла тороп ҡалған. *Ҡашҡар* (бүре һәм бүре ала торған ҙур эт) һүҙенән яһалған башҡорт исемдәре фамилияларҙа, ауыл атамаларында һаҡланған. Беҙҙеңсә баш-ҡорт телендә һәм башҡа төрки телдәрҙә *ҡашҡар, бүре, корт* һүҙҙәре бүренең төрөн күрһәткән булырға ла мөмкин(?). Баш-ҡорт телендә **Бүребай, Аҡбүре, Байбүре** тигән кеше исемдәре, уларҙан яһалған ауыл исемдәре бар.

**«Айыу»** һүҙе менән исемдәр күп: **Айыуҡас, Айыусы, Айыуҡа, Айыу-хан** һ.б. Ошондай йәнлектәрҙең исеме көсө, ғәйрәте һ.б. сифаты менән кеше исеменә әйләнһә, артабан тотем булып та кеше исеменә әүерелеүе мөмкин. Йорт хайуандарынан хужалыҡта ҙур роль уйнаған йылҡы малының төрлө атамалары кеше исеменә әүерелгән. «Ат» һүҙе менән **Атйетәр, Атъюк, Атмен, Атланай, Атланыш** исемдәре билдәле. **Атйетәр** тигән кеше исеменән яһалған ауыл исеме бар. **Йылҡыбай**, **Йылҡысура, Ҡонанбай, Тайсы, Тайгилде, Ҡолонбай, Арғынбай** исемдәре бар.

Боронғо төрки «ҡуҙы» һүҙенән (һарыҡ бәрәсе) башҡорт телендә бик күп исемдәр яһалған: **Ҡузы, Ҡузбай, Ҡузыбай, Кузыбәк, Күзбәк, Ҡузыбәк, Куз-баш, Ҡузыбаш, Ҡузыбас, Ҡузығол, Ҡузыбай, Ҡузыҡай, Ҡузыгилде, Ҡузымбәт, Ҡузынай, Ҡузыйкүрпәс** һ. б. **(Кузыев, Күзбәков, Ҡузыкаев** фамилиялары бар.) Юғарыла һанап үткән януар, йәнлек һәм хайуан атамаларынан яһалған исемдәрҙең күбеһе көслөлөк, аҡыл, сослоҡ, ғәйрәтлелек символы булараҡ ир-атҡа ҡушылған. Ләкин ҡайһы бер януар, хайуандарҙың атамалары ҡатын-ҡыҙҙар исеме булып та йөрөгән. Бында **Арсланбикә, Ҡолонбикә, Боланбикә, Тайбикә, Йопарсолтан, Малбикә** исемдәрен күрһәтергә мөмкин. Кеше исемдәре үҙҙәренең сығышында башта уҡ ир-ат, ҡатын-ҡыҙ исемдәренә бүленеп тормаған (иң боронғо исемдәрҙең бер үк төрлөләре ир-атҡа ла, ҡатын-ҡыҙға ла бирелеүе ихтимал). Һуңынан әкренләп исемдәр бүленә башлаған, ир-ат сифатына тура килтереп аҡыллылыҡҡа, көслөлөккә символ булырлыҡ йәнлек-коштарҙың исемдәре алынһа, ҡатын-ҡыҙ исеменә күберәге нәфислек, матурлыҡ сифаты булған йәнлек-ҡоштар һайланған. Шунан тыш, әлбиттә, йәнлек, ҡош-ҡорт атамалары тотем булараҡ та исемгә әйләнгән. Боронғо башҡорттарҙың көнкүрешендә ҡош-ҡорт билдәле урын тотҡан (Руденко). Ҡош сөйөү йолаһы булған. Көслө, йылғыр ҡоштарҙан бөркөт, ыласын, шоңҡар, балапан, тоған, торомтай тигән атамалар ир-ат исеме булып киткән (Радлов). Былардан башҡа төрлө һунар һәм һайрар ҡоштар кеше исеменә әйләнгән (**Ҡарлуғас, Һандуғас, Ҡарсыға, Сыпсыҡ, Туғыҙаҡ, Туғана (Дуғана), Сәүкәбай, Турғай, Ҡорҡужа, Ҡоръюк, Аҡҡош, Ҡарағош, Ҡобағош, Тәтелге, Ямаш, Шуна (Һуна**) һ.б.). Был исемдәрҙең ҡай-һылары бөгөнгө көндә фамилияларҙа, ауыл һәм кеше исемдәрендә осрай. Бөгөнгө башҡорт телендә *коҙғон* исеменән яһалған **Ҡускунов** фамилияһы билдәле. *Ҡоҙғон* ҡошоноң атамаһы боронғо төрки халыҡтарында оҙон ғүмер, аҡыл билдәһе итеп ҡаралған.

Боронғо исемдәр араһында төрлө йәнлек, януар һәм ҡош-ҡорт балаларының атамаларынан яһалған кеше исемдәре бар. Бындай исемдәр, бер яҡтан, кешенең борон заманда тәбиғәт донъяһы менән тығыҙ бәйләнештә булғанын күрһәтһә, икенсенән, ғөмүмән кешегә борондан нескә күңел, матурлыҡ хисе хас булғанын белдерә. Кеше ошо йәнлек, ҡош-ҡорт балаларын яратып үҙ балаһына уларҙың исемен бирә. Ҡош-йәнлек балалары

атамаһынан **Тайлаҡ** (айыу балаһы), **Бүлтерәк** (бүре балаһы), **Түләк** (көҙгө бәрәс), **Йәйләүес** (йәйге бәрәс), **Ҡузый** (яҙғы бәрәс), **Нарбута** (дөйә балаһы), **Тай, Ҡолон, Ҡолоҡай, Ҡолаҡас, Көсөк, Балакан, Бәпкә, Сепкәй, Сепей** кеүек исемдәр билдәле. Ошо исемдәр менән тағы ла башҡа ҡушма исемдәр яһала (**Ҡуҙы+бәк, Ҡуҙы+бай, Зая+түләк, Түләк+бай, Көсөк+бай, Эт+көсөк, Ҡолон+бикә, Тай+бикә** һ.б.).

Йәнлек атамаларынан «эт», «көсөк» һүҙе менән яһалған исемдәр башҡорт телендә айырым урын алып тора. Был исемдәр тураһында «Табыныу йолаларына бәйле исемдәр» бүлегендә бирелә.

## 2. Табыныу йолаларына бәйле исемдәр

Боронғо кешеләр, ысынбарлыҡты, тәбиғәттәге төрлө үҙгәрештәрҙе, тормоштағы һәр нәмәне ниндәйҙер бер мөғжизәгә бәйләп, тәбиғи булмаған бер илаһи көскә ҡайтарып ҡалдырғандар. Тәбиғәт алдындағы көсһөҙлөк кешене төрлө хөрәфәткә ышандыра, һыуға, ергә, күккә, тау–ташҡа һ.б. күп нәмәләргә табыныу йолалары, мәжүсилек барлыҡҡа килгән. Ошо табыныу йолалары, тотемдар менән бәйле бик күп боронғо башҡорт исемдәре беҙгә килеп еткән.

Башҡорттарҙың борон күп нәмәләргә табынып йәшәүе тураһында беренсе башлап ғәрәп хәлифенең илсеһе Әхмәд ибн Фаҙлан яҙып ҡалдырған. Ул Ғәрәп иленән Болгар иленә китеп барышлай 921–922 йылдарҙа башҡорттарға тейеп китә һәм башҡорттар тураһында былай ти: «Из них кое-кто говорит, что у него двенадцать господ: у зимы господь, у лета господь, у дождя господь, у ветра господь, у деревьев господь, у людей господь, у лошадей господь, у воды господь, у ночи господь, у дня господь, у смерти господь, у земли господь, а господь, который на небе, самый большой из них, но только он объединяется с ними в согласии и каждый из них одобряет то, что делает его сотоварищ... Мы видели, как одна группа поклоняется змеям, другая группа поклоняется рыбе, третья группа поклоняется журавлям...». Шул аллаларға табыныу ҡалдығы беҙҙең заманда ла йәшәп килә: һыуға беренсе тапҡыр төшкәндә, һыуға тәңкә ырғытыу, таң һыуын алғанда, уға аҙыҡ биреү, ағастың емешен, япрағын (им, дауа өсөн) алғанда, унан рөхсәт алыу һымаҡ йолалар халыҡ араһында әле лә бар. Ағас, тал атамаларынан яһалған **Имәнбай, Имәнғол, Байтирәк, Талдыҡ, Талботаҡ, Ҡарағай, Ҡаранай** тигән кеше исемдәре ағасҡа табыныу йолаһынан ҡалған булырға мөмкин. Боронғо ырыу, ара атамаларында, халыҡ ижадында ла башҡорттарҙың төрлө януар, йәнлек, ҡоштарға табыныу ҡалдыҡтары һаҡланған. Көслө януар, йәнлек атамалары тотем булып кеше исемдәрендә һаҡланған (**Бүребай, Аҡбүре, Байбүре, Бүрехан, Айыухан, Айыусы, Айыуҡай, Айыуҡас, Айыубай** һ.б.). Былай табыныу йолалары, тотемдарға бәйле исемдәр араһында *эт, көсөк* һүҙҙәре менән яһалған кеше исемдәре һәм баланы һаҡлау өсөн булған исем ҡушыу йолалары махсус урын алып тора. Этте боронғо кешеләр баланың бер һаҡсыһы тип ҡарағандар. Бала тыуып, бер нисә көн үтеүгә, уға беренсе – «эт күлдәге» (*көсөк күлдәге*) кейҙергәндәр. Ҡырҡ көн үтеүгә: «Балам эт кеүек ныҡ, көсөк кеүек әрһеҙ булһын!» тип күлдәкте көсөк муйынына кейҙереп ебәргәндәр. Икенсе бер йола – бала тыуғас та уны эт ялғашына һалып, уға **Эттеймәҫ, Эталмас** тип исем ҡушыу ҙа *эт* культына, баланы һаҡлауға бәйле. Балаға тәүге «эт күлдәге» кейҙереү йолаһы ҡырғыҙҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа билдәле. Башҡорт те-

лендә кеше исемдәре, кеше исемдәренән яһалған ауыл атамалары (антропотопонимдар) составында осраған «эт, көсөк» һүҙҙәре береһе лә (ҡайһы берәүҙәр уйлағанса) баланы хурлап, түбәнһетеп түгел, ә баланың ғүмерен һаҡларға теләп табыныу культы – тотем булып кеше исеменә әйләнгән. Башҡорт телендә борон эт атамалары күп булған: *эт, көсөк, көбәк, барак* (оҙон ялбыр йөнлө, йылғыр һунар эте). Бала тормаған саҡта баланы эт ҡуйынына һалып, имеҙеп алып, уға ***Этимгән*** тип исем ҡушыу тураһында Лоссиевский яҙып ҡалдырған. Эт тотемы менән бәйле яһалған кеше исемдәре күп төрки һ.б. халыҡтарҙа һаҡланған. Башҡорт телендә: **Этбай, Этекәй, Эткенә, Эткол, Этйән, Эткөсөк, Этсеюл, Эткусты, Этекәс, Көсөк, Көсөкбай, Көсөк бей, Көсөкәй, Көсөккол, Аҡкөсөк, Байкөсөк, Муйнаҡ, Барак, Шаһибәрәк, Күбәк, Аҡкүбәк, Байгүбәк, Ҡарағүбәк, Аскүбәк** һ.б. исемдәр билдәле. *Бүре* тотемы башҡорттарҙа бигерәк тә киң таралған. Йортҡа ҡаза килмәһен тип, ҡоймаға, ҡапҡа башына **бүре** йәки **ат** башы элеп ҡуялар. Имеш, улар, ҡазанан һаҡлау менән бергә, ҡот та килтерә. Бынан башҡа С. И. Руденко бөрйәндәрҙә һәм гәрәй-ҡыпсаҡтарҙа оҙаҡ бала тапмаған ҡатынды бүренең һуҙып киптерелгән ауыҙ тиреһенән үткәреү йолаһын яҙа. Ошоноң һымаҡ йола тураһында 1970 йылда Әбйәлил районы Асҡар ауылында йәшәүсе 75 йәшлек әсәйемдән (Кусимова Бибиғәсүмә Шәйхәттәр ҡыҙынан) яҙып алдым: «бала тормаһа, йә йыш ауырыһа, бүре ауыҙын, бүре тырнағын сәңгелдәккә тағып ҡуялар». Шулай итеп, бүре тотемынан **Бүребай, Бүрехан, Бүре, Аҡбүре, Байбүре** тигән исемдәр барлыҡҡа килгән. «Бүре» һүҙе менән кеше исемдәре күп һәм төрлө халыҡта таралған (Илимбетов). Үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙҙарҙа **Ҡаскар, Ҡаскарбай, Борибай,** төрөкмәндәрҙә **Гурт, Бори, Моджек** һ. б. исемдәр бар. Бүре культы донъяла бөтә халыҡтар өсөн хас булған. Х. Е. Есбергенов ҡараҡалпаҡ һәм башҡорттарҙа ислам диненә ҡәҙәрге оҡшаш мәжүси йолалар яҙып, уларҙа борон *бүре, барс, дәйә* һ.б. йәнлек һәм ҡоштарҙың тотем булып йөрөүен әйтә. А. Г. Гафуров тажиктарҙа яңы тыуған баланы *бүре* тиреһе аша үткәреп, **Гурт** (ҡорт) тигән исем ҡушыуҙары һәм бала күлдәгенә бүре күҙе менән бүре йөрәгенең бер киҫәген тегеп ҡуйыуҙары тураһында яҙа. **Бөри** һәм **Көкбөри** тигән кеше исемдәре Рашид ад-дин яҙмаларында күрһәтелә.

Атты илаһилаштырыу, атты изге тип ҡарау төрки халыҡтарында борон-борондан килгән йолаларҙың береһе. Башҡорт телендә *атҡа* бәйле исемдәрҙең килеп сығышы ошо йолаға бәйле. Был турала Юрматы шәжәрәһендә ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирелә: «Әммә Чачлы Дәрүиш бинең ғүмере ахры булды, уғлы юк ирде һәм ҡәрендәш-яҡыны юк ирде, бер генә ҡыҙы бар ирде, үз ҡулы аҫтындағы нуғайға ҡызны биргән иде. Әмма ул ҡыздан ике уғлы бар иде, бере Бурнак, бере Ядиар дигән иде. Әмма Бурнак диб аны (шунның) өчен атадиләр, һәмче уғлы-ҡызы юк сәбәбдин, борны аҡ атның ҡуйынына салып ат исемен бирделәр» (БШ, 28 б.). Боронғо кеше тәбиғәт күренештәрен илаһи көскә бәйле тип ҡабул иткән һәм уларға табынған. Күк исемдәренең атамаларынан: *ай, көн (ҡояш),* ҡояш һүҙҙәренән кеше исеме яһалған: **Айһылыу, Айтуған, Айҙар, Айсыуаҡ, Айҙағол, Айбикә, Айҙыл, Айсыл, Айҙаҡ, Айҙанай, Айҙарали, Айҙаш, Аймәт, Айбул, Айсолтан, Айнур, Айгилде, Айбулат, Айтаман, Айбаҡты, Айман** тигән исемдәр «ай» һүҙенән килеп сыҡҡан. Ошо «ай» һүҙе менән бәйләнгән **Айһылыу** исеменең килеп сығышына ҡарата Урал эпосында: «(Айһылыу улына:) Ҡараңғы төн яҡтыртҡан, Айҙан тыуған бала инем...» тип әйтелә. «Көн» һүҙе менән: **Көнбай, Көнейә, Көнбаҡ, Көнгил-**

де, **Көнсыуаҡ, Көнтоғмыш, Көнһылыу, Көнбикә, Көнсолтан** һ.б. («көн» – ҡояш мәғәнәһендә). С. И. Руденко күҙәтеүенсә «ай» – ир-ат, ә «көн» – «ҡояш» – ҡатын-ҡыҙ затынан тип ҡаралған.

### 3. Баланы һаҡлау йолаларына бәйле исемдәр

Халыҡ тарихының билдәле бер осоронда, ырыу булып ойошоп йәшәгән дәүерҙәрҙә, төрлө хөрәфәт, төрлө йола киң таралған һәм йолаларҙың иң мөһимдәренең береһе – баланы һаҡлауға арналған булған. Ошо йолаларҙың ҡайһы берҙәре балаға исем ҡушыу менән бергә барлыҡҡа килгән.

Бала тормаған хәлдә, .уны һаҡлап алып ҡалыу өсөн төрлө исем ҡушыу йолалары булған. Төрки халыҡтарына хас йолаларҙың береһе – баланы һатып алыу йолаһы – башҡорттарҙа әлегәсә билдәле. Бала тыуғас та уны тәҙрә аша күп балалы, йәки балалары ныҡ булған бер ғаиләгә биреп торғандар. Билдәле бер ваҡыттан һуң (башта бер йыл, унан һуң 3 көн) был баланы ата-әсәһе мал биреп, һатып ала торған булған. Быңдай балаға **Сатлыҡ, Сатыбалды, Сатыбал, Сатлыкбик** тигән исем ҡушылған. Ҡырғыҙҙарҙағы ошо йола тураһында бик ентекле рәүештә С. М. Абрамзон яҙа. Уның күҙәтеүенсә, баланы сит кешегә бер йылға тәрбиәгә бирәләр. Ошо ваҡыт эсендә әсә-атаһы баланы күрмәҫкә тейеш. Бер йылдан һуң әсәһе туғыҙ иҫке нәмә: беҙ, тоҡ, бысаҡ, бәке, иҫке итек, иҫке кәпәс, кейеҙ, бейәләй (ҡаҙан тота торған) һәм көсөк алып барып һатып ала. Был баланың исеме **Сатылған, Сатыбалды, Сатынды, Саткы, Саткынбай** һ.б. тип ҡушыла.

Баланы һатып алыу, табып алыу йолаларының ҡалдығы төрки халыҡтарҙа ғына түгел, көнсығыш славян халыҡтарында ла һаҡланған. Рус исем-фамилияларының килеп сығышын өйрәнеп, рус ғалимы А. М. Селишев был йоланың рустарҙа ла булыу ихтималын әйткән: «Русские имена **Найден, Продан, Краден, Куплен, Ненаш** в своем происхождении связаны были, по-видимому, как и у других народов, с магическим обрядом мнимой находки, продажи, кражи, купли ребенка». Тимәк, һатып, табып алыу йолалары йәмғиәт үҫешенең бер этабында бөтә халыҡтарға ла хас булған. Боронғо башҡорт исемдәре **Табылды, Табай, Табыс (Табыш), Табынбай,** һис һүҙһеҙ, шул йоланың бер күрһәтеүсеһе булып һаҡланып ҡалған.

Баланың ғүмерен һаҡлау өсөн, һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышанып, төрлө «һаҡлағыс» мәғәнәле һүҙҙәр менән исем ҡушыу йолаһы билдәле. Төрки халыҡтарҙағы **Торсон, Турсун, Дурсун** исемдәре ошо йолаға бәйле. Башҡорт телендә **Торсон, Торсанай, Тороҡ, Торсонғужа** формалары осрай. «Үлмәҫ», «тере» һүҙҙәре менән яһалған исемдәр ҙә ошо һаҡлағыс исемдәр рәтенә инә.

«Иҫән», «аман» һүҙе менән ҡушылған **Иҫәнбикә, Иҫәнбай, Иҫәнбәк, Иҫәнтай, Иҫәнғол, Иҫәнсура, Иҫәнгилде, Иҫәнғужа, Амантай, Амангилде, Иҫәнаман** һәм «тере» һүҙе менән **Тереғол, Теребак, Теребирҙе, Теребиш** исемдәре ошо йола менән ҡушылып, бөгөнгө көндә фамилияларҙа, ауыл исемдәрендә һаҡланып ҡалған. Борон **Ҡалды, Ҡалдыбай, Ҡалдығол** исемдәре булған. Был исемдәр бала бығаса үлеп торған осраҡта, быныһы «үлмәне, ҡалды» тигән мәғәнә менән һүҙҙең «тылсымлы» көсөнә ышанып ҡушылған. Был турала билдәле этнограф, фольклорист (сығышы башҡорт) А. Дибаевтың 1916 йылда ҡырғыҙ исемдәре тураһында яҙған мәҡәләһендә әйтелгән. Ул бала тормағанда «**Турсунбай** (пусть живет), **Ҡалдыбай** (пусть

останется), **Юзьяшар** (сто лет проживет)» тип ҡушылған исемдәрҙе килтерә. Төрки халыҡтарҙа күп таралған *туҡтар* һүҙе менән яһалған исем, бала үлеп торғанда, үлемде туҡтатыу маҡсатында ҡушылған. Профессор К. К. Юдахин был ҡылымдың бер мәғәнәһен: «этот глагол, как пожелание детям жить, в старом быту служил для образования имен: **Тоҡтобай, Тоҡтогул»** – тип аңлата. (Башҡорт телендә **Туҡтар, Туҡтағыш, Туҡтағол, Туҡташ, Туҡтамыш** исемдәре бар). Ошо уҡ йола менән, һүҙҙең сихри көсөнә ышанып, бала ныҡ булһын, тигән уй-теләк менән «ныҡ» исемдәр *таш, тимер, ҡорос, булат* һүҙҙәре менән ҡушылған: **Ташбулат, Байбулат, Таштимер, Байтимер, Булатбай, Ишбулат, Иштимер, Тимербай, Булат, Кинйәбулат, Тимер, Ҡорос, Ҡоросай, Тимерғол** һ.б.

Башҡорт исемдәре араһында *иш* һүҙе менән яһалған исемдәр бик күп. Быңдай исемдәр башҡорттарҙа, ғәҙәттә, бала тормаған хәлдә, был бала атаһына, әсәһенә иш-иптәш, дуҫ булып, йәшәп китһен, торһон, тигән мәғәнә менән ҡушылған. Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә **Ишбулды** һәм **Ишкилде** тигән исемдәрҙе ҡушыу йолаһы бирелгән. «**Ишбулды** яудан алынып килгән бала булған. Улы булмаған сәбәпле Ҡубашҡа бирелде» (БШ, 113). **Ишкилде** тураһында: «Икенсе мәртәбә яудан йәнә бер уғыл алыб килб, йәнә Ҡубашҡа бирелгән. **Ишбулды, Ишкилде** тиб ике ҡарындан килгән уғылды уғылсыз кешегә биргәндәр, йәғни Ҡубашка» (БШ, 113).

Иш һүҙе менән **Ишбай, Ишей, Ишәй, Ишекәй, Ишекә, Ишкәй, Иште, Иштүкә (бәлки Иштекәй), Ишсары, Ишҡол, Ишкенә, Ишкенәй, Ишбирҙе, Ишбулды, Ишкилде, Ишбулат, Ишсура, Ишҡужа, Ишбаҡты, Ишбәк, Ишйура, Ишеғол, Ишем, Ишембәт, Ишемәк, Ишмай, Ишмәмәт, Ишмәт, Ишмекәй** һ.б.

«Иш» һүҙе менән исемдәр ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ телдәрендә һәм Урта Азия халыҡтарына ҡарағанда Волга буйы халыҡтарында (сыуаш, мари, удмурт) күп таралыуы башҡорт халҡы тарихының ниндәйҙер бер этабында сыуаш, мари, удмурттар менән тығыҙ бәйләнештә булыуы тураһында һөйләй.

Боронғо халыҡтарҙа баланы һаҡлауҙың бер ысулы *яман, насар* исем ҡушыуҙа булған. Был да һүҙҙең көсөнә ышаныуҙан килә. Имештер насар исем ҡушҡас, был балаға бер ниндәй яуыз зат ҡарамай, үлем дә килмәй. (Мәҫ.: **Ямаҡ, Яман, Яманбай, Яманбикә, Яманҡыҙ, Ямаҡай, Яманғол, Ямансары, Ямансар, Ямансура, Яматай, Ямағужа, Буҡай, Буҡаҡ, Буҡаш, Буҡас, Буҡбаш, Буҡсура, Буҡсубай** һ.б.) Яман исем ҡушыу йолаһы күп төрки халыҡтарҙа билдәле.

### 4. Яҡшы, изге теләк теләп ҡушылған исемдәр

Юғарыла «һаҡлағыс» исемдәр тураһында әйтелде. Был йолаға бәйле рәүештә бала булмай торғанда, баланы бик көтөп, теләп, һорап, көһәп алғанда, балаға «теләү», «көһәү», «һорау» һүҙҙәре менән яһалған исемдәр ҡушылған. **Көҫәп, Көҫәпҡол, Көҫәмеш, Көҫәбирҙе, Көҫәпәй, Көҫәй, Көҫәш, Көҫәнек, Көҫәткер, Һорап-ҡол** тигән исемдәр башҡорт исемдәренең иң боронғо ҡатламына ҡарай. Боронғо төрки һүҙлектә «көсәү» – теләү тип, «көсәш» һүҙенә «теләк», «теләгән нәмә», «ҡәҙерле нәмә» тип аңлатма бирелә. *Көсәмеш* һүҙе боронғо төрки яҙмаларҙа кеше исеме булып ингән. Был исемдәр бөгөнгө башҡорт телендә фамилияларҙа һәм ауыл исемдәрендә ҡалған. **Теләкбирҙе, Теләш, Һөйөндөк, Ҡыуандыҡ, Танһыҡҡужа, Сөйәрғол** һымаҡ исемдәрҙең мәғәнәһе асыҡтан-асыҡ баланы көтөп, теләп алыу тура-

һында һөйләй. Баланы өй ҡото, өй йәме, өйгә йән инде тип, «ҡот, ҡотло, йән» һүҙәре менән **Ҡотлоғужа, Йәнгилде** һымаҡ, «ураз», «ырыҫ» һүҙе менән дә бала өйгә бәхет (ураз), ырыҫ (байлыҡ) килтерһен, тип теләү мәғәнәһе менән исемдәр күп ҡушылған, һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышанып исем ҡушыу төрки халыҡтарына һ.б. халыҡтарға хас күренеш. **Яҡшыбай, Игебай** һымаҡ исемдәр ҙә изге теләк менән һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышанып ҡушылған.

### 5. Ваҡыт (көн, ай, йыл миҙгелдәре) төшөнсәһенә бәйле исемдәр

Кешенең аңында ваҡыт категорияларынан иң элек көн-төнгә, иртә-кискә бәйле, йыл миҙгелдәренән йәй-ҡышҡа бәйле исемдәр яһалып, һуңынан, йыл, ай, аҙна, көн атамаларына бәйле исемдәр барлыҡҡа килгән булырға тейеш.

Көн-төн төшөнсәһенә бәйле күк есемдәренең атамалары һәм йыл миҙгеленә бәйле һүҙәр бер яҡтан тотем булараҡ кеше исеменә әйләнһә, икенсе яҡтан баланың тыуған ваҡытын белдереп, кеше исеменә әйләнгән. Исемдәрҙә «ай» һүҙе баланың төндә (айлы төндә) тыуыуын күрһәтә. *Ай* һүҙе менән **Айһылыу, Айбикә, Айҙар, Айтуған, Айсыуаҡ, Айман, Айбаҡты, Айгилде** тигән исемдәр яһалған. Баланың төндә тыуыуын билдәләп, «төн», «йондоҙ» һүҙҙәре менән **Төннөк, Төнғатар, Төнәш, Йондоҙ** тигән исемдәр ҡушылған. Таң ваҡытында тыуған балаларға **Таңбикә, Таңһылыу, Тыңсыбай, Таңлыбай, Таңҡаш, Таңғатар, Танлай, Таңбулат** тип һәм таң алдынан ҡалҡҡан йондоҙ атамаһынан **Таңсулпан, Сулпан** тип исем ҡушҡандар. Таң атып ҡояш (көн) сыҡҡан ваҡытҡа бәйләнешле **Көнбикә, Көнтоғмош, Көнһылыу, Ҡояшбай, Ҡояшбикә** һ.б. исемдәр барлыҡҡа килгән. Кис ваҡытында тыуыуын белдереп, балаға **Кискилде, Кисен** исеме ҡушылған. Йыл миҙгелдәренең атамаларынан **Ҡышты, (Ҡаръяу), Йәйләғол, Йәйләү, Йәй** тигән исемдәр булған.

Башҡа төрки халыҡтар менән бергә башҡорттар ҙа борон замандарҙа хайуан атамалары менән йөрөтөлгән ун ике йыллыҡ мөсәлде (календарҙы) ҡулланған. Шуның өсөн хайуан-йәнлек, януар атамалары, бер яҡтан, тотемға, икенсе яҡтан, көнкүреш, хужалыҡҡа бәйле кеше исеменә әүерелһә, өсөнсө яҡтан, йыл атамалары булып кеше исеменә әйләнгән. Ун ике йыл атамаһының (*сысҡан, һыйыр, барс, ҡуян, аждаһа, йылан, йылҡы, ҡуй, маймыл, тауыҡ, эт, дуңғыҙ*), алтыһы – (*һыйыр, ҡуян, йылан, ҡуй, маймыл, тауыҡ йылдары*) йот, ҡоро, уңдырышһыҙ, насар йыл һаналып, алтыһы – (*сысҡан, барс, аждаһа, йылҡы, эт, дуңғыҙ* йылдары) ҡот, яҡшы, уңышлы йыл иҫәпләнгән. Башҡорт исемдәре араһында ошо **ҡот** йылдары атамаларынан яһалған кеше исемдәре бар, ә **йот** йылдары атамалары кеше исемдәрендә осрамай (*ҡуй* һүҙе менән яһалған **Ҡуйбаҡ, Ҡуйһылыу** исемдәре *мал* атамаһы булып исемгә әүерелгән). **Ҡот** йылы атамаларынан *сысҡан, барс, йылҡы, эт* һүҙҙәре кеше исеме составында йыш ҡулланылған. «Барс йылы барын сәс, һис булмаһа тары сәс», тигән мәҡәл *барс* йылының уңдырышлы, ҡотло йыл икәнен раҫлап сығарылған. Башҡорт телендә **Йәнбарыс, Ҡолбарис** тигән исемдәр (**Янбарисов, Ҡолбарисов** фамилияларында) һаҡланған. *Сысҡан* һүҙенән **Сысҡан, Тысҡан, Тышҡан, Чычкан, Тысҡанбай** формаһында, *йылҡы* һүҙенән: **Йылҡыбай, Йылҡысура** тигән, *эт* һүҙенән **Этбай, Эткол, Этбикә** кеүек кеше исемдәре билдәле. *Аждаһа* һәм *дуңғыҙ* йылдары уңдырышлы, **ҡот** йылы һаналһа ла кеше исемдәре составында бөтөнләй осрамай.

Малсылыҡ менән шөғөлләнгән боронғо күсмә халыҡтар йыл иҫәбен ҡояштың йондоҙлоҡтарға яҡынайыуына ҡарап билдәләгәндәр (йыл әйләнәһенә ҡояш төрлө йондоҙлоҡтарға күсеп йөрөй, һәр береһендә 30–31-әр көн була). Бындай иҫәпте зодиакаль-йондоҙлоҡ буйынса иҫәп тип, фәндә «ҡояш исемдәре» тип атайҙар. Төрки халыҡтары ошо йондоҙлоҡ атамалары буйынса бирелгән ай исемдәрен ҡулланған. Ҡояш календары ғәрәп теленә нигеҙләнгән: **хәмәл** (март), **сәүер** (апрель), **зәүжә** (май), **саратан** (июнь), **әсәт** (июль), **сөмбәлә** (август), **мизан** (сентябрь), **ғаҡрап** (октябрь), **ҡос** (ноябрь), **йәдди** (декабрь), **дәлү** (ғинуар), **хут** (февраль). Бөгөнгө башҡорт телендә был атамалар ҡулланылмаһа ла, халыҡ телендә «ғаҡрап башында ҡар яуһа, ҡырҡ көн ҡара ятыр», «хәмәлеңә күрә әмәлем, ана ултыра кәбәнем», «сәүер башында үрт яна», «зәүжә башында кәкүк ҡысҡыра» тигән һынамыштан сыҡҡан һүҙҙәр һаҡланған. Башҡорт шәжәрәләрендәге исемдәр араһында **Мизан, Әсетбай, Саратбий**, (бәлки, **Саратандыр**) исемдәре бар.

Борон Көнсығыш халыҡтары, шулай уҡ башҡорттар (айҙың тыуыу, батыу ваҡыты менән иҫәпләнгән) һижрә йыл иҫәбендә ҡулланған, һуңға табан ислам дине, ғәрәп теле тәьҫире көсәйеүе сәбәпле Ай календарын ҡулланыу башланған һижрә йылы буйынса: **мөхәррәм** (март), **сәфәр** (апрель), **рәбиғил-әүүәл** (май), **рәбиғилсәни** (июнь), **йомадил-әүүәл** (июль), **йомадилахыр** (август), **рәжәп** (сентябрь), **шаһбан** (октябрь), **рамазан** (ноябрь), **шәүүәл** (декабрь), **зөлкәғиҙә** (ғинуар), **зөлхизә** (февраль). Ошо ай атамаларынан **Мөхәррәм, Сәфәр, Әүәл, Йомадил, Рәжәп, Шаһбан, Рамазан, Шәүәли, Зөлкәғиҙә, Зөлхизә** тигәндәре, баланың, шул айҙа тыуыуына ҡарап, кеше исеме итеп ҡушылған. (Бынан башҡа «сәфәр» һүҙе юл мәғәнәһендә лә исемгә әйләнгән.)

Бөгөнгө көндә бөтә төрки халыҡтары ҡулланған аҙналағы ете көн исемдәренең алтыһы *фарсы*, береһе *ғәрәп* теленән алынған.

1. **Йәкшәмбе** (йәк – бер, шәмбе – көн) – беренсе көн
2. **Дүшәмбе** (дү – ике) – икенсе көн
3. **Шишәмбе** (се – өс) – өсөнсө көн
4. **Шаршамбы** (чәһар – дүрт) – дүртенсе көн
5. **Кесе аҙна** (аҙна – бишенсе көн), тимәк – кесе бишенсе көн.

*Фарсы* телендә аҙна – адинә – бишенсе көн. *Фарсыса* пәндж биш тигәнде аңлата (фарс. – РС, 97).

6. **Йома** ғәрәпсә: йыйылып, күмәк уҡый торған намаҙ һәм аҙна «неделя» мәғәнәһен бирә.
7. **Шәмбе** (көн).

Хәҙерге башҡорт телендә аҙна – бишенсе көн мәғәнәһендә *кесе аҙна* тигән һүҙҙә һаҡланып, *аҙна* һүҙе «неделя» тигән мәғәнә алып киткән. Ырғыҙ буйы башҡорттарында *аҙна* һүҙе фарсы телендәгесә, бишенсе көн, ә йома «неделя» мәғәнәһендә ҡулланыла (мәҫәлән, йомалап ятыу – аҙналап ятыу, бер йома булды – бер аҙна булды). **Йома** һүҙенең *аҙна* мәғәнәһе Әй шәжәрәһендә әйтелгән. Билдәле башҡорт яҙыусыһы Тажетдин Ялсығол тарафынан яҙылған шәжәрәлә ошондай юлдар бар: «Бән, фаҡыйр Тажетдин, атам Ялчығолны ун дүрт йыл көтдем... Ан дан (Истанбулдан) Хажтарханә кәлдек. Андә өч жомға тордыҡ» (БШ, 170).

Боронғо башҡорт исемдәре яһалыуҙа көн исемдәренән иң күп «аҙна» һәм «йома» һүҙҙәре ҡулланылған. Беренсенән, аҙна һүҙе башҡортса бишенсе көн атамаһы булып исем яһалыуҙа ҡатнашһа, икенсенән, ул әсә балаға аҙналап ауырығанда ла исем итеп ҡушылған. Салауат Юлаевтың атаһының исеме **Аҙналы** булған. «Аҙналы баш булһа ла... Юлай егет булған һуң...

(*кара*: «Батырҙар тураһында ҡобайырҙар»). «Аҙна» һүҙе менән **Аҙна, Аҙнаҡай, Аҙналы, Аҙналай, Аҙнабай, Аҙнағол, Аҙнагилде, Аҙнағужа, Аҙнабикә,** «йома» һүҙе менән **Йомабай, Йомака, Йомағол, Йомағужа, Йомаҡай, Йомаш, Йоманай, Ҙурйома, Йомабикә** һымаҡ исемдәр һаҡланған. Башҡа көн атамаларынан «дүшәмбе» һүҙенән – **Дүсәнбәт, Дүсәмбай, Дүшәмбикә** тигән исемдәр, «шишәмбе» һүҙенән **Сисәмбай, Сисәмбикә** һәм «йәкшәмбе» һүҙенән Йәкшәмбәт тигән исемдәр осрай.

«Аҙна» һәм «йома» һүҙҙәре менән бүтән төрки халыҡтарҙа ла исемдәр күп.

### 6. Тәбиғәт күренештәренә бәйле исемдәр

Башҡорт телендә тәбиғәт күренештәрен *буран, ямғыр, ел, ҡар, болот, томан, боҙ, борсаҡ, сыуаҡ, аяҙ* һүҙҙәре белдерә. 1245 йылғы төрки-ғәрәп һүҙлегендә лә **көн** торошон белдергән һүҙҙәр рәтендә *көк, булыт, туман, йамғур, йел, кар, бурчак, буҙ, толу* (град), *сырча* (йәшен), *сағым* атамалары алынған. Тимәк, төрки телдәрендә был һүҙҙәр уртаҡ. **Көн** торошон белдергән һүҙҙәр менән төрлө халыҡтарҙа кеше исемдәре яһалған. Төрөкмән ғалимы З. М. Мухамедова әйтеүенсә, **тәбиғәт** күренештәренә бәйле кеше исемдәре иң боронғо исемдәр һанала. Башҡорт телендә тәбиғәт күренештәренә бәйле **Буран, Буransы, Буранғол, Буранбай, Буранша, Бураш, Буранбикә, Ямғырсы, Яуын, Яуымбай, Яуа, Ҡаръяу, Йәйсән, Борсаҡ, Сыуаҡ, Аҡсыуаҡ, Айсыуаҡ, Көнсыуаҡ, Ибаҡсыуаҡ, Ишимсыуаҡ** һәм **Аяҙ** исемдәре билдәле. (Елле көндә тыуһа, *ел* һүҙе менән **Елкәй, Елбулды, Елкәс,** *томанлы* көндә тыуһа, **Томан, Томансы, Томансый, Томанхан, Томанбай**; *болот* көндә тыуһа, **Болот, Болотбай, Болотби** тип исем ҡушыу йолаһы булған.) **Тәбиғәт, көн** торошона бәйләп исем ҡушыу йолалары башҡа төрки халыҡтарҙа ла билдәле. Хива ханы Абулгазиндың төрөкмән шәжәрәһендә ошондай исем ҡушыу йолаһы килтерелә: «...Куркуд ата муниң аты туманхан булсун тиде. Халыҡ әйтдиләр: мундин яхшыраҡ ат куйгил тидиләр. Куркут ата әйтде: мундин яхшы ат булмаҫ тиде. Ул көнкә... дуйлы – ҡайы хан үлде ирсә безнең йуртымизны туман тутуб ҡыраңғу булды. Бу уғыл туманда туғды анниң учун туман ат куйдук ат үә икенче туман узак турмас тиҙ китә турған нимәрсә булур, туманлы күн афтаб (ҡояш) булур туманниң сунки (һуңы) яруҡ (яҡты) булмай булмаҫ. Аҙ гына турган туманны бу уғланниң йәшлекина ухшатибмен сунки афтабне бу уғланниң икит (егет) булуб атасы тәхтиндә ултуруб дәүләтле үә узак ғүмерле булғанина ухшатибмен тиде».

Дөйөм төрки халыҡтарына хас булған был исем ҡушыу йолаһы борон халыҡтарҙың исемгә булған ҙур иғтибарын, етди ҡарашын, ҙур өмөт, хыялдар бағлауын һәм ошо йолаларҙың артабан үҫешен асыҡ күрһәтеп тора.

### 7. Тормошта, көнкүрештә төрлө ваҡиғаға бәйле исемдәр

Башҡорт халҡының боронғо күсмә тормошо, ырыу-ырыу булып йәшәгәндә ситтән булған төрлө һөжүмдәр, яуҙар – барыһы ла боронғо исемдәрҙә сағылыш алған. Төрки һәм башҡа халыҡтарҙа борондан бала тыуған мәлендәге төрлө хәл-ваҡиғаға ҡарап исем ҡушыу йолаһы булған. *Байрам* ваҡытында тыуған балаларға **Байрам, Байрамбикә, Байрамғәле,**

**Байрас,** тигән, *калымға* барғанда (йәки килгәндә) тыуған балаға **Ҡалымбай, Ҡалымбикә,** *уракта* тыуған балаға **Ураҡ, Ураҡай, Ураҡсы,** *бесәндә* – **Бесәнсе** һ. б. исем ҡушыу йолалары билдәле. Башҡорт телендә һаҡланған **Күсем, Күсәкби, Күскен, Күсебай, Күсебикә, Күсебирҙе, Күсекәй, Күсенбай, Күсеп, Күсәр, Күсмәк, Күсәкбек, Күсәлек, Күсәш, Күсәрбай, Күсербай, Күстән, Күссеғол, Күсенбай** кеүек исемдәр «күс» (күсеп йөрөгән ер; йәйләү, ҡышлау) һәм «күсеү» һүҙҙәренән яһалып, баланың шул ваҡытта тыуғанын күрһәтеп тора. Боронғо башҡорт ырыу-ара көрәштәрен сағылдырған ***Күсәкби*** эпосы геро-йының исеме лә ошо «күс» һүҙенән барлыҡҡа килгән. «Күсеп китеп барғанда тыуған балаға **Күсбикә** йәки **Күсәрбай** тип исем ҡушҡандар» тип, был йолаларҙы иҫләгән кешеләрҙе бөгөн дә осратып була. Әбйәлил районында кеше исемдәренән яһалған **Күсем** һәм **Күсәр** ауылдары бар. **Күсәр** исемен Рашид ад-дин күрһәтеп китә. Бала юлда тыуһа, йә иһә бала тыуғанда атаһы өйҙә булмай, юлда булһа, *юл* һүҙе менән исем ҡушылған: **Юлдаш, Юлай, Юлабай, Юламан, Юлымбәт, Юлбуға, Юлҡотло, Юлҡотто, Юлкай, Юлбулды, Юлбаҡты, Юлбәт, Юлмәмәт, Юлмөхәмәт, Юлдыбай, Юлдыбикә, Юлдышик, Юлдашбай, Юлдашбикә, Юлдыҡай, Юллыҡай, Юлыҡ, Юлыш, Юлтимер, Юлтай, Юлсы, Юлсыбай, Юлсыҡай, Юлсығол, Юллыбай, Именъюл.** «Юл» һүҙенән ғәрәп теленән ингән синонимы «сәфәр» һүҙе лә (ай атамаһы булып исемгә әйләнеүҙән башҡа) бала тыуғанда атаһы өйҙә булмай юлда, сәфәрҙә булыуын билдәләп ҡушылған (мәҫ.: **Сәфәрбай, Сәфәрбикә** һ. б.). Башҡорт тарихында билдәле урын алған яу, болалар ҙа кеше исемдәрендә сағылыш алған. Яу ваҡытында тыуған балаға **Яубатыр, Яулыбай, Яулыбикә, Яухужа, Яуҡай, Яуғыс би, Яубасар, Яуҙаш, Яулейә** тип, *яу килгәндә* тыуһа – **Яугилде,** *яу ҡасҡанда* тыуһа – **Яуғасты** тип исем ҡушҡандар. Был исемдәр ошо ваҡиғаны билдәләп үтеү өсөн генә түгел, ә ошо һүҙҙәрҙең ниндәйҙер бер тылсымлы көсөнә ышанып та ҡушылған булыуы мөмкин. «Боҫоу» (**Босҡон, Боҫтанай, Босҡон батыр**), «ҡасыу» һүҙҙәренән (**Ҡасҡын, Ҡасҡынбай, Ҡаса**) исемдәр билдәле. **Болаш, Болғаҡ** исемдәре лә ошо төргә ҡарай. «Ҡунаҡ» һүҙенән яһалған исемдәр: **Ҡунаҡбай, Ҡунаҡбикә, Ҡунаҡ, Ҡунаҡас, Ҡунаҡай, Ҡунаҡкилде, Ҡунаҡҡужа** һ.б. Был исемдәр ҙә ике осраҡта: йә *ҡунаҡҡа барғанда,* йә *ҡунаҡ килгәндә* тыуған балаға, *ҡунаҡ* хөрмәтенә ҡушылған булған. Ошо уҡ йола менән *туй* ваҡытында, *туйға барғанда, туй килгәндә* тыуған балаларға «туй» һүҙе менән исем ҡушҡандар.(Мәҫәлән: **Туйбаҡты, Туйбирҙе, Туйгилде, Туйсы, Туйкуныр, Туйсура, Туйсынбай, Туйбикә, Туйһылыу, Туйлыҡ, Туйнәш, Туйым, Туйымбәт, Туйыш.**)

### 8. Баланың ҡиәфәте, төҫ-башы һ. б. үҙенсәлектәренә ҡарап ҡушылған исемдәр

Баланың тыуғанда булған берәй төрлө үҙенсәлегенә ҡарап исем ҡушыу – боронғо йолаларҙың береһе. Бала *йөҙлөк, бөркәнсек, ҡау* менән тыуһа, бик бәхетле була, тип иҫәпләү ер йөҙөндәге күп халыҡтарға хас күренеш. Боронғо сыуаш исемдәрен тикшереүсе В. Магницкий, сыуаштарҙа, йөҙлөк менән тыуған бала тураһында былай ти: «По мнению чуваш, родившаяся в сорочке девочка азамысь полать-знахаркой (колдуньей) будет, а родившийся в сорочке мальчик – ялбозе полать-главой народа

будет, или руководителем во всем». Башҡорттарҙың боронғо йолаһы буйынса, бала *йөҙлөк* (Дим, Ырғыҙ буйында – *йөҙлөк*, Әбйәлил, Бөрйәндә – *бөркәнсек*, Салауат районында *йөҙлөк, ҡау, әжәмек*) менән тыуһа, йөҙлөгөн алып киптереп ҡуялар. *Йөҙлөклө* бала иң бәхетле бала һанала, ә *йөҙлөгө* бәлә-ҡазанан һаҡлай торған **ҡот** (тылсым, амулет) итеп йөрөтөлә. *Йөҙлөклө* булып тыуған балаға **Йөҙлөкәй, Йөҙҙөкәй, Йөҙөкәй, Йөҙлөбикә, Йөҙлөбәк, Йөҙәй, Йөҙлө, Йөҙөбәк** тигән исем ҡушҡандар. Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Тирәкле ауылында *йөҙлөктө пәрҙә* тиҙәр. Ошондай йола менән төрөкмәндәрҙә «тувак» (йөҙлөк) тигән һүҙ менән **Тувак, Өғултпувак, Аннатувак** тигән исем ҡушылған (Мухамедова).

Рашид ад-дин яҙмаларында алынған **Ҡаусузмыш** исеме ошо йолаға ҡарай тигән уй тыуҙыра (Салауат районында **ҡау** һүҙенең йөҙлөк икәнен иҫәпкә алғанда). Өҫтәүенә, *йөҙлөктө* һуҙып киптереп ҡуйыу ҙа билдәле күренеш.

Көнсығыш халыҡтарында миңгә айырым бер мәғәнә биреп, уны, матурлыҡ, бәхет, ырыҫ билгеһе тип ҡарау борон-борондан йәшәп килә. С. М. Абрамзон «ҡырғыҙҙарҙа миңле кешене бәхетле кеше» тип һанайҙар ти. «Саҡалдын күркә чалда бар, сулуунун көркү калди бар» (ҡарттың матурлығы һаҡалда, сибәрҙең матурлығы миңдә) тигән ҡырғыҙ мәҡәле лә шул турала һөйләй. Осман (төрөк) йолаларын тикшереүсе Гордлевский В. А.: «Если у ребенка над пупом объявится родимое пятнышко, значит, он будет великий человек», – тип миңдең тылсымлы бер билдә итеп ҡаралыуын әйтә. Башҡорттарҙа ла миң тураһында билдәле ҡараштар йәшәй. «Тәндең күренмәгән өлөшөндә булған миңде кешегә күрһәтергә ярамай, күрһәтһәң, бәхет, ырыҫ кәмей, насар була» тигән хөрәфәт бар. Миңдең төрлө урында булыуына ҡарап, төрлө әйтем йәшәй. «Ирене миңленең ауыҙы һалыулы була» (аш-һыуға бай, мул йәшәй), «ҡулында миңе булһа – эшсән була», «эсендә миңе булһа, балаһы күп була» һ.б. Миңде ошондай бер тылсымлы нәмә итеп ҡарау нигеҙендә миңле булып тыуған балаға «миң» һүҙе менән исем ҡушыу йолаһы төрки, иран халыҡтарында күп таралған. Башҡорт телендә «миң» һүҙе менән исемдәр күп: **Миңде, Миңлекәй, Миңлебай, Миңлебикә, Миңлеғол, Миңлениса, Миңнеғол, Миңнеғужа, Миндеяр, Минеш, Миңкә, Миңлесаби, Миңлеҡол, Миңлеғүмәр, Миңлеәхмәт** һ.б. Башҡорттарҙа *миңле* булып тыуған балаға «миң» һүҙе менән исем ҡушмаһаң, миңе боҙолоп, бөтә тәнде ҡаплауы мөмкин, тигән ырым йәшәй. Бала тыуғанда миңен күрмәйенсә «миңһеҙ» исем ҡушылған булһа, һуңынан «миң» һүҙе менән яңынан исем ҡушҡандар. М.Буранғолов яҙмаларында миңле балаға исем ҡушыу йолаһы бар: «...Миңле ине әйәге, Батыр ине йөрәге, икәү ара һөйләшеп, миңе боҙолмаһын тип, Миңнеғол тип атаны». Быларҙан башҡа баланың тән, аяҡ-ҡулы, кәүҙәһе, ҡиәфәте, сәс-башы тураһындағы төрлө үҙенсәлектәрҙе билдәләп ҡушылған исемдәр билдәле: **Һулаҡай, Сулаҡ, Султый, Султыҡ, Султыҡай, Аҡсаҡ, Салтыҡ, Салтыҡ бек, Салтыш,** тән төҙөлөшөнә ҡағылышлы **Баҙыҡ, Йыуан, Йыуанай, Йыуанбикә, Сибек, Сибекәй, Нәҙек,** сәсенең төрлөсә булыуын күрһәткән **Өлтөк, Өлтәкәй, Айҙар** (маңлайҙа ҡалдырылған сәс). Тән төҙөлөшөндәге берәй ғәҙәти булмаған нәмә лә исем ҡушыуҙа сәбәп булған. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә Айыуғолаҡ батырҙың исемен ҡушыу тураһында әйтелә: «Через некоторое время та девушка родила сына: уши у него были покрыты шерстью, как у медведя. Этому ребенку дали имя Айыуғолак» (БХӘ). Ҡуҙыйкүрпәс эпосында Ҡарабай батырҙың улы тыуғас уға Ҡуҙыйкүрпәс (күрпәс – *бөҙрә*) тип сәсенең бөҙрәлеген билдәләп ҡушылғаны әйтелә (Беляев). **Буғаз, Тамаҡ,**

**Урай, Ҡолаҡкол, Ҡолапаҡ, Ҡолас, Ҡосаҡ, Ҡосан, Сөйөүбеләк, Ҡулбирҙе, Билбирҙе, Сынсыҡ** исемдәре лә баланың үҙенсәлегенән сығып ҡушылған бик боронғо исем тип ҡарарға кәрәк.

## 9. Төрлө төҫ атамаларына бәйле исемдәр

Башҡорт исемдәре араһында баланың бит, сәс, ҡаш, күҙ төҫөнә ҡарап ҡушылған исемдәр бар. Бындай исемдәргә аҡ, ҡара, һары, ҡыҙыл, ала, саптар, йәшел, күк һүҙҙәре менән яһалған исемдәр инә. Башҡорт телендә «аҡ» һүҙе бер нисә мәғәнәлә йөрөй: 1) «аҡ» һүҙе төҫтө белдерә; 2) таҙа, саф; 3) уңыш, бәхет мәғәнәһен аңлата. «Аҡ» һүҙе менән исемдәр, тимәк, төҫөнә ҡарап та, бәхет теләп тә ҡушылыуы мөмкин: **Аҡбай, Аҡбала, Аҡбаш, Аҡбатыр, Аҡбулат, Аҡбура, Аҡир, Аҡъегет, Аҡйән, Аҡкөсөк, Аҡкул, Аҡкол, Аҡколай, Аҡкуза, Аҡкужа, Аҡкускар, Аҡъюк, Аҡман, Аҡсар, Аҡсары, Аҡсура, Аҡсуаш, Аҡсыуаҡ, Аҡтимер, Аҡсирмеш, Аҡтүш, Аҡтуған, Аҡтай, Аҡсаҡай, Аҡбирҙе, Аҡса** (*са* – ялғау), **Аҡкунды, Аҡбүре, Аҡкүбәк, Аҡтанай, Аҡтере, Аҡъяр, Аҡъюл, Агиш, Аҡкун, Аҡкилде һәм Аҡбикә, Аҡһылыу, Аҡсолтан, Аҡсулпан, Аппаҡ** һәм ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән **Аҡъйән, Аҡдәүләт, Аҡназар, Аҡмөммәт, Аҡмөхәмәт.** «Аҡ» һүҙе башҡа төрки телдәрҙә лә күп мәғәнәлә ҡулланыла (ДТС, 48; Будагов). В В. Радлов төрки телдәрендә «аҡ» һүҙе менән яһалған үсемлек, ҡош-ҡорт, йәнлек, балыҡ, таш-металл, ашамлыҡ һ.б. атамаларын күрһәтә. (**Аҡ-ай (Аҡай), Аҡбулат, Аҡташ, Аҡкылыҫ,** ҡатын-ҡыҙ исемдәренән **Аҡ-арығ, Аҡ ҡыйал арыг, Аҡ-иркәч** һ. б.) 1245 йылғы төрки-ғәрәп һүҙлегендә күрһәтелгән **Аҡтай** исеме ҡаҙаҡтарҙа һәм башҡорттарҙа бар. (Катанов **Аҡай** «Светлая луна», **Аҡ, Аҡкан, Аҡтас, Ҡан Аҡколыш** тигән ир-ат, **Аҡҡыйал Арығ, Аҡҡыз** һ.б. ҡатын-ҡыҙ исемдәрен бирә.) Рашид ад-дин яҙмаларында **Аҡбуҡа, Аҡбал, Аҡдаш, Аҡсултан, Аҡсоңҡар** һ.б. исемдәр бар.

Төрки телдәрендә бик күп мәғәнәлә йөрөгән «ҡара» һүҙе башҡорт телендә лә бер нисә мәғәнәлә ҡулланыла. В. В. Радлов «ҡара» һүҙенең унлап мәғәнәһен биреп, уның төрлө хайуан (ҡара ҡойроҡ, ҡара ҡолаҡ), үсемлек (ҡара бойҙай, ҡара емеш), төрлө ауырыу һ. б. нәмә атамаларында осрауын әйтә, төрлө һүҙбәйләнештәрҙә (ҡара төн, ҡара юл, ҡара йәһәннәм, ҡара йөҙ, йөҙөң ҡара булһын, ҡара көн, ҡара ҡыш, ҡара эсле, ҡара халыҡ, ҡара һарыҡ, кеше-ҡара килһә һ.б.) ҡулланылғанын күрһәтә. Башҡорт телендә лә «ҡара» һүҙенең мәғәнәләре күп. Төҫтө белдереүҙән башҡа көслө, нык, ҡеүәтле, ғәйрәтле һәм «насар», «яман» тигән мәғәнәләре билдәле. Радлов һанап, күрһәтеп биргән мәғәнәләр барыһы ла тип әйтерлек башҡорт телендә бар. Кеше исемдәрендә лә «ҡара» һүҙе төрлө мәғәнәләрҙә: көслө, ҡеүәтле, ғәйрәтле, нык, шәп тигән мәғәнәлә, ә ер-һыу атамаларында яман, ҡур-ҡыныс, ғәйрәтле, ҡеүәтле тигән мәғәнәләрҙә ҡулланылған (мәҫ., **Ҡарайылға** – нык, көслө ағышлы йылға, **Ҡаратау** – бейек, ҡурҡыныс һ. б.). (Мәҫ., **Ҡарабоға би, Ҡарахан, Ҡарабаш, Ҡараман, Ҡараҡаш, Ҡаратабын би, Ҡараҡужаҡ би, Ҡараса би, Ҡараса мулла, Ҡарасай, Ҡарасман, Ҡарасуҡ, Ҡарас, Ҡарагүҙ, Ҡараҡай, Ишҡар, Ишҡара, Ҡара Һулаҡу Бадшаһ, Ҡара абыз, Ҡарабай, Ҡараламан, Ҡаракөсөк, Ҡарасура, Сынҡара, Ҡарамыш, Тимер ҡарабоға, Ҡарагүбәк, Ҡарағужа, Ҡарағош, Ҡарағази, Ҡараҡай сәсән, Ҡарашай, Ҡарабикә, Ҡарасәс** һ. б.) Был исемдәрҙең күбеһен (**Ҡараман, Ҡарабаш, Ҡарагүҙ, Ҡараса, Ҡарасәс, Ҡармыш, Ҡарамыш**) башҡа төрки

телдәрҙә осратып була. Башҡорт шәжәрәләрендә Мең ырыуындағы **Ҡара һулаҡу** исеме (ҡара хулагу тип) Рашид ад-дин яҙмаларында бирелгән. «Ҡара» һүҙе менән кеше исемдәре төрки телдәрендә бик күп.

Төрки телдәрҙә «сары» (*һары*) һүҙе менән кеше исемдәре байтаҡ. Тарихсы Н. А. Аристов ҡара һәм һары эпитеттары менән йөрөтөлгән ырыу исемдәрен тикшергәндә «ҡара» һүҙенең төҫ мәғәнәһенән башҡа Урта Азия төрөктәрендә халыҡ, ырыу, ҡәбиләләргә ҡарата «буйһонған» тигән мәғәнәлә ҡулланылғанын әйтә. Һары төҫ тураһында «...это на Востоке цвет царский, аристократический», – ти. Л. З. Будагов «һары» һүҙен «желтый», «бледный», «рыжий» тип, ә К. К. Юдадин «желтый», «рыжий», «русый» ти һәм башҡа мәғәнәләрен күрһәтә, «һары» һүҙе менән башҡорт телендә ошондай исемдәр бар: **Сары, Сарыбаш, Сарығол, Сарымбәт, Сарыйән, Сарый, Сарыбайсал, Сарымәргән, Аҡсары, Жансары, Ишсары, Ҡолсары, Йәнсары, Сарбай бий, Сарбаш, Сарман, Сарйән, Сарбан, Сарманай, Сарынбәт** һ. б. Был исемдәрҙең Сарбай тигәне башҡорттарҙа, ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙҙарҙа таралған.

Төрки һүҙлектәрҙә «ҡыҙыл» һүҙенең мәғәнәһе күп бирелгән. Хәҙерге төрки телдәрҙә «ҡыҙыл» һүҙе ике мәғәнәлә таралған: 1) «ҡыҙыл» һүҙе төҫтө белдерә; 2) ҡайһы бер төрки (азербайжан, төрөкмән һ.б.) телдәрҙә «алтын» тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Ҡайһы бер башҡорт телселәре борон «ҡыҙыл» һүҙе матур тигәнде лә аңлатыуы мөмкин тип ҡарай (А. А. Камалов). Ҡырғыҙ телендәге «Ҡыҙ икәнде – ҡыҙылҡыҙ, жаман ҡатын ҡайдан чыкты?» тигән мәҡәлдә «ҡыҙыл» һүҙенең һәйбәт тигән мәғәнәлә ҡулланылғанын ҡеүәтләй. Башҡорт телендә: **Ҡыҙылбай, Ҡыҙырас, Ҡыҙылбоскон, Ҡыҙылғорт, Ҡыҙылабыз, Ҡыҙылғедрәт, Ҡыҙылғол** һ.б. бар.

Күк һүҙе менән **Күкән, Кускәй, Күкшел, Кукуш, Күгәш, Күкбүре, Күкбаш, Куккужа, Күккүҙ, Ҡуҙғаш** исемдәре билдәле. Был исемдәрҙә күк һүҙе *сал, буҙ* һ.б. төрлө мәғәнәләрҙә ҡулланылыуы ихтимал.

Төҫтө белдергән һүҙҙәрҙән «ала» һүҙе менән исемдәр бар: **Ала, Алай, Алабик, Алагуза, Алатин, Алабай, Алаҡай, Алағужа, Алагилде, Алабаш.** Башҡорт телендә *ала* һүҙе төҫтө белдереп ҡулланыла. Башҡорт теленең ҡайһы бер (Соран буйы, Ҡыҙыл, Инйәр һәм Эйек буйы) һөйләштәрендә «ала» һүҙе бер ҡатлы, әрһеҙ; ябыҡ тигән мәғәнәлә билдәле (33). Боронғо төрки, ҡырғыҙ һәм В. В. Радловтың һүҙлектәрендә «ала» һүҙенең яман, насар, яуыз мәғәнәһе бирелгән. Боронғо башҡорт телендә «ала» һүҙенең «яман» тигән мәғәнәһе билдәле. Алатауҙың исеме «яман» тигәндән (*яман-тау* тигән мәғәнәлә) яһалған булырға тейеш. «Ат алаһы тыштан, әҙәм алаһы эстән» тигән мәҡәл дә ошоно раҫлай.

Боронғо башҡорт исемдәренән **Саптар, Саптарбай, Ерән, Йәшелбай, Ҡобаш, Ҡолансәс, Ҡоланбай** исемдәре төҫкә ҡайтып ҡала. Һуңынан төҫтө белдергән һүҙҙәрҙең мәғәнәләре ҡатмарлаша, үҫә барған һайын (*аҡ* – изге, яҡшы; *ҡара* – көслө, насар; *ала* – ғәйрәтле, яуыз һымаҡ) исем яһауҙа ла уларҙың төрлө мәғәнәләре алыныуы мөмкин.

### 10. Туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек һәм мөнәсәбәтте белдергән һүҙҙәргә бәйле исемдәр

Башҡорт исемдәре араһында үҙ-ара мөнәсәбәт, бәйләнеш һәм туғанлыҡ-ҡәрҙәшлекте белдергән һүҙҙәр менән яһалған кеше исемдәре күп. Туғанлыҡ терминдары бик борон матриархат осоронда барлыҡҡа килгән һәм улар

боронғо лексикаға ҡарай. Күп халыҡтарға хас булған кешенең исемен әйтмәү, исемгә ҡарата булған табу (тыйыу) – был да исемдең тәү сығышында ниндәйҙер тылсымлы, әйтергә ярамаған һүҙ итеп ҡаралыуы тураһында һөйләй. Башҡорттарҙа бөгөнгө көндә лә (башҡорт ғәҙәттәре ныҡ һаҡланған ғаиләләрҙә) аралашыуҙа бер-береһенә исем менән өндәшеү ғәҙәте юҡ. Ир менән ҡатын бер-береһенә *әй* (йәки *һин*) тип өндәшә, ә бер-береһе тураһында һөйләгәндә тәүге баланың исеме менән «Әхтәм атаһы» (йәки «Әхтәм әсәһе») тип һөйләй. Ә инде иренең (йәки ҡатынының) туғандарына уның тураһында һөйләгәндә «ағайың» (йәки «апайың»), «ҡустың» (йәки «һеңлең») һ.б.; ире (йәки ҡатыны) тураһында ата-әсәһенә һөйләгәндә «кейәүегеҙ» (йәки «киленегеҙ») тип, ә ҡоҙа-ҡоҙағый, ҡоҙасалар һ.б. араһында туғанлыҡ термины менән өндәшеү ғәҙәте йәшәй.

Туғанлыҡ терминдарынан яһалған башҡорт исемдәренең иң күп өлөшө ҡан-ҡәрҙәшлек терминдарына ҡайтып ҡала. Күп исемдәр ата, баба, ир, аға, ейән, кинйә, туған һәм ҡан-ҡәрҙәш булмаған ҡоҙа, ҡунаҡ һүҙҙәренә ҡарай. Бөгөнгө башҡорт телендә «ата» һүҙе бер генә мәғәнәлә (отец) йөрөй. Боронғо төрки һүҙлегендә лә ошо мәғәнәлә алынған. Башҡорт телендә «ата-баба» һүҙе аталарҙың атаһы мәғәнәһендә «аталар һәм бабалар» тигән йыйнау һүҙҙәре тип ҡарала. Төрөкмән телендә *ата* – атаның атаһы, ә *баба* – әсәнең атаһын аңлата. Тимәк, башҡорт телендә лә борон замандарҙа «ата» һәм «баба» һүҙҙәре ошо мәғәнәләрҙә айырым ҡулланылып нәсел-нәсәп мәғәнәһендә ата-баба (атаарҙың атаһы һәм әсәләрҙең атаһы) булып формалашыуы мөмкин. Бының шулай булыуын «ата» һәм «баба» һүҙҙәренән яһалған кеше исемдәре лә күрһәтә. Ошо нигеҙҙә төрөкмәндәрҙә кеше исемдәре яһалған. «Ата» һүҙе менән башҡорт телендә **Атый, Атай, Атабай, Атайғол, Аташ, Атаҡ, Атасыҡ, Атағай би, Чулка ата, Чәчәлкә атаһ, Атас** исемдәре бар. (Башҡорт телендә ҡулланылған «атаңды танытырмын!», «атаң башына бараһыңмы?», «атаң башы!» тигән һүҙбәйләнештәр «ата» һүҙенең оло ата, нәсел-нәсәп, зат-ырыу тураһында һүҙ барғанын күрһәтә.) «Баба» һүҙе менән **Бабаҡай, Бабыҡай, Байбаб, Бабай би, Бабис, Бабаҡ, Бабиш** исемдәре яһалған. Мәшһүр башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың ата-бабаһының исеме «баба» һүҙенән булыуы ап-асыҡ. «Баба» һәм «ата» һүҙҙәренең ырыу башлығы булып, изге итеп ҡаралыу сәбәпле исемгә әйләнеүе лә мөмкин. Башҡорт телендәге «ата», «баба», «аға» һүҙҙәре менән яһалған кеше исемдәре ошо йолаларға ҡарауы ихтимал. Ҡырғыҙ телендә «ата» һүҙенең нимәнелер, кемделер «яҡлаусы», «курсалаусы» (Ҡырғыҙата – ҡырғыҙҙарҙы яҡлаусы) һәм «изге» мәғәнәһендә (Ысыҡата) ҡулланыла (Юдахин).

Ата-бабалар культы күп халыҡтарҙа билдәле. Башҡорттарҙа «Исеме ерҙә ятып ҡалмаһын!» тип, үлгән туғандарҙың исемен башҡа балаларға ҡушыу ошо ата-баба һәм үлгән туғандар культына ҡарай. (Ырғыҙ буйы башҡорттарында үлгән баланың исемен унан етә балаға ҡушырға ярамай, тик өсөнсө балаға ҡушырға ярай.)

Башҡорттарҙа борон ата культы көслө булған. Атаһы үлгәс тыуған балаға «бүләк» һүҙе менән исем ҡушыу йолаһы хәҙер ҙә бар. «Бүләк» һүҙе менән **Бүләкән, Бүләк, Бүләкбай, Бүләкбикә, Бүләкәй** тигән исемдәр яһалған. Артабан «бүләк» һүҙенә «мираҫ», «һәҙиә» (*ғәр.* ҡомартҡы, бүләк), «уариҫ» (*ғәр.* урынбаҫар, алыштырыусы) һәм «ядкар» (*фарс.* иҫтәлек) исемдәре өҫтәлгән. Юрматы башҡорттары шәжәрәһендә сәсле Дәрүиш бий ҡыҙының **Борнаҡ** һәм **Ядкәр** улдары тураһында әйтелеп, Ядкәр исеме

атаһы үлгәс ҡушылыуына ишара яһала, уларҙың аталары Нуғайҙың йәшләй үлеүе тураһында әйтелә (БШ, 28). И. А. Батманов VI быуат яҙмаларында осраған исемдәрҙәге (**Байапа, Йолапа, Ҡулуғапа, Чурапа, Торапа**) «апа» һүҙен «ата» мәғәнәһендә тип аңлата. (Башҡорт теленең көнсығыш диалектында «апа» һүҙе атаһынан, әсәһенән оло ир-туғанына өндәшеү һүҙе.)

Башҡорт исемдәре араһында **Тумас, Тумаҡай** исемдәренең ошо ата культына бәйле рәүештә ҡушылыуы ихтимал. Башҡорт теленең ҡайһы бер һөйләштәрендә *тума* һүҙе атаһыҙ тыуған балаға ҡарата әйтелә. Атабабанан ҡала туғанлыҡ терминдарынан «ағa» һүҙе билдәле. «Ағa» һүҙе менән: **Аҡа, Аҡай, Ағый, Ағабек, Ағабез, Аҡайхан** һ.б. исемдәр бар. Башҡорт теленең Көньяҡ һәм Көнсығыш диалекттарында, төньяҡ-көнсығыш һөйләштәрендә ҡулланылған «абзый» (*ағай*) һүҙенән **Абзай, Абызай, Абыз, Абызҡай, Абызгилде** һ.б. исемдәр яһалған.

Башҡорт телендә үҙенән бәләкәй ир туғанды *кусты, мырҙа, мырҙам, мыртый, эне* һүҙҙәре белдерә. Ошо һүҙҙәрҙең «ҡусты» һүҙенән: **Ишҡусты, Ҡустыбай, Ҡусты, Этҡусты** һ.б.; «мырҙа» һүҙенән: **Мырҙа, Мырҙаҡай, Мырҙағол, Мырҙабай, Мырҙай, Мырҙаш, Мырҙабәт, Мырҙабулат** һ.б. исемдәр яһалған. Исемдәр составында «бала» һүҙен аңлатҡан «бәпәй», «тәнәй», «бала» һүҙҙәре лә исемдәр составында бар: **Мөһөрбала, Ырыҫбала, Балағош, Балаҡай (Балагиев** ф.), **Тәнәкәй** һ.б. Рашид ад-дин һүҙлегендә **Бала-Калджа**, **Бала-койон**, **Бала-хан** исемдәре алынған. Бәләкәй баланы аңлатҡан «бәпәй» һүҙе исем булып йөрөгән. Башҡортостандың Әбйәлил р. Ҡаҙмаш ауылында билдәле булған **Папанин** фамилияһы ошо *бәпәй* һүҙенән яһалған. Башҡорт теле диалекттарында төрлө мәғәнәләрҙә ҡулланылған «тәнәй» һүҙе лә боронғо башҡорт исемдәрендә осрай: **Тәнәй, Тәнәкәй, Тәнәк, Биктәнәй.**

Башҡорт исемдәре араһында «ир» һүҙе менән яһалған кеше исемдәре күп: **Иртуған, Иргәбәк, Ирҡол, Ират, Ирбай, Ирман, Иргиз, Ирғужа, Иртүкәй, Иркәй, Ирмәш, Ирәмәт, Ирғәле** һ. б.

«Ир» һүҙе менән кеше исемдәре яһалыу төрки телдәргә хас күренеш булған. Боронғо төрки һүҙлектә **Ирбүре, Ирбуға, Ирсанчмыш, Иртоғыш, Иртоңа** исемдәре бар (ДТС, 175). Башҡорт телендә «ир» һүҙенең «батыр», «егет» тигән мәғәнәһе ныҡ таралған. Был мәғәнәһе төрки телдәрҙә боронборондан билдәле булған. С. Е. Малов VII–VIII быуат ҡомартҡыларында *ир* һүҙенең «муж», «герой» тигән мәғәнәләре булыуын әйтә, И. А. Батманов VI быуат төрки яҙмаларында *ир* һүҙен «муж, герой, храбрец, воин, витязь» тип аңлата. Боронғо төрки «егет» һүҙе менән башҡорт телендә **Аҡйегет, Баййегет, Йәнйегет, Егетәй, Күпйегет, Ирйегет** тигән исемдәр билдәле. *Егет* һүҙе лә «ир» һүҙе һымаҡ «батыр», «ҡыйыу», «шәп кеше» тигәнде аңлата. «Ул» һәм «ҡыҙ» һүҙҙәре менән яһалған **Улан би, Бағул, Ҡыҙбикә, Ҡыҙсыға, Ҡыҙдәүләт, Ҡыҙсолтан** исемдәре билдәле. Эйек-һаҡмар һөйләшендә «һылыу» һүҙе «кесе ҡыҙ туған» һәм уға өндәшеү һүҙе. **Һылыубикә, Һылыуҡай** һ.б. исемдәр «ҡыҙ», «ҡыҙ туған» мәғәнәһендә исемгә әйләнгән. «Ул» һәм «ҡыҙ» һүҙҙәре менән исем ҡушыу күп төрки телдәрҙә бар.

Башҡорт исемдәре араһында «ейән» һүҙе менән яһалған исемдәр бар. Был исемдәр, боронғо башҡорт йолаһы буйынса, әсәһенең ауылында тыуған балаға ҡушылған. (Мәҫ., **Ейән, Ейәнбай, Ейәнбикә, Ейәнбәк, Ейәнсөйәр, Ейәнгилде, Ейәнғол, Аллайейән, Ейәнбирҙе, Ейәндыуан, Ейәнсура, Ейәнсары, Ейәнембәт.**) Төрөкмәндәрҙә «ата» һәм «ейән» һүҙҙәре менән исем ҡушыу тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәт килтерелә: «У сарыков имя **Ата**

дается не в честь усопшего предка, а в связи с тем, что он появился в доме своего деда со стороны матери. Среди *теке* и *йомудов* таких мальчиков называют **Егенгелди** «племянник пришел», **Егенмырат** «племянник – идеал», **Егенмәмбәт** и т.д. Встречается и женское имя **Егенсолтан** «племянница-повелительница». Төрки телдәрҙән башҡорт, төрөкмән, ҡараҡалпаҡ, үзбәк, ҡаҙаҡ, төрөк телдәрендә *ейән* һүҙе менән кеше исемдәре билдәле. Боронғо төрки һүҙлектә килтерелгән **Егәнчур** исеме Орхон-Енисей ҡомарт-ҡыларынан (721 йыл) һәм **Егәнкөлөк санун, Егәнкара, Егән киңрул саңун** исемдәре уйғыр ҡомартҡыларынан алынған.

«Ейән» һүҙе менән яһалған Ейәнсура районы атамаһы **Ейәнсура** исеменә, **Янбаев** фамилияһы **Ейәнбай** исеменә ҡайтып ҡала. (**Ейәнғәленең, Йәнғәлегә** әйләнеүе тураһында билдәле этнограф Н. В. Бикбулатов әйтеп китә.)

«Кинйә» һүҙе менән яһалған кеше исемдәре: **Кинйә, Кинйәбай, Кинйәбикә, Кинйәкәй, Кинжәкәй, Кинйәбулат, Кинйәғол, Кинйәабыз, Кинйәһултан, Кинйәмырҙа, Кинйәғәле, Кинйәюл.** Башҡорт телендә «кинйә» һүҙе *һуңғы, төпсөк* бала мәғәнәһендә йөрөй. Боронғо башҡорт телендә «кинйә» һүҙенең *һуңғы, аҙаҡҡы* тигән күп мәғәнәле ҡулланылышы билдәле. Мәҫ., *кинйә май, кинйә ураҙа, кинйә ҡымыҙ* (көҙгө ҡуйы һөттән яһалған ҡымыҙ). Туғанлыҡ терминдарынан «туған» һүҙе исем яһауҙа актив ҡулланылған (мәҫ., **Йәнтуған, Айтуған, Иштуған, Байтуған, Туғажан, Туғашай, Биктуған, Биктуғаш** һ.б.) Өйләнешеү йолаһына ҡараған «ҡоҙа» һүҙе менән исемдәр яһалған: **Ҡоҙаҡай, Ҡоҙабай, Ҡоҙаш, Ҡоҙашман, Ҡоҙаҡ. Ҡоҙабаев, Ҡоҙашев, Ҡудаҡаев** фамилиялары бар.

### 11. Этнонимдарға бәйле исемдәр

Башҡорттарҙағы *ырыу, ҡәбилә* ҡоролошо һәм уларҙың атамаларының килеп сығышы тураһында ентекле тикшеренеүҙәр Р. Г. Кузеевтың «Очерки исторической этнографии башкир» (ч. 1, Уфа, 1957) тигән хеҙмәтендә бирелгән. Бында һәр башкорттоң үҙ *ырыуы, араһын* яҡшы белеүе тураһында әйтелеп, шул атамаларҙың төрлөсә килеп сығыуы күрһәтелә. «Часто башкирские роды называются по именам вождей, когда-либо их сформировавших или стоявших во главе этих родов в период важнейших исторических событий. Патронимические названия (по именам былых предводителей) носят не только сравнительно молодые (Юрматы ырыуындағы *Тәтигәс, Кармыш, Ильсектимер* һәм *Аҙнай* тураһында һүҙ бара), но и древние роды: Бурзянский род *Ямаш*, Усерганский род *Сураш* и т.д.».

Ҡайһы бер ғалимдар әйтеүенсә, ырыу, ҡәбилә тормошо менән йәшәүҙең бер осоронда *ырыу* атамаһы менән *кеше исеме* икеһе бер булған тигән ҡараш йәшәй. Боронғо башҡорт исемдәре араһында *суба, саба* һүҙҙәре *сыба, сыбай, саба, сабай, суба, суби, субай* формаларында осрай: **Бейсуби, Байсуби, Ҡәҙерсуби, Яйыҡсубы, Меңлесубы, Иҙелсубы, Туксаба, Ыҡсаба, Биксыбай, Бейсуба, (Таңсыбай?), Илсубай, Биҡсубай, Ҡолсубай, Субай, Субан, Субанай, Субаҡ, Субаҡай**. Меңле ырыуы эсендә *Суби меңле* тигән түбә (аймаҡ) атамаһы килтерелгән (Кузеев). Тимәк, борон тарихтың бер осоронда билдәле шәхестең исеменә *ырыу, ара* атамаһы ҡушылып йөрөгән.

Этнонимдарҙың кеше исеменә әйләнеүе тарихта һәм тормошта билдәле күренеш. Күсмә тормошло башҡорт ырыуҙары борон-борондан бер-береһе менән аралашып йәшәгән. Бигерәк тә бер ырыу эсендә никах тыйылыу

(экзогамия) сәбәпле башҡорттоң ырыу, ҡәбиләләре араһында ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ бәйләнеше көслө булған. Ер-һыу атамалары баланың тыуған урынын билдәләр өсөн исем итеп ҡушылған кеүек, ырыу, ара атамалары ла, бала шул ырыуға барғанда, йәки атаһы шул ырыуға киткәндә тыуһа, исем итеп ҡушылған. Был йоланың ҡалдығы һирәк булһа ла, һаҡланып ҡалған. Бөгөнгө көндә **Тамъян**, **Бөрйән** исемдәре осрай. Ошо уҡ йола менән борон **Ҡыпсаҡ, Ҡалмаҡ, Ҡалмаҡкол, Үҫәргән, Ҡатай, Юрмат** тигән исемдәр ҡушылыуы ла мөмкин. Дөйөм алғанда, кеше исеменә әйләнгән этнонимдар башҡорт телендә күп. Ә ҡайһы бер ырыу, ара атамалары кеше исеменән килеп сығып, һуңынан кире кеше исеменә әйләнгән. Башҡорт исемдәре араһында *сыуаш, сирмеш, мокша, ҡаҙаҡ, ҡалмаҡ, төрөкмән, ноғай* тигән халыҡ атамаһына ҡайтып ҡалған исемдәр бар: **Сыуаш, Сыуашбай, Сыуашбирҙе, Аҡсыуаш, Биксыуаш, Сы-уашай, Сирмеш, Сиримес, Сирмешәк, Аҡсирмеш, Моҡша, Моҡшай, Ҡаҙаҡ, Ҡаҙаҡбай, Ҡалмаҡ, Ҡалмаҡкол, Ҡалмаҡсура, Ҡалмаҡмулла, Ноғай, Нуҡай, Нағайбәк, Ноғаш, Ноғайбәк, Ноғайсура** һәм **Ноғайбикә** һ.б. Быларҙан башҡа *һарт* ырыуы атамаһынан: **Сарт, Сартбай, Сарткол, Сартсултан, Сартыҡ, Сартан,** *дыуан* ырыуы атамаһынан **Йәндыуан**, **Жандыуан**, **Дыуан**, **Дыуанай**, *табын* ырыуы аймағы *үңгәр* һүҙенән **Унғар**, **Үңгәр**, **Бишүнгәр**, **Аллаүнгәр** исемдәре яһалған. Һирәкләп осраған **Йылайыр, Күбәләк, Үзбәк, Ҡытай, Болғаир, Мишәр, Төмәнсура, Ҡумыҡша, Бозок, Тәкәй, Алтай, Сынғыҙ, Мәнғол** исемдәре лә этнонимдарға ҡайтып ҡала. Ошо кеше исеменә әйләнгән этнонимдарҙың күбеһе бөгөнгө көндә фамилиялар, ер-һыу атамалары составында осрай. Көҙәй ырыуы шайтан көҙәй аймағы әлкә араһы атамаһының (бөгөнгө Алкин фамилияһынан) сығышы тураһында Салауат районы Мәсетле ауылы **Алкин Мырҙахан Дәүләт улы** (1929 й.): «Борон Әлкә тигән ҡарт булған, шунан килә беҙҙең фамилия. «Әлкә» ни тигән һүҙҙер – белмәйбеҙ», – тип һөйләй. «Башҡорт легендалары» китабында **Әлкә** Дүрмәндең бер улы тип бирелә: «Былар дүрт бала үҫтергәндәр. Дүртеһе лә ул булған. **Иҙрис, Әлкә, Йонос, Шағанай** булған уларҙың исемдәре». Артабан Салауат районындағы **Әлкә**, **Иҙрис**, **Юныс** һәм **Шағанай** ауылдарына ошо дүрт ул нигеҙ һалған тип күрһәтелә. Башҡорт исемдәре араһында **Әлкә** исеме төрлө варианттарҙа – **Әлкә, Әлкәле, Әлкәш, Илкә, Әлкәй, Әлкей, Илкея, Илкин** (фамилия), **Алкеев** (фамилия), **Алкалин** (фамилия), **Әлкәш**, **Алкашев** (фамилия) – алынған. Был исемдәрҙең барыһы ла һис шикһеҙ ара исеменә (этнонимға) ҡайтып ҡала. *Әлкә* араһын Р. Г. Кузеев шайтан-көҙәй ырыуына индергән.

Шулай итеп, юғарыла әйтеп киткәнсә, этнонимдарҙың антропонимдарға әйләнеү процесы төрлө юлдар менән барған һәм төрлө ваҡытҡа тура килә. Шуныһы характерлы, этнонимдар менән антропонимдар һәм топонимдар тығыҙ бәйләнештә үҫкән. Башҡорт исемдәре составында этнонимдарҙан яһалған кеше исемдәре бик күп. Ҡайһы бер башҡорт исемдәренең сығышын билдәләү ауыр, сөнки этнонимдар, уларҙың кеше исеменә әүерелеүе йәки киреһенсә кеше исеменең этнонимға әүерелеүе махсус тикшереү талап итә. Миҫал өсөн бөгөн актив ҡулланылышта булған **Ҡалҡаман** исеменән яһалған **Ҡалҡаманов** фамилияһының килеп сығышын кем нисек билдәләй ала, сығанаҡтарҙа шулай әйтелә: **Ҡалҡаман** тигән кеше исеме (бөгөнгө **Ҡалҡаманов** тигән фамилия) *ҡалҡ//халха* тигән монгол ырыуының атамаһына ҡайтып ҡалыуы мөмкин. (Этнонимдарға *ман, мән* ҡушылып яһалыуын иҫәпкә алһаҡ.) В. В. Радлов «ҡалҡа» һүҙенә өс төрлө мәғәнә бирә: 1) һаҡ; 2) монгол ырыуы атамаһы; 3) кейеҙ тирмәнең ағас ишеге. Н. А. Баскаков

«калҡа» һүҙен «шит», заслон» тип аңлата. **Ҡалҡаман** исеме ҡараҡалпаҡтарҙа осрай (**Ҡалҡаманов** тигән фамилия Әбйәлил районында бар.)

Башҡорт исемдәре араһында этнонимик термин менән яһалған кеше исемдәре бар. Башҡорт телендә *ил, ырыу, түбә, ара, аймаҡ, нәҫел, тоҡом, бүлкә, зат* тигән этнонимик терминдар билдәле. Был терминдарҙың *ил, түбә, ара, нәҫел, тоҡом* тигәндәре кеше исемдәре составында осрай (**Араҡай, Арҡай, Түбә, Түбәаға, Түмәкәй, Түмәк, Тоҡом, Нәҫелбикә** һ. б.). Башҡорт телендә «ил» һүҙе менән яһалған исемдәр этноним термины ғына түгел, ә балаға ырыу-ил төшөнсәһен биреп, ил һөйөүсе итеп тәрбиәләү өсөн ҡушылған. *Ил* һүҙе – тыуған ер, тыуған, унда борон-борондан йәшәгән изге урын, төп Ватан төшөнсәһен тәрбиәләгән тип ҡарарға кәрәк. *Ил* һүҙе менән исемдәр күп: **Илбай, Илбикә, Илбул, Илтерәк, Илбаҡты, Илбәк, Илгилде, Илгенә, Илиш, Илкәй, Илекәш, Илсубай, Илбулды, Илсура, Иләй, Илемғужа, Илмәт, Илкәш, Илекәс, Илмәкәй, Илостан, Илмекәс, Илдебәк, Илтебай, Илтәнбай, Илғотлы, Илмөхәмәт, Илсе, Илсен, Илсебай, Илсекәй, Илсеғол, Илсемәт, Илғашай, Илсубай** һ. б. «Ил» һүҙе үҙенең килеп сығышында бик боронғо һүҙ булып, тәүҙә ырыу мәғәнәһендә (ер-һыу төшөнсәһен биреп), һуңынан тыуған ил, Ватан төшөнсәһенә күскән. «Ил» һүҙенең ырыу мәғәнәһендә ҡулланылыуына башҡорт халыҡ ижадында миҫалдар күп. «Сибай кантон» йырында: *«...Киттем генә Тамъян иленә. Ҡатай ғына иле утҡа янһа, Ҡайтыр инем тыуған илемә»* тип йырланыла. Боронғо төрки һүҙлектә «ил» һүҙе *ырыу, ҡәбилә* тип бирелгән. Э. В. Севортян *ил* һүҙенең төрки телдәрендә булған ун бер мәғәнәһен биреп, *ырыу, ҡәбилә* мәғәнәһенең иң боронғо төрки яҙмаларында осрауын әйтә. «Ил» һүҙе менән кеше исемдәре Рашид ад-дин яҙмаларында күп (**Ил-Кутуй, Илчикмиш катун, Ил-Арслан, Ил-тимур, Илхужа**). VIII быуат Орхон яҙмаларында **Илбилге** тигән ҡатын-ҡыҙ исеме алынған. 1295 йылғы ғәрәп-төрки һүҙлегендә **Илалды, Илбасты, Илбечи** исемдәре бар. *Ил* һүҙе менән исемдәр төрки телдәрендә иң боронғо булып һанала. Башҡорт телендә бөгөн дә *ил* һүҙе менән ир-ат исемдәре киң ҡулланыла, яңы исемдәр яһалыуын дауам итә.

### 12. Ер-һыу атамаларына бәйле исемдәр

Балаға исемде тыуған еренә ҡарап ҡушыу ҙа боронғо йолаға ҡайтып ҡала. Боронғо башҡорт исемдәре араһында географик терминдарҙан, ер-һыу атамаларынан яһалған кеше исемдәре байтаҡ. Был исемдәрҙән географик терминдарға ҡарағандары: *арал, үҙән, туғай, тау, ҡыр, урман, ялан, ҡаран, ҡотоҡ, күл* тигән һүҙҙәрҙән яһалған. Географик термин, ер-һыу атамаларынан яһалған исемдәр ир-ат исем-дәрен тәшкил итә: **Аралбай, Үҙәнбай, Туҡай, Туғай, Таулыбай, Таулы, Тауҡай, Тауйаз, Ҡыржан, Ҡырмай, Ҡырбатыр, Урман, Урмантай, Урманбай, Яланбай, Яланбикә, Ҡарандай, Ҡотоҡ, Урын, Үреш, Талтиҡ** (таллыҡ), **Ҡотоҡ, Сасыҡкүл, Курган** (**Әмир Курган** тигән кеше М. Өмөтбаевтың шәжәрәһендә һәм **Ҡурганов** фамилияһы Башҡортостан тарихына ҡағылған материалдарҙа бар). Төрөк телендә ҡурған «ныҕытма», «королма» тигәнде аңлата. Фарсы теленән ингән *сарай* (торған, йәшәгән урын) һүҙе лә кеше исеменә әйләнгән. Башҡортостандың Хәйбулла, Йылайыр районында **Сараев** тигән фамилия күп. *Йәйләү, утар* һүҙҙәренән **Йәйләүев, Зайлалов** һәм **Утарбаев** фамилиялары яһалған. Башҡорт телендә ҡурған «хәрби ныҕытма», «кәлғә» мәғәнәһендә билдәле.

Ер-һыу атамаларының кеше исеменә әйләнеүе, географик терминдарҙың кеше исеменә әйләнеүенә ҡарағанда, һуңғыраҡ күренеш булырға мөмкин. Был йола буйынса башта баланың тыуған урынын (*утар, йәйләү, үҙән, тау*) билдәләү шарт итеп ҡуйылһа, һуңға табан халыҡтарҙың географик таралышы киңәйә барған һайын, ил, тыуған төйәк төшөнсәһен иҫәпкә алып, үҙ төйәгенән ситтә тыуғанлығын күрһәтеү маҡсатында ҡушыла башлаған. Мәҫәлән, Ирәндек буйы кешеһе, **Ирәндек** тигән исемде Ирәндектә йәшәгәндә ҡушмай, ә Ирәндектән ситкә китһә, иҫтәлек рәүешендә ҡушыр булған. Йәки Урал тауынан ситтә йәшәгән кеше Уралға килгән сағында бала тыуһа, Урал иҫтәлегенә балаға **Уралбай** һ.б. исем ҡушҡан. Ҡара-табын ырыуы шәжәрәһендә быға бик асыҡ миҫал бар: «Кара табын би боронғо урынна-рын ташлаб, Чулман йылғасы буйына күчкән. Аның улы **Чулман би** шунда килгәч туған» (БШ, 116). Бынан күренеүенсә, **Чулман би** исемен ул малайға ошо Чулман (ҡама) исемле йылға буйына килгәс тыуған өсөн ҡушҡан. Башҡорт исемдәрендә осраған **Мысыр, Мысырай, Мысырғәле, Мысырсула** исемдәре ер-һыу атамаларына бәйле исемгә әйләнгән. Тимәк, *Мысыр* атамаһы башҡорттарға борондан билдәле булған. Кеше исеменә әйләнгән ер-һыу атамаларынан йылға исемдәре махсус урын алып тора. Кеше исемендә иң күп осраған йылға атамалары **Ыҡ, Туҡ, Иҙел.** *Иҙел* һүҙенең **Иҙел** (**Ител** формаһы бар), **Иҙелбай, Иҙелбикә, Иҙелғужа, Иҙелбәк, Иҙел саби; Туҡ** йылғаһы атамаһы менән **Туҡбирҙе, Туҡсура, Туҡсуран, Туҡсаба, Туҡмайрыҡ, Туҡҡуза, Туҡҡужа; Ыҡ** йылғаһы атамаһы менән **Ыҡбай, Ыҡбаймас, Ыҡбалта, Ыҡбирҙе, Ыҡсура, Ыҡсыбай, Ыҡҡужа, Ыҡҡуза** исемдәре билдәле. Былардан башҡа **Йайыҡ, Йайыҡбай, Йайыҡсаби, Сарман, Нөгөш, Енысай, Сеҙе, Серәй** тигән йылға атамаларынан яһалған исемдәр бар. (Һаҡмар менән Һамар йылғаларының ҡайһынынандыр яһалған сығанаҡта **Самаров** һәм йәйәлә **Саҡмаров** тип алынған Тамъян өйәҙенә ҡараған фамилия күрһәтелгән.) Ырғыҙ йылғаһының атамаһынан русса яҙылышында **Иргиз, Зиргиз, Джиргиз** тигән кеше исемдәре осрай. Былардан башҡа Башҡортостанда билдәле тауҙарҙан **Урал** тауы атамаһынан **Урал, Уралби, Уралбай, Уралмәт**, һәм **Урал** тауы теҙмәләренә ингән **Ирәндек, Ҡыраҡа** тауҙары атамалары кеше исемдәре составында осрай. Әлбиттә, башҡорт телендәге ер-һыу атамаларынан яһалған кеше исемдәре тураһындағы мәғлүмәттәр былар менән генә сикләнмәй. Ер-һыу атамалары менән исем ҡушыу йолаһы борон-борондан килә һәм уның ҡайһы бер күренештәрен бөгөнгө көндә лә төрки халыҡтары исемдәрендә табып була. Ер-һыу атамалары менән исемдәр башлыса ир-атҡа ҡушылған, ләкин ҡайһы бер халыҡтарҙа (башҡорттарҙа **Иҙелбикә**, ҡараҡалпаҡтарҙа **Оралбикә, Отарбикә**) ҡатын-ҡыҙ исемдәре лә осрай.

### 13. Үҫемлектәр, ағастар, иген, сәскә атамаларына бәйле исемдәр

Үҫемлек атамалары менән яһалған исемдәр араһында үҫемлектәргә, иген игеүгә бәйле һүҙҙәрҙән яһалған кеше исемдәре бар. Үҫемлек атамаларынан иң тәүҙә бала тыуған ерҙәге үҫемлектәр, хужалыҡта ҡулланылған ағастар, матурлығы, емеше билдәле емеш-еләктәр, гөл-сәскә атамалары кеше исеменә әйләнгән. Уларҙың ҡайһы берҙәре башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән. Боронғо башҡорт исемдәренән: **Талботаҡ, Имәнҡол, Байтирәк, Муйылбикә, Ҡарағай, Сейәбикә, Ҡамыш, Ҡурай, Ҡортка** (ниндәйҙер ваҡ ҡыуаҡлыҡ ата-

маһы), **Бишҡортка**, **Ҡорткасик**, **Ҡорткаш**, **Мышар, Ҡалмышар, Каранай, Емешбай, Емеш, Сәсәк, Иген, Етенбай, Сепкән** (үлән атамаһы), **Борсаҡ, Арпа, Арыш** исемдәрен күрһәтергә мөмкин. А. Г. Бессонов **Арпа батыр** әкиәтендә: «Она никогда не рожала... съела одно только ячменное зернышко; после этого у нее родилось дитя. Старуха велела дать своему ребенку имя **Арпа**», – ти. Был исем «арпа» һүҙенең башҡорттарҙа борондан билдәле булыуын күрһәтә. Рашид ад-дин яҙмаларында **Арпа** исеме күрһәтелгән. Быларҙан тыш **Алма, Алмабикә, Алмаҡай** (ғәрәп һ.), **Зәйтүн, Зәйтүнә, Баҙыян** тигән һәм башҡорт телендәге сәскә һүҙенә синоним булып, матурлыҡ, нәфислек билдәһе рәүешендә бик күп ҡатын-ҡыҙ исемдәренә ҡушылған гөл (фарсы һүҙе) һүҙе үҙләштерелгән: **Гөлстан, Гөлбәҙән, Гөлнаһар, Гөлбаҙыян, Гөлзифа, Гөлминаз, Гөлназ** (бындай исемдәр башҡорт телендә «г» өнө урынына «к» өнө менән дә үҙләштерелгән. **Көлбәҙән, Көлниһар, Көлбаҙыян, Көлзифа, Көлминаз, Көлнас** формаһында), **Гөлбикә, Гөлкәй, Гөлнар, Гөлбоҫтан, Гөлъямал, Гөлниса, Гөлйөҙөм** һ.б. Үсемлек, емеш, сәскә атамаларынан кеше исеме яһалыу – ул төрки һәм башҡа халыҡтар өсөн билдәле күренеш.

### 14. Һандарға, һан төшөнсәһенә бәйле исемдәр

Башҡорт телендә кеше исемдәре составында *бер, ике, өс, биш, туғыҙ, тукһан, йөҙ, мең* һандары һәм *ал, тәүге, ҡуш, игеҙ, күп, күмәк* тигән һан төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр осрай. Мәҫ., **Тәүей, Тәүлесура, Тәүлембәт, Тәүләй, Тәүләбай, Тәүге, Тәүет, Тәүеней, Алйегет, Алгилде, Алда, Алдансиру, Алдагәрәй, АлдаҒуза, Икенсе, Игеҙәк, Ҡушар, Ҡушый, Ҡушалы, Ҡушығол, Килдегуш, Ҡушкилде**, һәм **Өскилде, Оска, Өсөкәй, Өстөм, Өстәк, Өстөкәй, Өсйән; Бербиш, Бишҡорткабей, Бишембай, Бишуңғар, Бишем, Туғыҙбай, Туғыҙбикә, Туғыҙаҡ, Туғыҙбаҡ, Унай, Ундан, Унғам** (илле, алтмыш, етмеш, һикһән) һ. б. Ғаиләлә баланың нисәнсе икәнен күрһәтеп исем ҡушыу йолаһы булған (был йола һуңға табан ғәрәп һүҙҙәре иҫәбенә күбәйгән). Тәүге балаға *ал, тәү* һүҙҙәре менән, һуңғы балаға **Төпсөк, Төпсөй, Кинйә, Кинйәбай, Кинйәбикә, Кинйәкәй, Кинйәбулат, Кинйәғәли, Кинйәабыҙ, Кинйәһолтан** һ. б. тип исем ҡушылған.

Төрки халыҡтарында һан менән яһалған исемдәргә беренсе башлап билдәле тюрколог (сығышы менән башҡорт кешеһе) А. Дибаев иғтибар итте. Ул **Алтыбай, Унбай, Иллебай, Етмешбай, Тукһанбай, Йөҙбай** исемдәрен күрһәтә. Телдә һан төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр һандарға ҡарағанда алдан барлыҡҡа килгән. Мәҫ., *аҙ, күп, иш, ҡуш, ал, тәү, тәүлә* һүҙҙәре менән исемдәр конкрет һандар менән яһалған исемдәрҙән алда барлыҡка килгән.

Бер һанын белдереп **Берекәй**, **Бербиш**, «тәү» һүҙе менән: **Тәүей, Тәүеней, Тәүет, Тәүләкәй, Тәүлесура, Тәүләмбәт, Тәүлебай, Тәүле;** «ал» һүҙе менән: **Алдағол, Алдағуза, Алдаяр, Алдагәрәй, Алдансирун** тигән исемдәр. *Ике* һүҙе менән **Икенсе, Игеҙәк** (игеҙ) һәм уның синонимы «ҡуш» һүҙенән **Килдеғуш, Ҡотлоғуш, Ҡушкилде, Ҡушар, Ҡушай, Ҡушый, Ҡушам, Ҡушығол** һ.б. исемдәр бар. *Өс* һаны төрки телдәрендә ниндәйҙер сихри, тылсымлы көскә эйә тип ҡарала: **Өстөкәй, Өскилде, Өстөк, (Өслөк), Өслөбай, Өсйән** исемдәре билдәле. *Дүрт* һүҙе менән беҙҙең материалдарҙа кеше исемдәре осраманы. *Биш* һаны һандар үҙләштереү, үҫеүҙә күп тигән мәғәнә белдереп иҫәптең сиге булыуын тоҫмаллата. *Биш* һүҙе менән башҡорт

телендә кеше исемдәре һәм этнонимдар составында **Бербиш**, **Бишҡортҡа би**, **Бишембай**, **Бишуңғар** (кеше исемдәре), **Бишул, Бишул-уңғар** (этнонимдар) бар. *Алты* һүҙе менән Р. Г. Кузеев Әй башҡорттарында *алтауҙар* тигән этнонимды күрһәтә. *Ете* һүҙе *өс* һүҙе һымаҡ сихри, тылсымлы бер һан итеп ҡаралып, халыҡтың йола, ғөрөф-ғәҙәттәрендә киң урын алған, ләкин кеше исемдәре составында осрамай. *Туғыҙ* һаны менән **Туғыҙбай, Туғыҙаҡ, Туғыҙбикә, Туғыҙбаҡ, Туғыҙбай би** һ. б. исемдәр бар. Йола буйынса ғаиләлә 9-сы булып тыуған малайға **Туғыҙбай, Туғыҙаҡ**, ә ҡыҙ балаға **Туғыҙбикә** тип ҡушҡандар. *Туғыҙ* һүҙе менән исемдәр күп төрки телдәрҙә бар. *Ун* һаны менән: **Унай, Ундау, Унғам** исемдәре осрай. Р. Г. Кузеев *ун* һүҙе менән башҡорттарҙа этнонимдар байтаҡ булыуын күрһәтә. Башҡорт телендә фразеологизмдарҙа күп ҡулланылған *кырк* һүҙе исемдәр составында осрамай, этнонимдар составында ғына бар (*кырк күзәк, кырк, кырктар* – кесе табындарҙа, *кырык өйлө* – ҡыуаҡан менән меңдәрҙә булыуын Кузеев әйтә). *Илле, алтмыш, етмеш, һикһән, туkһан, йөҙ, мең* һандары төрки телдәрҙә кеше исемдәре составында осрай. Был исемдәр бала тыуған саҡта атаһының йәшен билдәләп һәм оҙон ғүмерле, атаһы һымаҡ оҙаҡ йәшәһен, тип ҡушылған. *Мең* һүҙе менән **Меңгухан, Меңғушай, Меңетәр, Меңсаҙаклы Урадач би** тигән исемдәр, ә *ун мең* һанын белдергән *төмән* һүҙе менән **Төмәнсура**, **Төмән** исемдәре билдәле. *Күп, күмәк* (иҫәп-хисап) һүҙҙәре менән **Күмәкбикә, Күпйегет, Күпкилде, Күпдәүләт, Ҡолгүп** (кол+күп), **Күбләй, Күбәнсә, Күмәкәй, Күмәк** исемдәре бар. Иҫәп-һан менән яһалған исемдәр рәтендә йәште (*йәш, карт, кесе, иҫке, карт*) белдергән исемдәрҙе ҡарарға мөмкин. Башҡорт телендә **Ҡартбай, Ҡартбатыр, Ҡартамыш, Ҡартансирек, Ҡарт, Йәшбулат, Йәшкилде, Йәшлек, Йәш, Иҫке би, Кесе би, Ҡорткаәбей** исемдәре билдәле. Был төр исемдәрҙең ҡасан, ниндәй йола менән ҡушылыуы тураһында башҡорт телендә мәғлүмәт һаҡланмаған. Ҡырғыҙҙарҙа бала бик ныҡ көтөп алынһа, ҡартайғас булһа, **Ҡартанбай, Сиксәнбай, Алтымыш** тигән исем ҡушылған. Ошо йола башҡорттарҙа ла булыуы ихтимал.

### 15. Эш, хеҙмәт, эшмәкәрлек төрөнә бәйле исемдәр

Башҡорт исемдәренең бер төркөмө боронғо йәмғиәттә кешенең *эшмәкәрлеген, хеҙмәттең* әкренләп камиллаша (бүленә) барыу процесын төҫмөрләргә мөмкинлек бирә. Был төр исемдәрҙә кешенең һөнәре, кәсебе сағылыш ала. Башҡорт телендә бындай исемдәрҙән: **Ҡошсы, Ҡаҙансы, Алтынса, Илсе, Илсеғол, Илсекәй, Илсен, Илсебай, Ялсы, Ялсығол, Юлсы, Юлсығол, Юлсыбай, Юлсыҡай, Ҡуйсы** (ҡуй көтөүсе), **Туйсы, Туйсыбай, Балыҡсы, Төлкөсө, Айыусы, Этсеғол, Һунарсы, Һабансы, Бесәнсе, Ураҡсы, Балтасы, Балтас, Итексе, Һатыусы, Ҡыуғынсы, Япансы, Уҡсы, Күсеғол, Ҡолансыбай, Өсәтсе, Сарғарсы, Мәлдәксе, Ҡараҡсы, Күгәнсе, Уғынсы, Саусығол** һәм **Ҡарауыл, Һаҡбай, Һаҡкол, Һаҡсығол, Һаҡтағол, Мәргән** исемдәре билдәле. Боронғо төрки телдәрендә шоңҡар сөйөүсе, һунарға ҡош өйрәтеүсе тигән мәғәнәлә «кошсо» һүҙе төрки халыҡтарының ҡош сөйөп һунарға йөрөүе тураһында хәбәр итеп, кеше исеме булып ҡаҙаҡ һәм башҡорт телдәрендә һаҡланған. Боронғо «сиреү» һүҙе менән яһалған кеше исемдәре кешенең ғәскәри хеҙмәткә ҡағылышлы булыуын билдәләп, кеше исеменә әйләнгән. Башҡорт телендә «сиреү» һүҙенән яһалған **Сиреү, Сирүк, Сирусы, Сирү, Сирубай, Сирусай, Сиреүмәт, Сиреүкәй, Сирә** исемдәре бил-

дәле. Һөнәр, кәсеп, эшмәкәрлеккә бәйле исемдәрҙән яһалған фамилиялар башҡорт телендә ҡулланылышта йөрөй. Мәҫ., **Сирусин, Туйсин, Ураҡсин, Сатусин, Сунаршин, Бесәншин, Урманшин, Урмантаев, Урманов, Юлсыбаев, Илсебаев; Сирғәли** тигән ирҙәр исеме лә актив ҡулланыла.

### 16. Эш, хеҙмәт, яу ҡорамалдарына бәйле исемдәр

Боронғо башҡорт исемдәрендә кешенең *хеҙмәте, эше, кәсебе* тураһында мәғлүмәт һаҡланған. Был исемдәр кешенең көндәлек тормоштағы, хеҙмәттәге кәрәк-яраҡҡа, эш ҡорамалдарына ҡайтып ҡала. Башҡорт телендә һәм башҡа төрки телдәрҙә «ҡаҙан» һүҙе менән исемдәр күп таралған. «Ҡаҙан» һүҙе ҡорамал булыуҙан башҡа, юғарыла әйткәнсә, этноним, топоним булып йөрөй. Ләкин этноним булып китеүҙән алда, «ҡаҙан» һүҙе үҙенең төп мәғәнәһендә кеше исеменә әйләнгән булырға тейеш. Башҡорт шәжәрәләренән Сытырман ауылы һәм Ҡыпсаҡ шәжәрәләрендә **Ҡаҙанҡап** исеме алына (БШ, 34, 36, 94). **Ҡаҙанҡап** исеме ҡаҙаҡтарҙа ла осрай. Башҡорт телендә **Ҡаҙан, Ҡаҙансы, Ҡотлогаҙан, Ҡаҙантархан, Ҡаҙанай, Ҡаҙанбай, Ҡаҙанғол, Ҡаҙанҡап** тигән исемдәр бар. Төрөкмән шәжәрәләрендә **Ҡазан, Ҡазанбек, Салорказан (Салр-казан-алп)** исемдәре күрһәтелгән (Кононов). Рашид ад-дин яҙмаларында «ҡаҙан һүҙе» менән исемдәр байтаҡ (был турала этнонимдар бүлегендә әйтелде). «Ҡаҙан» һүҙенең аш бешереү ҡорамалы булыуына (этноним булып та шул мәғәнәнән яһалышына) һәм ер-һыу атамаһы «ҡаҙан» һүҙенең дә аш бешереү ҡорамалы менән бәйле булыуына, Ырымбур ҡалаһы крайҙы өйрәнеү музейында бик боронғо ҡаҙандарҙы күргәс, ышанмай мөмкин түгел. Ҡаҙанҡап – ҡаҙанды тота торған сәнғәт әҫәре дәрәжәһендә эшләнгән ҡорамал – ҡаҙан тотҡос. Ҡаҙанҡапты Фрунзе ҡалаһы музейында (1986) күрергә насип булды. Күндән, ғәжәйеп матур итеп эшләнгән, ҡаҙан тотҡос ҡорамал боронғо төрки халыҡтар исемдәрендә күп һаҡланған.

Башҡорт һәм башҡа төрки телдәрҙә «балта» һүҙе менән яһалған кеше исемдәре айырым урын алып тора. Боронғо төрки һүҙлектә «балта» һүҙенең бер генә мәғәнәһе – һуғыш ҡорамалы (айбалта) тигән мәғәнә бирелә. Балта (балка) менән айбалта ҡырғыҙ телендә лә ике мәғәнәлә: 1) эш ҡорамалы; 2) һуғыш ҡорамалы тип бирелгән. Башҡорт телендә «балта» һүҙе менән кеше исемдәре айырыуса күп: **Балта, Балтас** тигән йөҙгә яҡын һәм **Ыҡбалта, Балтағол, Балтаҡай, Балтай, Балтабикә, Балҡаман, Булта, Балтагәрәй** һ.б. Н.Ф.Катанов «балта» һүҙе менән **Алтын Пелты** тигән исемде күрһәткән. Мәжүси сыуаш исемдәре араһында **Бибалта, Уразбалта, Саранбалта** исемдәре алынған. Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ телдәрендә **Балтабай, Балтабек, Балта;** ҡараҡалпаҡ телендә **Балтабай, Балғабай, Балҡыбай** исемдәре һаҡланған (Дибаев; карк. – Р.С.Жанузаков). Башҡортостанда Балтас районының атамаһы **Балтасы, Балтас** тигән кеше исеменә ҡайтып ҡала. Бынан башҡа Баймаҡ районында **Балдин** фамилиялары бар. Башҡорт телендәге **Балхин** фамилияһы ла *балға, балха* һүҙҙәренә бәйле. Башҡорт теле диалекттарында «балға» – салғы сүкеше һәм солоҡ соҡой торған балта тип алынған. *Балта, балка, балха, балға* – бер тамырҙан сыҡҡан һүҙҙәр, мәғәнәһе менән дә борон замандарҙа сүкеш менән балтаның бер ҡорамалдан айырылыуын күрһәтеп тора.

Эш ҡорамалы атамалары **Быҫҡыбай, Кәйлә, Киле, Килекәй, Ҡармаҡ, Иләк би, Мәскәү** (ҡармаҡ төрө), **Таған, Тағанай** тигән һүҙҙәр кеше исемдәрендә сағылыш алған.

Игенселек менән шөғөлләнеүҙе белдергән *һабан* һәм *урак* (юғарыла әйткән *иләк* һәм *киле*) һүҙҙәре менән яһалған кеше исемдәре фамилияларҙа бөгөн дә ҡулланыла. Башҡорт исемдәренән **Һабан, Һабанай, Һабанғол, Һабансы, Ураҡ, Ураҡай, Ураҡбай, Ураҡсы** һәм **Тирмәнбай** тигән башҡорт иseme лә игенселеккә бәйле.

Тормош, көнкүреш ҡорамалдарынан башҡа яу ҡорамалдарының атамалары кеше исемдәрендә күпмелер сағылыш алған. *Ҡылыс* һүҙе менән кеше исемдәре күп төрки телдәрендә һәм боронғо яҙмаларҙа күрһәтелгән. Рашид ад-дин яҙмаларында **Кылыч Арслан, Кылычкара**, төркмән шәжәрәләрендә Али хандың улы **Кылыс-Арслан** хан тигән исемдәр бирелгән. Башҡорттарҙа Табын шәжәрәһендә **Ҡылыс-Арслан** Субактың икенсе улы тип күрһәтелә. (БШ, 155). Мосолмандар династияһында Ҡылыс-Арслан I, II, III, IV тигән батша исемдәре бирелгән (Босворт). Башҡорттарҙағы һымаҡ «кылыс» һүҙе менән **Кылысбай, Ҡылысхан, Ҡылыс-Арслан, Ҡылыс** исемдәре ҡараҡалпаҡтарҙа, ноғайҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа бар. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр әйтеүенсә, кылыс ҡушаматы хәрбилекте белдереп, кеше исеменә ҡушамат булып йөрөгән. Башҡорт телендә **Ҡорман** һәм **Ҡорманай** исемдәре күп. **Корман** боронғо төрки телдәрҙә *yk* һала торған һауыттың атамаһы булған. «Уҡ» һүҙе менән **Уҡбай, Уғатар, Уҡбирҙе, Уҡтайхан, Уҡай** исемдәре билдәле. Шулай итеп, боронғо эш һәм яу ҡорамалдарының да атамалары кеше исеме булып тарихта һаҡланған.

## 17. Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларына бәйле исемдәр

Кеше исемдәрендә аҙыҡ-түлек һәм кейем-һалым атамалары ла сағылыш алған. Был төр исемдәрҙең күбеһе беҙгә килеп етмәгән, ләкин төрлө төрки телдәрендә һаҡланып ҡалғандары ғына ла боронғо кешенең көндәлек тормошонон, эстетик зауығының бер үсеш этабын күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Башҡорт телендә аҙыҡ-түлек атамалары (һәм терминдары) менән: **Аҙыҡ, Ризыҡ, Ризыҡҡужа, Буҙа би, Баллыбай, Баллыбикә** исемдәре бар. Был төр кеше исемдәре ҡаҙаҡ һәм алтай телдәрендә күп һаҡланған. Алтай телендә **Ҡымыҙ, Ҡорот, Бодьо** (буҙа), **Сүт** (һөт), **Тордой** (Гурба), **Талканчы;** ҡаҙаҡ телендә **Балым, Сүттибай, Талканбай, Айранбай, Эсел** (бал – *ғәр.* һ.), **Шекер, Хәлүә** һ.б. кеше исемдәре бар. Ҡырғыҙҙарҙа «майлы», «май» һүҙҙәре менән исемдәр булған (Дибаев). Рашид ад-дин **Курут** тигән исемде күрһәтә. Кейем-һалым, биҙәү әйберҙәренән тауарҙың төрҙәрен аңлатҡан һүҙҙәр исемдәрҙә сағылған. Башҡорт телендә **Айбарсын, Барсын, Барсанай, Барсынһылыу, Ебәк, Ебәкәй, Атлас** тигән төрлө тауар атамалары һәм кейем, биҙәнеү нәмәләренән **Япан, Тупый** (баш кейеме), **Кәпәс, Салбар, Итек, Итекша, Күлмәк, Сабатай, Аҡсаркда** (?), **Тана** (сын һиҙәп), **Төймәсәй, Муйынсаҡ** һәм «йопар», «уҡа», «тәңкә», «кейеҙ» һүҙҙәре менән исемдәр яһалған. Ҡаҙаҡ телендә **Кейеҙбай, Жибек, Баршин, Шуға** (йоҡа буҫтау), **Моншаҡ, Манат** (ҡыҙыл материя), **Маржан** (мәрйен), **Шолпыбай, Сырғабай, Аҡыҡ, Төймә, Итикхан,** алтай телендә **Торко** (ебәк), **Тана, Таначы, Таначак** (сын төймә), **Сырға, Топчы** (төймә) һәм ҡараҡалпаҡтарҙа **Сырға** исемдәре күрһәтелгән. **Барсынһылыу** исемен С. Е. Малов боронғо төрки яҙмаларында күрһәтә. Ебәктең синонимдары *барсын* һәм *торко* һүҙҙәре М. Ҡашғари һүҙлегендә бар.

Аҙыҡ-түлек һәм кейем-һалым атамаларынан яһалған кеше исемдәре юғарыла әйтеп киткәндәр менән генә сикләнмәй, башҡорт телендәге һымаҡ башҡа төрки телдәрҙә лә был төр кеше исемдәре әҙ һаҡланған.

Башҡорт телендә шулай уҡ *йорт, төҙөлөш* терминдарына ҡараған кеше исемдәре аҙ: **Төннөк, Төнтөк** тигән кеше исемдәре тирмәнең төнлөгөн аңлатыуы мөмкин. **Өрлөк, Сырлаҡ, Ҡапҡа** исемдәре һаҡланған.

### 18. Таш-металл атамаларына бәйле кеше исемдәре

Башҡорт исемдәре араһында таш, тимер һәм башҡа алтын, көмөш атамалары менән яһалған исемдәр байтаҡ.

Боронғо кешенең (таш быуат, тимер быуат) тарихында ҙур роль уйнаған «таш» һәм «тимер» һүҙҙәре бөтә төрки телдәрендә кеше исемдәре составында осрай. Башҡорт телендә «таш» һүҙе менән **Бикташ, Ташбулат, Таштимер, Ташбай, Ташбаш, Ташйөрәк**; «тимер» һүҙе менән **Тимер, Тимерәк, Тимеркәй, Тимерғол, Тимербай, Тимерйән, Тимербәк, Тимербулат, Тимерша, Актимер, Сынтимер, Тимерхан, Хантимер, Өстимер, Йәнтимер, Биктимер, Иштимер, Истимер, Юлтимер, Якшытимер, Тимершах, Тимер ҡарабуға, Тимербикә** кеше исемдәрендә һаҡланған. «Таш» һәм «тимер» һүҙҙәре бала *таш* һәм *тимер* һымаҡ ныҡ булһын, тигән теләк менән ҡушылыу сәбәпле (йола буйынса) борон-борондан әлегәсә йәшәп килә. Был исемдәр бөгөнгө көндә күп кенә төрки телдәрҙә ҡулланыла. Төркиғәрәп һүҙлегендә **Айтимер, Ҡоштимер, Исәнтимер, Тимерхан, Тимерташ, Бикташ, Алтынташ** исемдәре күрһәтелгән.

Башҡорт телендә «ҡорос» һүҙе менән **Ҡорос, Ҡоросай, Ҡорошай** исемдәре билдәле. «Ҡорос» һүҙенә синоним булып «булат» тигән фарсы һүҙе үҙләштерелгәс, **Булат, Аҡбулат, Айбулат, Тимербулат, Йәнбулат, Ташбулат** исемдәре яһала башлаған. «Булат» һүҙе менән исемдәр төрки халыҡтарҙа күп таралған. *Таш, тимер, ҡорос, булат* ныҡлығы менән кешенең күңеленә ятһа, *алтын, көмөш, алмас, ынйы, гәүһәр* һ. б. матурлығы менән кешенең күңелен биләй һәм был металдар тәүҙә матурлыҡ билдәһе булып, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡушыла. Һуңға табан йәмғиәттә алтын-көмөш ҡиммәтле металл булып, көс, шөһрәт билдәһенә әүерелгәс, «алтын» һәм «көмөш», «алмас» һүҙҙәре менән ир-ат исемдәре ҡушыла башлай. Башҡорт телендә «алтын» һәм «көмөш» һүҙҙәре ир-ат, ҡатын-ҡыҙ исемдәре составында һаҡланған. Ләкин металл һәм таштарҙан *тимер, алмас* һәм *еҙ* һүҙҙәре (**Алмас, Еҙбикә, Тимербикә**) ҡатын-ҡыҙ исемдәрендә һаҡланып ҡалыуын юғарыла әйтелгән фекерҙәр ҡеүәтләй. Фарсы телендә лә **Алмас** ҡатын-ҡыҙ исеме тип күрһәтелгән. Боронғо башҡорт исемдәренән: **Алтынғужа, Алтынсура, Алтынъюл, Алтынбай, Алтынбәк, Алтын** – ир-ат; **Алтын, Алтынбикә, Алтынсәс** ҡатын-ҡыҙ исемдәре; **Көмөш, Көмөшбай** – ир-ат һәм **Көмөшбикә, Көмөш, Еҙбикә, Аҡыкбикә, Алмас, Ынйы, Ынйыбикә, Ынйыкай** – ҡатын-ҡыҙ; **Баҡыр, Ҡалай, Аҡыкбай, Яхут** тигән ир-ат исемдәре билдәле. А. Дибаев ҡырғыҙҙарҙа **Баҡыр** исеме барлығын күрһәтә. «Алтын», «көмөш» һ.б. һүҙҙәр менән исемдәр Н. Ф. Катановтың һүҙлегендә айырыуса күп: **Айдас** (ай + тас), **Алтын кус, Алтын көк, Алтын мөкө, Алтын таҡтай, Пулай кан** (гәлсәр батша), **Алтын кереш, Ҡара тас мөкө, Час мөкө** (еҙ мөкө), **Пулай арыг** (саф гәлсәр), **Пулат, Пулаттай, Сарытас, Тимер йөрәк, Алтын торғай, Молат чураҡ** (булат йөрәк), **Алтын кач, Алтын ҡойб, Ал-**

**тынсач, Алтын пос** (таҫма), **Алтын сабаҡ** (еп), **Алтын тана** (төймә), **Алтын торғай, Алтын төлкө, Алтын Сәсәк, Алтын Апйол, Алтын куруп** (уймаҡ) һ. б. Ошондай исемдәр төрки халыҡтарҙа борон-борондан булған һәм бөгөнгө көндә лә ҡайһы берҙәре ҡулланылыуын дауам итә. Ыңғай тасуири көсө булған ҡиммәтле, матур *таш, тимер* атамаларының ҡаҙаҡ һәм башҡорт, хакас, ҡарасай-балҡар, туба телдәрендә кеше исемдәре булып йөрөүе тураһында ҡаҙаҡ телсеһе О. А. Султаняев әйтеп китә. Башҡорт исемдәре араһында осраған **Тәңкә**, **Тәңкәбикә**, ҡаҙаҡ телендәге **Жамбы** (төрлө алтын һәм көмөш ҡойолмаһы), **Дилда** (алтын аҡса), азербайжан телендәге **Динар** һәм **Динара** (ғәрәпсә – алтын аҡса), ҡырғыҙ телендәге **Тәңкә**, **Мәрүәт** (ынйы) исемдәре ошо ҡиммәтле, матур *таш* һәм *металдар* менән исем яһалыу процесының эстетик зауҡының артабанғы бер үҫешен тәшкил итәләр. Тимәк, ҡиммәтле, матур *таш* һәм *металдар* атамаһынан кеше исемдәре яһалыу борон-борондан килгән, бөгөнгө көндә «таш», «тимер», «булат» һүҙҙәре бала нығ булһын тигән йола менән ир-атҡа ҡушылыуын дауам итһә, матур таштарҙың атамалары матурлыҡ билдәһе итеп ҡатын-ҡыҙға ҡушыла.

### 19. Социаль титулдарға, дәрәжә атамаларына бәйле исемдәр

Боронғо төрки яҙмаларындағы кеше исемдәрен тикшереүсе ҡаҙаҡ телсеһе Т. Жанузаков боронғо төрки йәмғиәтендә ҡулланылып йөрөгән бик күп социаль титулдарҙы күрһәтә. Унда феодаллек осорона хас: *хаким* һәм *хан, бай, бей, бек, түрә, тархан, батыр, kаған, хан, ханша, kол, улуг, тутук, алп, терек, тоң, тоған, kулуг, тегин, боға, билге, бори, барс, чур, аталыk* – төрки һүҙҙәрҙе, *солтан, малик, әмир, абд, kазый, хажи, шайkы (шәйех), сопы (суфый) мулла* – ғәрәп, *шаh, kужа, мирза* тигән фарсы һүҙҙәре килтерелә. Быларға өҫтәп төрки телдәрендә осраған *сура, көбәк, сәсән, аға, ата, түрә, төлөк (түләк), шакман, шад (шат), ябғу, илек, санун, чукак* һәм ҡатын-ҡыҙ титулдары булып йөрөгән *kатын, бикә, бикәс, ханаkа* атамаларын күрһәтергә мөмкин. Был титулдарҙың дәрәжә атамаларының ҡасан һәм ниндәй дәүләт төҙөлөшөндә, ниндәй дәрәжәне күрһәтеп бирелеүе бик үк асыҡ булмаһа ла, ҡайһы берҙәренең килеп сығышы, ҡулланыла башланыуын тарихи сығанаҡтарҙан, боронғо яҙмаларҙан билдәләп, төҫмөрләп була. Билдәле булған титул һәм дәрәжә атамалары мәғәнәүи яҡтан кешенең ыңғай, яҡшы сифаттарын күрһәткән һүҙҙәргә ҡайтып ҡала. Батырлыҡты, ҡыйыулыҡты, ғәйрәтлелекте, көстө һәм аҡыллылыҡты, фекер йөрөтөү ҡеүәһен, туғанлыҡты белдергән һүҙҙәр титул атамаларына әйләнгән тип әйтергә кәрәк. Мәҫ., *батыр* – ҡыйыу; *бука* (бөкө) – көслө; *белге* (билге) – аҡыл эйәһе; *бегу* – аҡыл эйәһе; *төлөк* (түләк) – көслө, ғәйрәтле, *тоған* (шоңҡар) – батыр; *туңа* (барс, ҡаплан) – батыр, ҡыйыу; төҙ атыусы; *сура* – батыр, көбәк; *бей* һәм *бәк* – аҡыллы һәм нығ; *аға* – аҡыллы, аҡыл эйәһе; *баба* – аҡыллы, аҡыл эйәһе; *шат* – ҡыйыу, батыр; *сәсән* – аҡыллы һ. б. Аҡыллылыҡты, батырлыҡты, ҡыйыулыҡты, көслөлөктө аңлатҡан һүҙҙәр башта аҡыллы, ҡыйыу кешенең исеменә ҡушамат итеп ҡушылған булырға тейеш. Ошо яҡшы, ыңғай мәғәнәле ҡушаматтар, билдәле бер тарихи шарттарҙа, титулға әйләнеп киткән. Ә инде артабан исемдәр үҫешенең осоронда ошо титулдарҙың ҡайһыныһылыр ябай исем яһаусы һүҙ, исем компонентына әйләнгән.

Башҡорт исемдәре составында иң күп осраған титул (һуңынан исем яһаусы компонент) – «бай» һүҙе. Башҡорт шәжәрәләрендә ул «бей»

формаһында ҡулланылған. Бей (бай) һүҙенең башҡорт йәмғиәтендә титул һәм исем компоненты булып ҡасан ҡулланыла башлауын билдәләү ҡыйын, ләкин боронғо эпостарҙың береһе Күсәкбиҙең исеменә ҡарағанда был титулдың бик боронғо замандарҙан ҡулланылғаны күренә. Ҡаҙаҡ телсеһе Т. Жанузаков «бай» һүҙенең V–VIII быуат төрки яҙмаларында осрауын әйтә. Башҡорт тарихын тикшереүселәр (Кузеев) башҡорт йәмғиәтендә бей титулының ҡулланылышын феодал мөнәсәбәттәр ныҡынған һәм унда политик властың әһәмиәте артҡан осорға бәйләп, ошо политик властың башында бейҙәр торғанын билдәләй.

Хан//кан//ҡаған титулы бөтә төрки халыҡтарының кеше исемдәрендә сағылыш алған. Хан титулы VI быуаттарҙан Бөйөк төрки ҡағанаты заманынан билдәле, һуңынан монгол-татарҙар баҫып алыуынан һуң хан титулы төрки халыҡтары араһында тағы ла күбәйеп китә һәм иран халыҡтарына ла тарала. Баҫып алынған ерҙәрҙә хандар хөкөмлөк итеүе был титулдың күпләп таралыуына сәбәп була (ОИБ). Ҡыпсаҡ ырыуы ҡарыйҡыпсаҡ («Иң боронғо», «ҡарт» ҡыпсаҡ) шәжәрәһендә ҡыпсаҡ ырыуының башы Оғуз хандың Сыңғыҙ хандан дүрт мең йыл элек йәшәүе тураһында мәғлүмәт биреүе һәм башҡа башҡорт шәжәрәләренең ҡайһыларының Сыңғыҙ хандан башланып китеүе, хан дәрәжәһенең бик борондан килеүен, халыҡтар тарихында ҙур роль уйнауын күрһәтеп тора (БШ. 54). Башҡорт телендә хан/кан һүҙе титул атамаһы һәм ир-ат исемдәренең компоненты булып һаҡланған. (**Әхәт, Хәмәт хан, Жәнбәк хан, Исмаил хан, Бураҡ хан, Ханкай, Ҡаныҡай (Ханыҡай), Ҡанаҡас (Ханыҡас), Хансөйәр, Хансура, Хантимер, Ханбирҙе** һ.б.)

*Ябоғча* үҫәргән шәжәрәһендә бар. Был һүҙ тарихсы Л. Н. Гумилев күрһәткән *ябғу* титулы булыуы ихтимал. Ул *ябғу* титулы бик боронғо һәм хандан һуң беренсе дәрәжә булыуын күрһәтә.

*Бука, буға*. Көслө, батыр мәғәнәһендә боронғо башҡорт исемдәре составында һаҡланған. Боронғо төрки халыҡтары араһында үгеҙгә табыныу, уны хөрмәт итеп культ тип һанау тураһында Н. А. Аристов әйтеп китә. Башҡорт исемдәре араһында Үҫәргән шәжәрәһендә **Ҡара буға бей,** Бөрйән шәжәрәһендә **Тимер ҡарабоға**, Ҡыпсаҡ шәжәрәһендә **Буға би**, Ҡарыйҡыпсаҡ шәжәрәһендә **Букас**, Мең шәжәрәһендә **Сос-боға бей** һәм **Боға бей**, Әй ырыуы шәжәрәһендә **Юлбуға** һәм башҡа сығанаҡтарҙа **Боға**, **Бока**, **Бокай**, **Буғай**, **Букаш** исемдәре осрай. Был исемдәрҙең ҡайһыныһында буҡа/боға титул булып, ҡайһыныһында исем яһаусы компонент булып килеүен әйтеүе ҡыйын, башҡа төрки телдәрҙә лә «буға» һүҙе исем булып һаҡланған.

**Тархан** – боронғо төрки һүҙе. М. Ҡашғари һүҙлегендә исламиәттән элек ҡулланылған башлыҡ титулы тип аңлатылған. Тархан дәрәжәһе килеп сығышы буйынса ике төрлө булып, беренсеһе нәҫелдән нәҫелгә күсә килгән, икенсеһе шәхси тарханлыҡ дәрәжәһе булған. Нәҫелдән нәҫелгә күсә торған тарханлыҡ дәрәжәһе Ноғай, Ҡазан, Себер хандары заманынан билдәле булып, рус дәүләте ошо йоланы дауам итеп, ҙур хеҙмәт күрһәткән башҡорттарға тархан дәрәжәһе бирә килгән. Бәләкәй, ваҡ хеҙмәт өсөн дә шәхси (берәй кешегә генә) тарханлыҡ дәрәжәһе бирелер булған. Башҡортостанда XVI быуаттан башлап булған тарханлыҡ титулы башҡорттарға линия хеҙмәте (рус дәүләтенең Көнсығыш сиктәрен һаҡлаған) өсөн һәм рус армияһы менән хәрби походтарҙа ҡатнашыуҙары өсөн бирелгән (МИБ, У 13). Башҡорт тархандары рус дәүләтендә хеҙмәт иткәндәр һәм яһаҡ түләүҙән ҡотолғандар (бынан башҡа айырым хоҡуҡтар менән файҙаланғандар). 1754 йылда хөкүмәткә яһаҡ түләү туҡтатылғас, рус хөкүмәте башҡорт феодалдарына тархан титу-

лы бирмәй башлай һәм тархан дәрәжәһе әкренләп үҙ көсөн юғалта. Башҡорт телендә *тархан, дархан* формаһында **Аҡынсыҡ дархан, Китүк дархан, Ҡушай дархан, Бикдархан** һ.б. бар.

**Солтан** – иң юғары хаким, башлыҡ. Бартольд билдәләүенсә, Урта Азияла XV быуатта үзбәктәр заманынан «батша улы, Сыңғыҙ хан нәҫеле» мәғәнәһендә ҡулланылыуын билдәләй. Башҡорт телендә *солтан, салтан, һолтан* формаһында: **Салтан, Салтанай, Салтангилде, Салтанғол, Солтан, Солтанай, Солтанмулла, Солтанхужа** һ. б. осрай. Башҡорт телендә «солтан» һүҙе – шәп, аҡыллы, башлыҡ, хаким мәғәнәһендә билдәле. Башҡорт халыҡ йыры «Түрәкәй»ҙә: «...Һин икәнһең ирҙең солтаны» тип әйтелә. Антропонимдарҙа **Һолтанғол** (Күгәрсен р.); **Һултанғужа тауы, Һултан күле, Һултан уяһы** (Баймаҡ р.); **Һултас ауылы** (Хәйбулла р.), **Һултантимер ауылы** (Йылайыр р.); **Һултангүл күле, Аҙнаһолтан үҙәге** (Әбйәлил р.) атамалары билдәле. 1859 йылғы «ревизские сказки» материалдарында ҡатын-ҡыҙ исемендә иң актив компонент булып ҡулланылыуы күрһәтелә: **Аҡһолтан, Ишһолтан, Кинйәһолтан, Көнһолтан, Йопарһолтан, Муллаһолтан, Аҙнаһолтан** һ. б. Төрки телдәрҙә ҡатын-ҡыҙҙар исемдәрендә *һолтан* һүҙе «солтандың ҡыҙы» мәғәнәһендә ҡулланылыуы күрһәтелгән. XV–XVI быуат ҡомартҡыһы Бабурнамә яҙмаларында *солтан* титулы ҡатын-ҡыҙ исемдәре менән ҡулланылғаны билдәле.

«Түрә» һүҙенең иң боронғо мәғәнәһе *закон, йола* тигәнде аңлата. Тимәк, борон халыҡ йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен белеп, шуны тотҡан, халыҡ араһында тормошҡа ашырған абруйлы кеше *түрә – башлыҡ* итеп ҡуйылған. Артабан *түрә* һүҙе титул, дәрәжәне күрһәтеп ошондай ил ағаларына бирелер булған. 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы, башҡорт кавалерияһының полковнигы, **Ҡаһым түрә** исемендәге «түрә» һүҙе уның дәрәжәһен, титулын күрһәтеп бирелгән. Башҡорт телендә: **Түрәкәй, Түрә, Түрәхан, Түрәбирҙе, Йәнтүрә, Байтүрә, Яҡтүрә** тигән исемдәр, (**Байтурин, Йәнтурин, Түрәкәев**) фамилиялар билдәле.

«Батыр» һүҙе кешенең ҡылығындағы ҡыйыулыҡ, ғәйрәтлелек, көслөлөк сифатын билдәләп аталған дәрәжә булған. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосындағы Ҡарабай батыр тураһында Т. Беляев ошондай юлдар килтерә: «...когда Карабай убил араслана, подьехали к нему его товарищи, и, удивляясь толикой смелости, наименовали его батыром. С этого самого времени он всегда имел сие название». Башҡорт телендә **Алғышай батыр, Боҫҡонбатыр, Ҡартбатыр, Ямантайбатыр, Яубатыр, Салауатбатыр** тигән исемдәрҙә «батыр» һүҙе титул, дәрәжәне белдерә.

«Сура» һүҙе менән башҡорт телендә исемдәр күп: **Байсура, Йылҡысура, Юлсура, Төлкөсура, Алтынсура, Сынсура, Ҡолсура, Тимерсура, Төмәнсура, Ноғайсура, Ҡалмансура, Ҡайсура, Килсура, Килсурабай, Ишсура, Йәнсура, Сураман, Иҫәнсура, Теләүсура, Тәүләсура, Тимсур, Сурабай, Сура, Сурай, Дәүләтсура, Суракай, Сураш, Биксура, Мәмәтсура** һ. б. Боронғо башҡорт һәм сыуаш исемдәре составында осраған *сура* һүҙе боронғо төрки чур титулына бәйле тип ҡарарға мөмкин. Боронғо төрки һүҙлектә башҡорт (**Биксура**, **Ейәнсура**) исемдәренә тап килеп торған **Бегчур**, **Еганчур** (ДТС, 157) тигән исемдәрҙең алыныуы ошо фекерҙе раҫлай.

Шулай итеп, боронғо төрки яҙмаларында титул булып йөрөгән, «сура» («сур») һүҙе төрки телдәрҙә төрлө мәғәнәләрҙә кеше исемдәре составында һаҡланған. Башҡорт тарихында билдәле булған Шәғәле Шаҡман кенәздең исемендәге «Шаҡман» һүҙе лә (**Соҡман, Сукман** формаһында) боронғо төрки телдәрҙә батырҙарға бирелгән ҡушамат, титулға ҡайтып ҡала. М. Ҡаш-

ғари һүҙлегендә *сокман* һүҙе хаҡында батырҙарға, бәһлеүәндәргә бирелгән ҡушамат тип әйтелгән. *Сокман* һүҙе кеше исеме булып төрөкмән шәжәрәһендә алынған: Инәлгазиның ике улы тураһында, береһенең исеме **Тура**, икенсеһе – **Сукман**, тип әйтелә. «Мосолмандар династияһы» китабында төрөкмәндәргә ҡағылышлы **Мумин алдин Соҡман** I (1098) һәм **Котоб ад-дин Сокман II** (1185) тигән исемдәр килтерелә (Босворт). **Котоб ад-дин Сукман I** (1186), **Сукман** I һәм **Сукман** II әрмән шаһтары тип был исемдәр Рашид ад-диндә алынған. Тимәк, **Сукман** (**Шаҡман**) исеме борон төрки халыҡтарында ҡулланылған һәм башҡорт, төрөкмән телдәрендә һаҡланып ҡалған.

«Алп» һүҙе тураһында Ж. Ғ. Кейекбаев: «Боронғо башҡорт телендә батыр *ҙур кәүҙәле* мәғәнәһендә йөрөгән», тип әйтә. Ә боронғо төрки һүҙлектә (ДТС) «алп» һүҙе ике мәғәнәлә: 1) тура атыусы, мәргән; 2) батыр, бәһлеүән тип бирелә. Башҡорт халыҡ ижадында **Алпамыша** исеме һаҡланған.

«Хужа//ҡужа» (фарсы һүҙе) исемдәрҙә күп осрай. Төрки телдәрҙә титул булып ҡулланылған *хужа* һүҙе башҡорт исемдәрендә исем яһаусы компонент булып ҡына һаҡланған.

«Мырҙа» (фарсы һүҙе) башҡорт теленең көньяҡ диалектында «кусты» мәғәнәһендә ҡулланыла. Титул, дәрәжә атамаһы булып *мырҙа* (*мурза*) һүҙе башҡорт теленә XIVбыуаттан һуң, Алтын Урҙа ханлығы емерелеп, Башҡортостанды нуғай мурзалары бүлгеләп, хакимлыҡ иткән осорҙа инеүе ихтимал (ОИБ). Юрматы шәжәрәһендә: «Нуғайлар ғадәте шул ирде, би, мырҙа дип баш ийеп иөрдиләр». Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғас та *мырҙа* титулы ҡулланылыштан сыҡмай. Артабан шәжәрәлә Ноғай ханлығы осоро тасуирланып «Бурнаҡ би булды, Ядкар мырҙа булды. Аның ҡәрдәшләре барча мырҙа булдылар, ырығы күб ирде», тип әйтелә (БШ, 29-сы бит). «Мырҙа» һүҙе менән **Мырҙабай**, **Аҡмырҙа**, **Мырҙағол**, **Ишмыр-ҙа**, **Мирза** һ. б. исемдәр, фамилиялар ҡулланыла.

Боронғо замандарҙа төрки халыҡтарының ил тормошонда ҡатын-ҡыҙ ҙур роль уйнаған. Башҡорт тарихында был турала асыҡ ҡына мәғлүмәт һаҡланмаһа ла, «Башҡорт шәжәрәләре»ндәге ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ исемдәренә ҡарап, фекер әйтергә мөмкин. Башҡорт шәжәрәләренә 23 ҡатын-ҡыҙ исеме индерелеп, уларҙың күбеһе «бикә» компоненты менән яһалған (**Арыубикә**, **Еҙбикә**, **Алтынбикә** һ. б.) (БШ, 286–296). Тамъян шәжәрәһендә **Ҡыҙбәк** тигән *бәк* титулы, Сытырман һәм Моҡас ауылы юрматы шәжәрәһендә **Бибикә** тигән *бей* титулы менән яһалған ҡатын-ҡыҙ исемдәре бар. Тарихсылар билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙ исемдәренең шәжәрәләргә индерелеүе башҡорт йәмғиәтендә булған боронғо матриархат ҡалдығын күрһәтә (БШ, 184). Ә инде **Ҡыҙбәк** һәм **Бибикә** исемдәрендә «бей» һәм «бәк» һүҙҙәре боронғо титул, дәрәжә атамаларының бер сағылышы булып һаҡланып ҡалған. Исемдәр составында йәки үҙҙәре айырым исем булып һаҡланған «бикә», «ҡатын», «һолтан» һүҙҙәре лә сығышы менән боронғо төрки титулдарға барып тоташа («бикә» – *бей* ҡатыны, «ҡатын» – *хан* ҡатыны) (М.Ҡашғари, ДТС). Рашид ад-дин яҙмаларында **Ҡулан-хатун** (Чингиз хандың ҡатыны), **Тукузхатун** (Екүнең ҡыҙы, Толойҙоң ҡатыны) исемдәре килтерелә. Г. Ф. Благова «Бабур-намә яҙмалары»ндағы юғары даирә ҡатын-ҡыҙҙарының титулдары тураһындағы хеҙмәтендә *солтан*, *аға* (*ака*), *бикәм*, *ханым*, *ханзада* атамаларын килтерә.

Академик В. В. Вельяминов-Зернов (494) *ханыш* титулы тураһында былай ти: «Слово *ханыш*, в старину оно служило титулом, который давался девицам и вообще женщинам ханского или царского рода и значило почти тоже *ханика* и *ханым*...». Башҡорт исемдәрендә һаҡланған **Ҡаныш** исемдәре

һәм башҡорт халыҡ йырында ғына ҡалған «Һанаҡа» исеме ошо юғарыла әйтелгән титулдарға барып тоташа, тип ҡарарға мөмкин. *Ханака* һүҙенең титул булып ҡатын-ҡыҙ исемдәренә ҡушылып ҡулланылыуын Олуғбектең портретын тасуирлағанда Г. А. Пугаченкова бик асыҡ күрһәтә: «В гареме Улугбека было пять жен и шесть наложниц. Старшая из них, Аксултан ханике, дочь Султан-Махмудхана, подставного хана времени Тимура, от имени которого всесильный правитель чеканил монету, восседает ближе всех к шатру государя. Рядом с ней изображена Хусн-Нигар-ханике – дочь Халил-Султана и правнучка Тимура» (Пугаченкова Г. А.). *Хан, ҡан* титулдары менән төрки халыҡтарында ҡатын-ҡыҙ исемдәре байтаҡ һаҡланған. Н. Ф. Катанов тарафынан В. В. Радловтың «Төрки халыҡтары әҙәбиәте өлгөләренән» йыйып төҙөлгән кеше исемдәре теҙмәһендә *ҡан* (*хан*) һүҙе менән **Ҡан АрыҒ, Ҡан, Пурҡан, Ҡантарғаҡ (Хан тараҡ), Ҡысҡан (Ҡыҙхан), Ҡанар-Ҡо** һ. б. ҡатын-ҡыҙ исемдәре күрһәтелгән. Ҡараҡалпаҡ телендә «хан» һүҙе ҡатын-ҡыҙ исеме яһаусы компонент һәм **Ҡаным** (**Ханым**) формаһында айырым исем булып һаҡланған: **Ҡаным**, **Ҡаным бийке**, **Ҡанымжан**, **Арзыхан**, **Ару-ухан**, **Әжихан**, **Дәмехан**, **Айымхан** һ.б. (Карк. – РС, 777–778). Ҡырғыҙ телендә **Ҡаныш** тигән исем *хан ҡатыны* тип аталған.

Ғөмүмән, борон замандарҙа төрки халыҡтарында титул, дәрәжә атамалары, хөрмәтләү, батырлыҡты билдәләү һүҙҙәре күп ҡулланылған һәм ошо рәсми титулдарға ҡәҙәр туғанлыҡ, ололоҡ терминдары дәрәжә атамаһы булып йөрөгән.

### 20. Әйтелеш оҡшашлығына ҡоролған исемдәр

Бер ғаиләлә исемде бер-береһенә оҡшатып ҡушыу йолаһы сығышы менән боронғоға ҡайтып ҡала. Был йола ғөмүмән кеше исемдәре яһалыу һәм формалашыу процесында һуңғараҡ, матурлыҡ төшөнсәһенә бәйле барлыҡҡа килгән булырға тейеш. Оҡшаш исем ҡушыу борон төрки һәм иран халыҡтарында киң таралған.

Башҡорттарҙа, башҡа төрки халыҡтарҙағы һымаҡ, оҡшаш исем ҡушыу йолаһы ислам диненә ҡәҙәр үк булған. Башҡорт әкиәттәрендә был фекерҙе раҫлай торған миҫалдар күп. Ҡамыр батыр әкиәтендә игеҙ малайҙарға исем ҡушыу тураһында ошолай тиелә: «Бабай менән әбей бик ҡыуанғандар. Улдарына **Ҡамыр батыр** менән **Тамыр батыр** тигән оҡшаш ҡына исем ҡушҡандар» (БХИ). Уландарының исемен атаһының исеменә оҡшатып ҡушыу тураһында «Аҡмырҙа» әкиәтендә әйтелә: «Ул ауылда **Йәлмырҙа** тигән бер ҡарт ғүмер иткән, ти. Ҡарттың оҡшаш ҡына исемле өс улы булған, ти: өлкән улы – **Ишмырҙа**, уртансыһы – **Бикмырҙа**, кинйәһе – **Аҡмырҙа**» (БХИ). Артабан «Кейеҙбай менән батша ҡыҙҙары» тигән әкиәттә бер ғаиләләге малайҙарҙың исемдәренең оҡшашлығы әйтелә: «Булған ти, бер кешенең өс улы: өлкәне – **Йылҡыбай**, уртансыһы – **Кейекбай**, кинйәһе – **Кейеҙбай**» (БХИ). Башҡорт телендә оҡшаш исемдәр ҡушыу йолаһы бик алыҫ дәүерҙәрҙә, патриархаль-ырыу ҡоролошо шарттарында барлыҡҡа килгән һәм ғәжәп матур традицияға әйләнгән. Башҡорт телендә оҡшаш исемдәрҙе түбәндәге төрҙәргә бүлеп ҡарарға мөмкин:

1) Игеҙ балаларҙың исемдәрен бер-береһенә оҡшатып ҡушыу;
2) Ир баланың исемен атаһының исеменә оҡшатып ҡушыу;
3) Ҡыҙ баланың исемен әсәһенең исеменә оҡшатып ҡушыу;

4) Ир баланың исемен ағаһының исеменә окшатып ҡушыу;
5) Ҡыҙ баланың исемен апаһының исеменә окшатып ҡушыу;
6) Ғөмүмән ғаиләләге балаларҙың исемдәрен окшатып ҡушыу.

Был окшаш исемдәрҙең окшашлыҡ билдәләре лә күп исемдәрҙең беренсе өндәре окшаш; беренсе ижеге йәки беренсе компоненты рифмалаш; исемдәрҙең һуңғы өнө, ижеге, йәки һуңғы компоненты рифмалаш. Бер ғаилә кеше исемдәрен өҫтән генә күҙәткәндә лә исем һайлауҙа ниндәйҙер бер законлылыҡ һиҙелә. Мәҫ., тәүге ике өс баланың исеме асыҡ ижеккә бөтһә, һуңғы баланың исеме ябыҡ ижеккә бөтә. Йәки киреһенсә, тәүге балаларҙың исемдәре ябыҡ ижеккә бөтөп, һуңғы баланың исеме асыҡ ижеккә бөтә. Ошо исемдәр ҡушыуҙың бер миҫалы итеп Бөрйән шәжәрәһендәге исемдәрҙе килтерәбеҙ. Бөрйән бейҙең алтынсы быуын улы **Тимеркарабоғаның** улдары: **Аллаяр** һәм **Ҡотлояр**. **Аллаярҙың** улдары: **Монаш** һәм **Яманаш**. **Ҡотлоярҙың** улдары: **Жансары** һәм **Байсары**. Артабан, **Иҙелдең** улдары: **Ғөмәрбай, Ҡансөйәр, Жансөйәр. Ғөмәрбайҙың** улы **Юлдыбай, Юлдыбайҙың** улы **Тимербай. Ҡансөйәрҙең** улдары: **Бикмырҙа** һәм **Бикҡол. Бикҡолдоң** улдары: **Мөхәмәтйән, Мөхәмәтшәриф, Мөхәмәткәрим; Мөхәмәткәримдең** улдары: **Абызкилде, Ҡотлогилде, Аллабирҙе. Жансөйәрҙең** улдары: **Ҡобағош, Йортбағыш** һәм **Иманҡол, Теләпҡол, Ҡөҫәпҡол** (БШ, 122–125). «Ревизские сказки» материалдарында ла окшаш исемдәр ҡушыу йолаһын күрергә мөмкин: **Йондоҙ** һәм **Ҡондоҙ (Байсариндар)**; **Кейекбай** һәм **Үҙәнбай (Ямансариндар), Айбул** һәм **Илбул (Байтимеровтар), Буранбай** һәм **Ейәнбай, Төлкөбай** һәм **Ҡонанбай, Мөхибъямал** һәм **Фәхриямал (Алтынбайҙың** ҡыҙҙары) – игеҙәктәр. **Ҡарлуғас, Ҡарасәс, Һандуғас (Татлығужа Әҙелғужиндың** ҡыҙҙары); **Баҙамша** һәм **Әхмәтша (Әбделмәжиттең** улдары); **Ҡолоҡас, Байрас, Алтынса; Гөлъямал, Хәбибъямал, Сәхипъямал (Байрамбикәнең** ҡыҙҙары); **Айбикә** һәм **Аҙнабикә, Аҙнаһолтан** һәм **Айһолтан, Байрамбикә** һәм **Ҡапышбикә, Көлзәбиха** ҡыҙы **Көлғәйшә, Биккенә** һәм **Ишкенә** һ. б. (БШ). Окшаш исем ҡушыу йолаһы ислам дине, ғәрәп исемдәре менән дә һаман ҡулланыла килә. **Муса** һәм **Ғайса, Ноғман** һәм **Ғилман, Камалетдин** һәм **Хөснетдин, Бәхтегәрәй** һәм **Сәғәҙәткәрәй; Мөхәмәтсабир, Мөхәмәткәрим, Мөхәмәтрәхим, Әбдрәхим, Әбдрахман (Баймурзин Өмөтбайҙың** улдары). Окшаш исем ҡушыу бөгөнгө көндә лә киң таралған. Шулай итеп, төрки халыҡтарҙа борон-борондан килгән йола бөгөн дә йәшәп килә. Быны раҫлай торған мәғлүмәт башҡорт телендә һәм башҡа төрки телдәрҙә етерлек.

# ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ


*Абрамзон С. М.* Рождение и детство киргизского ребенка. «Сборник музея антропологии и этнографии». – М.-Л., 1949.

*Айдаров Г.* Язык орхонских памятников древнетюркской письменности VIII в. – Алма-Ата, 1971.

*Айплатов Г. Н.* О марийских собственных именах XVII века. «Советское финно-угроведение». – 1965. – № 1.

*Аннагилижов Ш.* Турменлерде ат дакылышы. – Ашгабат, 1969.

*Аннаклычев Ш.* Мотивы выбора имен у туркмен. Сб. «Личные имена в прошлом, настоящем, будущем». – М., 1970.

*Баскаков Н. А.* Русские фамилии тюркского происхождения: I. Сб. «Ономастика». – М., 1969; II. «Известия отделения литературы и языка АН СССР». – М., 1969. – №4; III. Сб. «Ономастика Поволжья – 1». – Ульяновск, 1969; IV. «Советская этнография». – 1969. – №4; V. Сб. «Антропонимика». – М., 1970; VI. Сб. «Восточно-славянская ономастика». – М., 1972; VII. Сб. «Этнография имен». М., 1971; VIII. «Русская речь». – 1970. – №6; IX. Сб. «Ономастика Поволжья – 3». – Уфа, 1973.

*Батманов И. А.* и др. Современная и древняя Енисейка. – Фрунзе, 1962.

Батырҙар тураһында ҡобайырҙар. *М. Буранғолов* тарафынан яҙып алынған. Научный архив БФАН СССР. Ф. 3, оп, 12., ед. хр. 226.

*Башкирская АССР.* Административно-территориальное деление. – Уфа, 1961.

Башкирские народные сказки. Запись и перевод *А. Г. Бессонова.* – Уфа, 1941.

Башкирские шежере. Составление, перевод текстов, введение и комментарии *Р. Г. Кузеева.* – Уфа, 1960.

Башҡорт легендалары. Төҙөүселәр, иҫкәрмә биреүселәр һәм редакторлаусылар доцент *М. Х. Минһажетдинов* менән проф. *Кирәй Мәргән.* – Өфө, 1969.

*Башҡорт теленең һүҙлеге,* I, II. – М., «Русский язык», 1993.

Башҡорт туй йолалары. *М. Буранғолов* тарафынан яҙып алынған. Научный архив БФАН СССР. Ф. 3, оп. 12, ед. хр. 215 а.

*Башҡорт халыҡ ижады, I.* – Өфө, 1954.

*Башҡорт халыҡ ижады, II.* – Өфө, 1959.

*Башҡорт халыҡ ижады.* Йырҙар. Беренсе китап. – Өфө, 1974.

*Башҡорт халыҡ ижады.* Эпос. Беренсе китап. – Өфө, 1972.

*Башҡорт халыҡ йырҙары.* – Өфө, 1954.

*Бегматов Э.* Номлар ва одамлар. – Тошкент, 1966.

*Белгородский Н. А.* Социальный элемент в персидских именах, прозвищах, титулах, фамилиях. «Записи института Востоковедения АН СССР».–1932. – №1.

*Беляев Т.* Куз-курпяч, башкирская повесть. «Башкирия в русской литературе». – Т.1. – Уфа, 1961.

*Бикбулатов Н. В.* Антропонимы и термины родства. «Ономастика – 3». – Уфа, 1973.

*Благова Г. Ф.* Тюркские средневековые женские личные имена (по материалам «Бабур-наме»). Сб. «Личные имена в прошлом, настоящем, будущем». – М., 1970.

*Босворт К. Э.* Мусульманские династии. – М., 1971.

*Будагов Л. З.* Сравнительный словарь турецко-татарских наречий. 1.1. – СПб., 1869.

*Будагов Л. З.* Сравнительный словарь турецко-татарских наречий. 1. II. – СПб., 1871.

*Вельяминов-Зернов В.В.* Исследования о касимовских царях и царевичах.– Ч.2.– СПб., 1864.

*Вельяминов-Зернов В.В.* Источники для изучения тарханства, жалованного башкирам русскими государями. Приложение к запискам Академии наук. – СПб., 1864. – Т.IV – №6.

*Гарипова Н. Д.* Персидские элементы в именах башкир. Сб. «Ономастика Поволжья–3». – Уфа, 1973.

*Гарипов Т. М., Кузеев Р. Г.* Башкирские родо-племенные названия и их алтайские параллели. «Проблема общности алтайских языков». – Л., 1971.

*Гарипов Т. М.* О древних кипчакских именах в антропонимии башкир. Сб. «Ономастика Поволжья–3». – Уфа, 1973.

*Гафуров Алим.* Лев и кипарис (о восточных именах). – М., 1971.

*Гордлевский В. А.* К личной ономастике у османцев. «Древности восточные». – T.IV – 1913.

*Гордлевский В. А.* Рождение ребенка и его воспитание. Материалы по османской этнографии. «Этнографическое обозрение». – 1910. – № 3 – 4. – М., 1911.

*Гукасян В.* Тюркизмы в истории албан Моисея Утийского. «Структура и история тюркских языков». – М., 1971.

*Гумилев Л. Н.* Древние тюрки. – М., 1967.

*Есбергенов Х. Е.* О близости пережитков доисламских верований в обычаях каракалпаков и башкир. АЭБ. – Т. IV – Уфа, 1971.

*Жанузаков Т.* Есимдер сыры (тайна имен). – Алма-Ата, 1974.

*Ибн-Фадлан Ахмед. Ковалевский А. П.* Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921 – 922 гг. – Харьков, 1956.

Иҙеүкәй менән Мораҙым. *М. Буранғолов* тарафынан яҙып алынған. Научный архив БФАН СССР. Ф. 2, оп. 12, ед. хр. 225.

*Илимбетов Ф. Ф.* Личные имена как источник при изучении древних верований башкир. Сб. «Ономастика Поволжья–3». – Уфа, 1973.

*Камалов А. А.* Гидронимия Башкирии. Автореферат канд. дисс., – Уфа, 1969.

*Камалов А. А.* Некоторые вопросы изучения топонимии Башкирии. Сб. «Ономастика Поволжья–3». – Уфа, 1973.

*Катанов Н. Ф.* Алфавитный указатель собственных имен, встречающихся в 1 томе образцов народной литературы тюркских племен, собранных В. В. Радловым. – СПб., 1888. – 34 с.

*Катанов Н. Ф.* Алфавитный указатель собственных имен...–Т.II. –СПб., 1888.–83 с.

*Кафтанников.* Араслан-бабр. «Башкирия в русской литературе». – Т.1. – Уфа, 1961.

*М. Кашғари.* (Девону луғотит турк, индекс – луғат). – Тошкент, 1967.

*Киекбаев Дж. Г.* Вопросы башкирской топонимики. «Ученые записки Башкирского государственного педагогического института им. Тимирязева». – Вып. VIII, серия филологическая. – №2. – Уфа, 1956.

*Кононов А. Н.* Родословная туркмен (сочинение Абу-л-гази хана Хивинского). – М.-Л., 1958.

*Кузеев Р. Г.* Очерки исторической этнографии башкир. – Ч. 1. – Уфа, 1957.

*Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа. – М., 1974.

*Кусимова Т. Х.* Антропонимы в башкирских шежере. Сб. «Ономастика Поволжья – 3». – Уфа, 1973.

*Кусимова Т. Х.* Из истории личных имен башкир. Сб. «Личные имена в прошлом, настоящем, будущем». – М., 1970.

*Курышжанов А. К.* Исследования по лексике старокыпчакского письменного памятника XIII в. «Тюркско-арабского словаря». – Алма-Ата, 1970.

Легендалар. *М. Буранғолов* тарафынан яҙып алынған. Научный архив БФАН СССР. Ф. 3. оп. 12, ед. хр. 228.

*Лоссиевский М. В.* Былое Башкирии и башкир по легендам, преданиям и хроникам. «Справочная книжка Уфимской губернии». – Отд. V.– Уфа, 1883.

*Магницкий В. К.* Материалы к объяснению старой чувашской веры. – Казань, 1881.

*Магницкий В. К.* Чувашские языческие имена. – Казань, 1905.

*Малов С. Е.* Памятники древнетюркской письменности. – М.-Л., 1951.

*Малов С.Е.* Памятники древнетюркской письменности Монголии и Киргизии. – М.-Л., 1959.

*Материалы по истории Башкирской АССР.* – Т. I. – М., 1936; – Т. III. – М., 1949; – Т. IV (в двух частях). – М., 1956; – Т. V. – М., 1960.

*Никольский Д. П.* Башкиры (Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование). – СПб., 1899.

*Никонов В. А.* Актуальные проблемы процессов в антропонимии татар и башкир. Сб. «Ономастика Поволжья – 3». – Уфа, 1973.

*Очерки по истории Башкирской АССР.* – Т. I. – Ч. I. – Уфа, 1956.

*Петровский Н. А.* Словарь русских личных имен. – М., 1966.

*Пугаченкова Г. А.* Портрет Улугбека. «Народы Азии и Африки». – 1969. – №6.

*Радлов В. В.* Опыт словаря тюркских наречий. – Т.1. – Ч.1. – СПб., 1893; – Т.II. – Ч.1. – СПб., 1899; – Т.III. – Ч.2. – СПб., 1905; – Т.IV – Ч.1. – СПб., 1911; – Т.IV.– Ч.2. – СПб., 1911.

*Радлов В. В.* Титулы и имена уйгурских ханов. «Записки Восточного отделения императорского русского археологического общества». – Т. V.– СПб., 1890, 1891.

*Рашид ад-дин.* Сборник летописей. – Т.1. – Кн.1. – М.-Л., 1952; – Т.1. – Кн.2. – М.-Л., 1952.

*Руденко С. И.* Башкиры. Историко-этнографические очерки. – М.-Л., 1955.

*Самойлович А.* К вопросу о наречении имени у турецких племен. Журн. «Живая старина». – Вып. II. – СПб., 1911.

*Суперанская А. В.* Общая теория имени собственного. – М., 1973.

Урал батыр (эпос). *М. Буранғолов* тарафынан яҙып алынған. Научный архив БФАН СССР. Ф. 3, оп. 12, ед. хр. 233.

*ЦГА Башкирской АССР.* «Оренбургская казенная палата». Ф. И. – 138; оп. 2, ед. хр. 640 – 793 һәм 53, 145, 151, 156, 172 һәм 205 – 285 һәм 626.

*Шакуров Р. З.* Топонимия бассейна реки Демы. Автореферат канд. дисс., – М., 1973.

### Һүҙлектәр

*Баскаков Н. А.* Каракалпакско-русский словарь. – М., 1958.

*Древнетюркский словарь.* – Л., 1969.

*Хамзаев М. Я.* Туркмен дилиниң сөзлүги. – Ашгабад, 1962.

*Хәмзин К. З., Мәхмүтов М. И., Сәйфуллин Г. Ш.* Ғарәпчә-татарча-русча алынмалар сүзлеге. – Казань, 1965.

*Юдахин К. К.* Киргизско-русский словарь. – М., 1965.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*Баш һүҙ* ....................................................5

Һүҙлектең төҙөлөшө ..............................9
Башҡорт алфавиты ................................10
Ҡыҫҡартылған билдәләр ......................11
Исемдәр донъяһы ...................................13
Ир-ат исемдәре ......................................18
Ҡатын-ҡыҙ исемдәре ...........................133
Исем яһауҙа даими ҡатнашҡан
һүҙҙәр һәм ялғауҙар ............................181
Исемдәр тарихы ...................................186
Ҡулланылған әҙәбиәт ..........................218

## СОДЕРЖАНИЕ

*Предисловие* ................................................7

Башкирский алфавит ...............................10
Условные сокращения ............................12
Мужские имена .......................................18
Женские имена .......................................133
Регулярные имяобразовательные
компоненты ..........................................184

НАУЧНО-ПОПУЛЯРНОЕ ИЗДАНИЕ

**КУСИМОВА Тансылу Хажимовна**
**БИККУЛОВА Светлана Адигамовна**

**БАШКИРСКИЕ ИМЕНА**

Зав. редакцией ХАНОВА З. К.
Редактор КАРАБАЕВА З. Ш.
Художник ГАЛИЕВ Ш. Э.
Художественный редактор ИСЛАХОВ Ф. Ф.
Технический редактор АБДРАХМАНОВА В. Р.
Корректоры ТЛЯМОВА А. Г., НЕЧАЕВА М. В.
Компьютерная обработка БОРИСОВОЙ Р. М.

Изд лиц. №04380., 26.03.01. Сдано в набор 20.07.05. Подписано к печати 06.10.05. Формат бумаги 70x100 $^{1}/_{16}$. Бумага офсетная. Гарнитура Тип Таймс. Печать офсетная. Условн. печ. л. 18,06+0,32 форз. Усл. кр.-отт. 19,99. Учетн.-издат. л. 15,94+0,58 форз. Тираж 5000 экз. Заказ № 1.0104.05.

Государственное унитарное предприятие Республики Башкортостан «Башкирское издательство “Китап”».
450001, Уфа-1, ул. Левченко, 4а.

Государственное унитарное предприятие Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
450001, Уфа, проспект Октября, 2.